ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

27-3 ноябрь - декабрь (ҡырпағай - аҡъюлай) 2021

№48 (986)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Малы барҙың һыйы бар



6

Беҙ атайһыҙ үҫтек...



8-9

Башҡорт милли кейеме...

төп нөсхәһендә тергеҙелә



11

Асылында йәшәү ниндәй мәртәбә!



12-13

ТВ-программа 14


***"Башҡорттар - ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата иҫ киткес әхлаҡи саф халыҡ. Башҡорттарҙың үҙенсәлекле сифаты булып уларҙың тыумыштан килгән намыҫлылығы, башҡаларҙың кешелек дәрәжәһен ихтирам итеү ғәҙәте һәм шуны үҙҙәренә ҡарата ла һаҡларға тырышыуы тора".***

***Д.П. Никольский.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ноябрь календарында бар ғаилә ағзаларының да тиерлек, йәғни ирҙәр, балалар, уландар, әсә көндәре айырым-айырым билдәләнә. Ошоға бәйләп, үҙегеҙҙең, шулай уҡ һеҙҙең ғаилә ағзаларының үҙ бурыстарын нисек үтәүен һөйләп китегеҙ әле.***

***Илнур ӘБДЕЛӘХӘТОВ, Күгәрсен районы:*** Эйе, байрамдарыбыҙ күп, шөкөр. Булып торһон әле. Календарҙа билдәләнгән иҫтәлекле даталар буштан ғына килеп сыҡмаған бит ул. Үрҙә телгә алынған көндәр бер-беренде ҡотлау һәм мотлаҡ байрам итеү өсөн генә түгел, мәҫәлән, туғанлыҡ ептәрен нығытыу, кешеләр араһында йылы мөнәсәбәт урынлаштырыу, хәл-әхүәл белешеү, яҡындарынды борсоған проблемаларҙы асыҡлау, иғтибар күрһәтеү өсөн дә билдәләнгән.

Ноябрь - шундай байрамдарға бай ай. Мин үҙем күп балалы ҙур ғаиләлә үҫтем. Алты баланың өсәүһе ул, өсәүһе ҡыҙ. Хәҙер үҙебеҙ бөтәбеҙ ҙә әсәй-атай, күптәребеҙ өләсәй-олатай инде. Беҙ тәрбиәләнгән ғаилә бөгөнгөнән бер аҙ айырыла ине. Берҙән, үҫеп буй еткергәнсе өләсәй-олатай ҡарамағында булдыҡ. Улар, билдәле инде, ҡыҙҙы - ҡыҙ, улды - ул итеп тәрбиәләүгә етди иғтибар бирҙе. Һәр беребеҙҙең йәшенә, енесенә ҡарап бурысыбыҙ бар ине. Ҡатын-ҡыҙ эшенә тығылһаҡ, йәғни күберәк түрбашта йөрөгәнде күрһә, олатай ороша торғайны. Усаҡ алды - һылыуҙарындыҡы, һин, ана, аҙбарға сыҡ, тип, булмаған эшен табып, беҙҙе, ейәндәрен урамға сығарып ебәрә ине. Ауыл ерендә инде ир-егет өсөн ихатала ла, һарайҙа ла эш күп. Ә мин бешеренергә, төрлө ысулдар табып, атай-әсәй эштән ҡайтҡансы бәләкәй туғандарҙы ниндәй ҙә булһа тәмле нәмә менән һыйлағым килә торғайны. Олатай өйҙә булмағанда ғына был яратҡан шөғөлөмдө тормошҡа ашыра инем. Өләсәй күрһә лә өндәшмәй. Бик күндәм, йыуаш, сабыр ине. Тауыш күтәреп әрләгәнен бер ҙә хәтерләмәйем.

Беҙҙә ҡыҙҙарға түгел, малайҙарға иғтибар ҙурыраҡ булды. Башҡа ғаиләләрҙәге кеүек мунсаға тәүҙә ҡыҙҙарҙы ебәрмәнеләр, ә иң беренсе атай беҙҙе йыуындырып сығара ине. Ашарға ла иң беренсе олатайға, атайға, улдарына һалдылар, шунан ғына ҡыҙҙарға. Һылыуҙарымды, һеҙ буласаҡ әсәйҙәр, тип яратып үҫтерҙеләр. Бәйләргә лә, сигергә лә, бешеренергә лә, гөл-сәскә үҫтерергә лә өйрәттеләр. Шөкөр, барыбыҙ ҙа үҙаллы тормош юлында үҙ һуҡмағын, үҙ ишен тапты.

Мин үҙем, улым тыуһа, атайым, олатайым һымаҡ тәрбиәләрмен, тип уйлағайным. Ҡатыным ике ҡыҙ ғына бүләк итте. Ейәнем тыуһа, яҡшы олатай булырмын тигәйнем, әлегә ике ейәнсәрем генә бар. Шулай ҙа, ҡыҙ - кеше балаһы, тип ҡарамайым уларға. Ҡулымдан килгәнсә ҡарашам, башҡортса телен онотмаһындар өсөн йәйге каникулда күберәк уларҙы үҙебеҙгә алып ҡайтабыҙ. Өләсәһенә лә күңелле, өйҙә, баҡсала эшләшергә ярҙам итәләр. Мин күберәк ейәнсәрҙәргә тарих, ауылыбыҙҙың күренекле кешеләре, халҡымдың арҙаҡлы шәхестәре хаҡында һөйләргә тырышам. Телдәре, милләте, халҡы менән ғорурланһын өсөн. Үткәнде белмәйенсә хәҙергене аңлап, яратып, ғорурланып булмай бит ул.

## МӨҒЖИЗӘЛӘР ДОНЪЯҺЫНДА

**Әбйәлил районы биләмәһендә ҡаҙыу эштәре алып барған саҡта йомро таштар табылыуы тураһында интернет селтәрендәге хәбәр бөтә йәмғиәтте ҡуҙғытып ебәрҙе. Уларҙың килеп сығышы тураһында фараздар күп булды. Берәүҙәр был әллә нисә мең йылдар элекке эраға ҡараған дәүерҙән ҡалған таштар, тип фекер йөрөтһә, икенселәр тәүтормош кешеләре ҡулланған булыуы мөмкинлеге тураһында бәхәсләште. Хатта таштарҙы сит ил планета вәкилдәре алып килгән, шулай уҡ динозаврҙың ҡатҡан йомортҡаһы имеш, тигән хәбәрҙәр ҙә ишетелде.**



# ЙОМРО ТАШТАРҘЫ...

## тәүтормош кешеләре ҡалдырғанмы?



Баҡтиһәң, бындай таштар тәбиғәттә йыш осрай һәм уларҙың килеп сығышы фәнни яҡтан күптән билдәләнгән. Әбйәлилдең йомро таштары тураһында билдәле белгес, геология-минералогия фәндәре кандидаты, доцент **Исхаҡ Фәрхетдинов** түбәндәге аңлатманы бирҙе:

- Был үҙенсәлекле формалағы таштарҙың барлыҡҡа килеүе вулкандарға бәйле. Бынан 400 миллион йыл элек Урал биләмәһе диңгеҙ аҫтында булған. Уның төбөндә урынлашҡан вулкандарҙан лава урғылған. Һыу аҫтында урғылған лава йомроланып ҡата. Ғалимдар быны "мендәрле лава" (подушечная лава), тип йөрөтә. 250 миллион йыл элек Урал тауҙары ҡалҡып сыға, диңгеҙ "китә" һәм йомроланып ҡатҡан таштар өҫкә күтәрелә. Быуаттар дауамында улар ел, ямғыр һәм башҡа һауа торошона хас күренештәр йоғонтоһонда түңәрәк формалағы таштарға әүерелә. Аныҡлап әйткәндә, әлеге таштар вулкан һәм магматик тоҡомдан торған базальттан тәбиғи шарттарҙа барлыҡҡа килә.

Бындай шар формаһындағы таштар базальтта ғына түгел, ә ултырма тоҡомдарҙа ла барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, ҡомташтан. Ләкин ҡомташтан барлыҡҡа килеү механизмы бүтәнсә. Ныҡ һыуланған ҡом ҡатламы ҡатҡанда, уның составындағы һыу китә һәм ҡом ҡатламының өҫтө бәләкәйләнә. Артабан, ҡатламдар араһында ҡыҫыла барып, ул түңәрәк формаға ҡала һәм ҡатҡан тоҡомға - ҡомташҡа - әйләнә. Ел уның әйләнә-тирәһендәге йомшаҡ өлөшөн "елләтә" һәм уларҙан конкрециялар - тауҙарҙағы ултырма тоҡомдарҙа барлыҡҡа килгән түңәрәк формалағы минераль ҡатламдар ҡалдыра.

Әйткәндәй, сферик конкрециялар хатта Марс планетаһында ла бар, ә был, үҙ сиратында, борон унда һыу булыуын аңлата.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

12+

✓ *Ейәндәремдең бүлмәһендә күренеп торған урында "Ысын ир-егет шулай булырға тейеш!" тип аталған стена гәзите эленеп тора. Уны улар аталы-уллы өсәүләшеп эшләгән.*



КЕМ АЛЫҠ?



# АҘНА ҺАЙЫН БҮЛӘК

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле бара. Сәмле, ғәмле, фекерле милләттәштәр өсөн йән аҙығы, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат шатбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ. Һеҙ - иң аңлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр.**

Шулай итеп, **2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы 731 һум 66 тин тәшкил итә.** Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен.

"Киске Өфө"гә яҙылыусыларҙы бер аҙ дәртләндереү өсөн тағы бер акция иғлан иттек. **15-нән 21-се ноябргә тиклемге аҙнала гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең барыһына ла күренекле шағирә Зөлфиә Ханнанова китаптар бүләк итә.** Шағирә белорус яҙыусыһы Алесь Карлюкевичтың "Шубуршун һәм уның дуҫтары" тигән әҫәрен тәржемәләп, китап итеп баҫтырып сығарған. Баҫма күберәк балаларға тәғәйенләнә.

**Ә 22-28 ноябрҙән "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә эшҡыуарҙар Миңзәлә һәм Кадурий Фазлетдиновтар Мәүлит Ямалетдиновтың "Ҡөрьән сүрәләренә шиғри аңлатмалар" китабын бүләк итә.**

**29 ноябрҙән 5 декабргә тиклем гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр бүләккә Әнүәр Әсфәндиәровтың "История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий" китабын аласаҡ.**




**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЫЛ АЙҘА...

# ТЕЛЕБЕҘ - ИМАНЫБЫҘ



**Ҡыштың - тәүге, йылдың ахырғы айы аҡъюлай беҙгә ни сәләмдәрен юллай, ниндәй көндәр юрай? Иң тәүҙә, әлбиттә, тажзәхмәттең ҡылығы һәм тәртибе ҡыҙыҡһындыра, ләкин был хаҡта иртәгәге һауа торошон күҙаллап булмағандай, аныҡ ҡына нимәләр әйтеүе лә ҡыйындыр.**

Шуғалыр ҙа Рәсәй ғалимдары һәм белгестәре араһында кемуҙарҙан төрлөсә гипотеза менән сығыш яһаусылар күп. Уларҙы ике төркөмгә бүлеп ҡарарға була. Тәүгеләре һаман булһа хәүеф юрай һәм ошо йылдың декабрендә тәүлегенә 40-35 мең сир йоҡтороу осрағының 60 меңгә барып баҫыуы бар, тип иҫәпләй. Был күңелһеҙ күҙаллау авторы - Рәсәй Фәндәр академияһының Химик биология институты ғалимы Сергей Седых (теленә - тилсә!). Ә бына Новосибирск ғалимдары декабрҙә пандемия кимәле баҫыла төшөр, тигән оптимистик фекер әйтһә лә, Яңы йыл баштарында 4-се тулҡын һөжүме ихтималлығын да инҡар итмәй.

Юрауҙарҙы, улар ниндәй генә күңелле йә хәүефле булмаһын, төплө нигеҙле тип әйтеп булмай шул. Был һауа торошо прогноздарында ла асыҡ күренә. Башҡортостанда ҡыштың нисек килерен синоптиктарҙың берәүҙәре ҡыҙыу йәй тәбиғәтенән сығып, ҡаты һалҡындарға юраһа, икенселәре аҡъюлайҙа йылы һәм уңайлы һауа торошона өмөт бағлай. Шул уҡ ваҡытта иң аҡыллы һәм мөғжизәле хаким - тәбиғәт үҙе бөтәһен дә асыҡ һөйләп тора, бары тик уның теге йәки был ишараларына иғтибарлы булыу ҙа етә. Мәҫәлән, ҡыр хайуандары күпләп аҙыҡ туплай икән, тимәк, улар ҡаты ҡышҡа әҙерләнә. Ауыл халҡына йорт хайуандары аша мәғлүмәт ебәрелә: мәҫәлән, йылҡы малы йә башҡа йорт хайуандарының һырт йөнөнә ҡарап та ҡыш нисек килерен әйтеп була, имеш: әгәр мундаһын ("холка" - ҡалаҡ һөйәктәре араһындағы урын) ҡалын йөн баҫһа, уҫал ҡышҡа әҙерлән, тиҙәр. Йә булмаһа, ҡоштарҙың йылы яҡҡа иртә китеп бөтөүе, урмандағы тубырсыҡтарҙың эре булыуы ла һыуыҡ ҡыш билдәһе икән. Ә шулай ҙа синоптиктар ни ти һуң? Аҡъюлайҙа Башҡортостан буйынса һәүетемсә, уртаса ҡышҡы һауа торошо көтөлә, ти улар. Әлбиттә, ҡыш ҡышлығын да күрһәтеп, һыуытып-семетеп тә алыр. Һауа температураһының минус 15-тән алып, ваҡыты һәм урыны менән - 20-нән дә түбәнәйеүе ихтимал.

Аҡъюлайҙағы иҫтәлекле көндәр календарын барлап, мөһим даталарҙың байтаҡ булыуын күрербеҙ. **Ләкин иң беренсе иғтибарҙы тартҡан Башҡорт теле көнөнә**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ноябрь календарында бар ғаилә ағзаларының да тиерлек, йәғни ирҙәр, балалар, уландар, әсә көндәре айырым-айырым билдәләнә. Ошоға бәйләп, үҙегеҙҙең, шулай уҡ һеҙҙең ғаилә ағзаларының үҙ бурыстарын нисек үтәүен һөйләп китегеҙ әле.***

***Сәғиҙә БОҪТОБАЕВА, Күмертау ҡалаһы:*** Ғаиләлә мин үҙем атай ҙа, әсәй ҙә булдым. Ирем менән балалар бәләкәй саҡта уҡ айырылыштыҡ. Рәнйетер тип ҡурҡып, башҡаса кейәүгә сыҡманым. Уларҙы ашатыу, кейендереү, уҡытыу нисек ауырға төшкәнен үҙем генә беләм. Бигерәк тә мәктәп йылдары ҡатмарлы булды. Ҡыҙым йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне, әммә улымдың үҫмерлек осоро ауырға тура килде. Өләсәйемдең: "Баланы Аллаһу Тәғәлә кешене һынамаҡҡа ебәрә", - тигән һүҙҙәрен бер ҡасан да онотманым һәм уны лайыҡлы үтергә бөтә көсөмдө һалдым.

Шөкөр, улым бөгөн - үҙе ике бала атаһы. Исем өсөн генә түгел, ә ысын мәғәнәһендә атай ул. Тиҫтерҙәре, дуҫтары артынан Себер тарафтарына эшкә китерме икән, тип борсолғайным, юҡ, улым "оҙон аҡса"ға ҡарағанда ғаиләһен өҫтөнөрәк күрҙе. "Үҙем атайһыҙ үҫкән дә еткән", - булды яуабы. Стажы артҡан һайын эш хаҡы ла артты, хәҙер үҙен бүлек етәксеһе итеп тәғәйенләнеләр. Улдарын тәрбиәләүгә, уҡытырға бөтә тырышлығын һала. Төрлө спорт секцияларына, буш ваҡыттары булмаһын өсөн бейеүгә лә, йырға ла йөрөтә. Ял көндәрен ғаиләһе менән тәбиғәттә булырға яраталар. Бәләкәй саҡтан уҡ республиканың иҫтәлекле урындары, тәбиғәт ҡомартҡылары менән таныштырып сыҡты. Үҙе белгән, яратҡан шөғөлдәренең барыһына ла өйрәтә. Уларҙа ҡатын-ҡыҙ эше, ир-егеттеке тип бүлеп ҡарау юҡ. Бар мәшәҡәтте лә бергәләшеп башҡаралар. Килен билмән эшләһә, бөтәһе лә кухняла. Өй йыйыштырыу, иҙән йыуыу, кер үтекләү кеүек йомоштарҙы ла һәр ҡайһыныһы теләп эшләй. Ейәндәремдең бүлмәһендә күренеп торған урында "Ысын ир-егет шулай булырға тейеш!" тип аталған стена гәзите эленеп тора. Уны улар аталы-уллы өсәүләшеп эшләгән. Бер-береһен аңлап, бер-берeһенә терәк булып йәшәгән улымдың ғаиләһенә күҙ тейеп ҡуймаһын инде, тип теләйем.

Ҡыҙымдың ғаиләһе, балалары менән дә ҡәнәғәтмен. Әсәлек бурысын да лайыҡлы атҡара. Өс балаһы ла тәрбиәле, тәртипле. Мәктәптәге уңыштары менән барыбыҙҙы ла һөйөндөрөп кенә торалар. Ир ҡатыны, килен булараҡ та үҙен тик яҡшы яҡтан күрһәтте. Түшәктә ятҡан бейемен бына ете йыл инде бала һымаҡ ҡарай. Аяҡҡа баҫтырам барыбер тиеп, ниндәй генә врачҡа алып барманы, ниндәй генә имсегә йөрөтмәне. Мәшәҡәтле булһа ла, коляскаға ултыртып, үҙҙәре йөрөгән театрға ла, концертҡа ла, ҡунаҡҡа ла алып баралар. Ҡоҙа-ҡоҙасаларҙың, күрше-тирәһенең, башҡа кешеләрҙең ҡыҙым тураһында тик яҡшы яҡтан ғына һөйләүҙәрен, ә килемдең, яҡшы ул тәрбиәләгәнһең, рәхмәт, тип әйтеүе иһә минең әсәйлек бурысымды намыҫ менән үтәүемә ҙур баһа тип ҡабул итәм.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓26 ноябргә Башҡортостанда 674 коронавирус инфекцияһы осрағы теркәлгән. Шулай итеп, сир йоҡторғандарҙың дөйөм һаны - 103,7 мең кеше. 38 пациент коронавирустан вафат булған. Дөйөм исемлектә - 3 418 ҡорбан. Әлеге ваҡытта республика стационарҙарында 540 кеше дауалана, уларҙың 350-һе - 60 йәштән уҙған кешеләр. Амбулатор шарттарҙа 7,1 мең кеше дауа ала, уларҙың 5,4 меңе 60-тан уҙған өлкәндәр.

✓Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин 2022 йылда йәшәү минимумын мең һумға арттырырға ҡушты. Шулай итеп, ул 12 654 һумға тиклем артырға тейеш. "Киләһе йылға федераль бюджет проектында хәҙер йәшәү минимумын 2,5 процентҡа индексациялау ҡаралған. Әлбиттә, был ғына етмәй, сөнки бындай параметрҙар һуңғы айҙарҙа күҙәтелгән ағымдағы инфляция кимәленән күпкә ҡалыша", - тине ул. Шулай уҡ Президент 2022 йылда хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен 8,6 процентҡа - айына 13 890 һумға хәтлем арттырырға ҡушты. Яҡын көндәрҙә Думаға минималь эш хаҡы күләмен һәм йәшәү минимумын арттырыу тураһында төҙәтмәләр индерелә.

✓Башҡортостан дауаханалары яңы ашығыс ярҙам машиналары алды. Автомобиль асҡыстарын республика етәксеһе Радий Хәбиров тапшырҙы. Тәүҙә ул ашығыс медицина ярҙамы күрһәтеү һәм сирлеләрҙе ташыу өсөн кәрәкле ҡорамалдар менән тәьмин ителгән автомобилдәрҙе ҡарап сыҡты. Салонда дефибрилляторҙар, электрокардиографтар, портатив пульсоксиметрҙар, үпкәне яһалма елләтеү аппараттары, ҡанда глюкоза кимәлен экспресс-үлсәгестәр бар. Яңы техника Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Нефтекама, Сибай ҡалалары, Дәүләкән, Белорет, Мәсәғүт, Нуриман, Благовещен, Бөрө үҙәк район дауаханалары автопаркын тулыландырҙы.

✓Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Рәсәй Фәндәр академияһының Башҡортостандағы тәүге һәм берҙән-бер учреждениеһы. Институт шәрҡиәттең классик йүнәлеше - төркиәт буйынса комплекслы тикшеренеүҙәр алып бара. Уның үҙенсәлеге шунда: бында башҡорт халҡының бай мәҙәниәте, теле, тарихы, этнологияһы өйрәнелә. 2016 йылдан институтҡа география фәндәре докторы, профессор Айбулат Псәнчин етәкселек итте. Ошо көндәрҙә уны философия фәндәре докторы, профессор Зөһрә Рәхмәтуллина алыштырҙы.

**✓ *Туған тел әҙәм балаһына ҡан хәтере аша бирелеп, көн дә яҡындарың, дуҫтарың, тотош ҡәүемең менән аралашыу, йәш быуынға һабаҡ-тәрбиә биреү - уларҙы уҡырға, яҙырға, һөйләшергә өйрәтеү теле ул.***



**(14) айырым туҡталып китеү кәрәктер. Туған тел көнө, моғайын да, байрам сараларына бай булыр: асыҡ дәрестәр ҡаралыр, диктанттар яҙылыр, яттан шиғырҙар һөйләнер, флешмобтар үткәрелер… Ләкин был бер көн менән генә сикләнә торған ваҡиға түгел. Әсә теле беҙҙең өсөн көн, сәғәт, минут һайын ҡабатлай торған иман шарты, көндәлек байрамыбыҙ, рухыбыҙ тантанаһы. Туған тел әҙәм балаһына ҡан хәтере аша бирелеп, көн дә яҡындарың, дуҫтарың, тотош ҡәүемең менән аралашыу, хәл-әхүәл белешеү, кәңәш-төңәш итеү, аңлашыу, ярашыу, яратыу, донъяны танып-белеү, йәш быуынға һабаҡ-тәрбиә биреү - уларҙы уҡырға, яҙырға, һөйләшергә өйрәтеү теле ул. Телеңә тоғролоҡ иманыңа тоғролоҡ менән үлсәнә торған категория.** Яңыраҡ ҡына булып үткән халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы тамамланып, тәүге дөйөм һандар яҡынса мәғлүм булған хәлдә лә башҡорт телен туған теле итеп таныусылар һаны әлегә билдәһеҙ. Ошо һан өсөн ситтән килеп, тартышып-ҡырталашып тигәндәй, өҫтәмә ревизия үткәреп, ҡайтанан һорауҙар алып, тикшереп-темеҫкенеп, ҡотҡо таратып йөрөүселәр ҙә бар, тиҙәр. Был һис килешкән эш түгелдер, сөнки һәр кем ҡан хәтере менән йәшәй һәм ҡасандыр әлегеләй ситтәр тарафынан телдәрен "алмаштырыу" сәйәсәтенең ҡорбаны ителгән хәлдә лә үҙ асылын үҙгәртмәй. Иманына, ата-бабаһы рухына, шәжәрәһенә тоғролар. Башҡорт телен, шулай итеп, әбей батша ғына киҫтермәгән, уға яҫҡыныусылар "янбаш аҫтынан" бөгөн дә килеп сыҡҡылай, әммә башҡорт телле халыҡ әле лә иманына хыянат ҡылмай, ике йөҙлөлөк күрһәтмәй, әсә теле өсөн тауыш биргәндер, тип ышанғы килә. Иҡтисад фәндәре кандидаты Вилүр Әхмәтов "Азатлыҡ" радиоһына биргән интервьюһында әйтмешләй, башҡорт телен туған теле тип танып, әсә телендә һөйләшеүселәр һаны артырына ышаныс бар, сөнки был йәһәттән һуңғы тиҫтә йыл эсендәге рухи күтәрелеш һәм йәнләнеү күҙгә күренерлек булды: башҡорт китаптары нәшер ителә, милли матбуғат һәм ТВ каналдары эшләй, интернетта башҡорт контенты бар, халыҡ үҙ телендә театр-концерт тамашалары ҡарай, урындарҙа гөрләп йола байрамдары үтә - быларҙың барыһы өсөн дә башҡорт теленә бурыслы һәм рәхмәтлебеҙ!

Ошо бөйөк башҡорт телебеҙ донъяға бөйөк шәхестәр бүләк иткән. Милләтебеҙҙең ана шундай йондоҙҙары араһында 14 декабрҙә тыуыуының 190 йыллығы билдәләнәсәк шағир-мәғрифәтсе, сәсән, педагог һәм философ Мифтахетдин Аҡмулланың исеме айырым урын алып тора. Донъяуи билдәлелеккә уны башҡорт теле күтәрә. Туған тел байлығы, һүҙ көсө шәхесебеҙгә халыҡтарҙы белемгә, яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа, ғәҙеллеккә өндәүҙә, ә яман уйлы, ҡомһоҙ, ҡуштан әҙәмдәрҙән әсе көлөп, уларҙы фашлауҙа үткер ҡорал булып хеҙмәт иткән. Ошо айҙа тыуыуына 125 йыл туласаҡ **(15)** тағы бер телһөйәр шәхесебеҙ - педагог һәм тәржемәсе, БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Дан Кинельский (Абдулла Иҙрисов) шулай уҡ яҙмышын туған теле менән бәйләй, Ҡөрьәнде башҡорт теленә тәржемәләп, халҡы күңелен иман нуры менән байыта, ҙур сауапҡа өлгәшә.

Аҡмулла хаҡында, шөкөр, яҡшы беләбеҙ, ә бына Кинельский кеүек исемдәре бик киң таралмаған зыялыларыбыҙ менән уҡыусыларҙы ҡыҫҡаса таныштырып китеү фарыздыр. Абдулла Мәхмүтйән улы Иҙрисов Ырымбур губернаһы Боғорослан өйәҙе Иҫке Ҡолшәрип ауылында тыуа. Атаһы ошо ауылдың имам-хатибы булып торған. Абдулла (Дан) ауыл мәсете ҡарамағындағы мәктәптә башланғыс белем алғас, Һамарҙа мәҙрәсә бөтөрә. 1916 йылда Тархан ауылында уҡыта. 1930-1956 йылдарҙа Башҡорт АССР-ының Иглин районындағы Рәсмәкәй ауылында, Ҡаҙаяҡ разъезы ҡасабаһында, унан Оло Теләк мәктәптәрендә уҡыта. 1938 йылда Өфө уҡытыусылар институтын тамамлай. Йәш быуынға белем биреүҙә оҙаҡ йылдар фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн 1949 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана. 1960-1970 йылдарҙа Ҡөрьәнде башҡорт теленә тәржемә итә. Дан Кинельский 1982 йылдың 5 ноябрендә Рәсмәкәй ауылында вафат була, Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Ҡыйышҡы ауылы зыяратында ерләнә. Шул да мәғлүм булһын: Дан Кинельскийҙың был тәржемәһе һуңғараҡ талантлы йәш ғалим-шәрҡиәтсе, тарих фәндәре кандидаты Фәнил Байышев етәкселегендәге ижади төркөм тарафынан ҡайтанан эшкәртелә һәм 1993 йылда Ҡөрьән башҡорт телендә баҫылып сыға. Ошо оло хеҙмәттәре өсөн тәүге тәржемә авторы Д.Кинельский (үлгәндән һуң) һәм яңыртылған баҫма авторҙары Салауат Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһына лайыҡ була.

Был айҙа тағы ла шундай даталар билдәләнә: Бөтөн донъя СПИД менән көрәш көнө **(1)**, Ҡоллоҡто бөтөрөү өсөн халыҡ-ара көрәш **(2)**, Билдәһеҙ һалдат, Халыҡ-ара инвалидтар көндәре **(3)**, Информатика **(4)**, Иҡтисад һәм социаль үҫеш хаҡына ирекмәндәрҙең халыҡ-ара көнө **(5)**, Мәскәү янындағы һуғышта совет ғәскәренең немец фашистарына ҡаршы контрһөжүм башлаған көнө **(5, 1941)**, Халыҡ-ара рәссамдар **(8)**, Ватан Геройҙары, Халыҡ-ара коррупция менән көрәш **(9)**, Кеше хоҡуҡтары, Бөтөн донъя футбол көндәре **(10)**, Халыҡ-ара тау көнө **(11)**, РФ Конституцияһы **(12, 1993)**, Башҡорт теле көнө **(14)**, Халыҡ-ара сәй көнө **(15)**, ЗАГС хеҙмәткәрҙәре **(18)**, Фәҡирҙәргә халыҡ-ара ярҙам **(19)**, Кешеләрҙең халыҡ-ара теләктәшлек, РФ хәүефһеҙлек органдары хеҙмәткәрҙәре көндәре **(20)**, БР Конституцияһы көнө **(24, 1993)**, РФ Ҡотҡарыусылар көндәре **(27)**, Кино, Гонаһһыҙ сабыйҙар көндәре **(28)**, Яңы йыл **(31)**.

**Аҡъюлайҙа тыуғандар:**

**12 -** 1973-1990 йылдарҙа "Арктика" атом боҙватҡысының өлкән мастеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР-ҙың почетлы полярнигы, сығышы менән Яңауылдан **Фидус Әсһәҙуллинға - 80 йәш** (1941).

**14 -** башҡорт шағиры, мәғрифәтсе, философ **Мифтахетдин Аҡмулланың** (Мифтахетдин Камалетдинов) тыуыуына - **190 йыл** (1831-1895).

**15 -** шағирә, тәржемәсе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Әнисә Таһироваға - 80 йәш** (1941).

**18 -** "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының баш музыка белгесе, БР Композиторҙар һәм Журналистар берлектәре ағзаһы, сәнғәт фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Миләүшә Иҙрисоваға - 60 йәш** (1961).

**29 -** селекционер, БР Фәндәр академияһының почетлы академигы, Социалистик Хеҙмәт Геройы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған агрономы, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, СССР Министрҙар Советы премияһы лауреаты, Ленин, Октябрь революцияһы, "Почет билдәһе" ордендары кавалеры **Сабирйән Ҡунаҡбаевтың тыуыуына - 120 йыл** (1911-1984).

**31 -** балет артисы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының педагог-репетиторы, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, 1953-1955 йылдарҙа Рудольф Нуриевтың педагогы, сығышы менән Салауат районы Мәсетле ауылынан **Зәһиҙә Бәхтийәрованың тыуыуына - 105 йыл** (1916-1978).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Ноябрь календарында бар ғаилә ағзаларының да тиерлек, йәғни ирҙәр, балалар, уландар, әсә көндәре айырым-айырым билдәләнә. Ошоға бәйләп, үҙегеҙҙең, шулай уҡ һеҙҙең ғаилә ағзаларының үҙ бурыстарын нисек үтәүен һөйләп китегеҙ әле.***

***Зәйнәб МОРАТОВА, Салауат ҡалаһы:*** Кейәүгә сыҡҡаныма быйыл ун йыл тула. Байтаҡ ваҡыт ҡайным-ҡәйнәм менән бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәргә насип булды. Айырым сығыуыбыҙға дүрт йыл ғына әле. Әммә иремдең ата-әсәһе менән йәшәгән йылдарымды шул тиклем һағынам. Улар миңә, ысын мәғәнәһендә, әсәй-атай булды, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Училищела уҡығанда берәй егет менән дуҫлашып йөрөһәм, минең үҙемдекеләр ҡасан кейәүгә сығаһың, ҡасан һоратырға киләләр, тип аптырата торғайны. Әйтерһең, мин өйҙә артыҡ тамаҡ инем. Тиҙерәк кейәүгә биреп, ҡотолорға уйлаған кеүек инеләр. "Үҙебеҙгә тиң кешеме? Беҙҙең һымаҡ булһа ғына сыҡ. Артыҡ бай ҙа булмаһын, беҙҙән өҫтөн тоймаһын, фәлән дә фәсмәтән... " - 17 йәш тулғас әсәй менән һөйләшеү беҙҙең гел шул темаға ине.

Ә минең кейәүгә сығыу түгел, ғашиҡ булғаным да, яратҡаным да юҡ. Әхирәтемдең туйынан һуң әсәй ҙә, үгәй атай ҙа тик мине нисек тә кейәүгә биреп ебәреү хаҡында уйланды. Егерме йәштә бергә эшләгән егет тәҡдим яһағас, риза булдым да ҡуйҙым... Әле булһа ҡыуанып бөтә алмайым! Шундай әҙәпле, мәҙәни, аҡыллы ғаиләгә эләккәнемә Хоҙайыма рәхмәтлемен.

Бик матур ҡаршыланы улар мине. Бер йыл тирәһе минең бер эшемә лә ҡыҫылманы бейемем менән ҡайным. Бешергәнемде маҡтап ашанылар, йыуғанымды рәхмәт әйтеп кейҙеләр. Етешһеҙ яҡтарын күреп, тәнҡитләп, бер һүҙ әйткәндәрен иҫләмәйем. Ә бит кейәүгә сыҡҡанда мин бер нәмә лә эшләй белмәй инем, сөнки әсәйем ҡул араһына инеп, ҡыҫылып эшләп йөрөгәнде яратманы.

Ә иремдең ғаиләһендә барыһы ла башҡаса ине. Эштән ҡайтлар ҙа барыһы ла кухняға инеп, бергә ашарға әҙерләйҙәр. Ҡайным да етәксе булып эшләйем тип торманы, биленә алъяпҡыс быуып, йә картуф, йә һуған әрсешә, ит турай. Һауыт-һаба йыуыуҙы ла унда бер кем дә бисәләр эше тип тормай. Шуға ла был өйҙә бөтә нәмә лә тәмле килеп сыға, таҙа, бөхтә, ауыҡлы күренә ине. Өҫтәл артында бөтәһе лә матур итеп һөйләшеп ултыралар.

Килен булып төшкән ғаиләнең үҙҙәренә генә хас традициялары бар ине. Календарҙағы ҡыҙыл менән билдәләнгән һәм билдәләнмәгән бер байрам да ситтә ҡалманы унда. Олоно оло, кесене кесе, йәште йәш итеп күрҙеләр, барыһына ла иғтибарлы, ихтирамлы булдылар. Бер көн шулай өйгә бейемдең бергә эшләгән хеҙмәттәштәре килеп тулды. Уның бешергән ҡоймаҡтарын, бәлештәрен маҡтап ашай башлағайнылар, күҙен дә йоммай, киленем әҙерләне, тине. Мин түгел, тип әйтергә ауыҙымды ғына асҡайным, ҡараштарыбыҙ осрашты һәм телемде тешләнем. Хәҙер тегеләр миңә маҡтау һүҙҙәрен яуҙыра башланылар. Шунда ул ҡаты ғына итеп: "Ай тормай ат маҡтама, йыл тормай килен маҡтама", - тине. Был әйтем миңә ҙур аҡыл булды.

Ысынлап та, бер йылдан һуң ғына ул мине үҙе белгәндәргә ныҡлап өйрәтә башланы. Хәҙер ул, минән дә оҫтараҡ бешерәһең, тип ҡабатларға ярата. Ғүмерем аҙағынаса ҡайным-ҡәйнәмә рәхмәтле буласаҡмын. Уларҙың икеһе лә миңә оло тормош һабағы бирҙе.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда балалар тәрбиәләүҙәге хеҙмәттәре, ғаилә ҡиммәттәрен һәм традицияларын һаҡлауға һәм нығытыуға тос өлөш индергән өсөн 18 кеше "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән бүләкләнә. Указға ярашлы, был наградаларға Благовещен, Дәүләкән, Туймазы, Хәйбулла, Саҡмағош райондарында һәм Өфөлә йәшәүселәр лайыҡ булды. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән хеҙмәттәре Башҡортостанды данлаған балалар тәрбиәләгән ата-әсәләрҙе бүләкләйҙәр. Спортта, ижадта, хәрби хеҙмәттә өлгәшкән ҡаҙаныштарҙан тыш, ғәҙәти тормоштағы героик эштәр ҙә билдәләнә.Бынан тыш, ун йылдан ашыу өс һәм унан күберәк инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр ҙә миҙал менән бүләкләнә.

✓ Башҡортостанда 2291 яңы йыл шыршыһы ҡуйыла. Уларҙы ҡуя башланылар ҙа инде. Коронавирусҡа бәйле урамдағы майҙансыҡтарға айырыуса ҙур иғтибар бүленә, тип хәбәр итте республика Башлығы хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте. Йәмғеһе 1 160 яңы йыл ҡаласығы, 756 боҙ һырғалағы һәм 1 173 тау була. Өфөлә яңы йыл майҙансыҡтарын ихаталарҙа ла эшләйҙәр.Арт-объекттарҙы бер ярым тапҡырға арттырыу күҙаллана. Ә биналарҙы һәм майҙандарҙы яңы йыл уттары биҙәйәсәк.

✓ Башҡортостан юлдаш телеканалының "Сәләм" тапшырыуында Республикаға идара итеү үҙәгенән тура бәйләнешкә сыға башлайҙар. Башҡортостанға идара итеү үҙәге командаһы көн һайын иртәнге 9 тула 20 минутта республика халҡын борсоған мәсьәләләр, "Инцидент менеджмент" мәғлүмәт системаһына килгән ялыуҙар, халыҡтың проблемалары ни тиклем тиҙ хәл ителеүе тураһында һөйләй. "Сәләм" көн дә иртәнге 7-нән 10-ға тиклем башҡорт һәм рус телдәрендә эфирға сыға. Республикаға идара итеү үҙәгенән башҡорт телендәге тура бәйләнеште шишәмбе һәм кесаҙна иртәнге сәғәт 9-сы 10 минутта ҡарарға мөмкин.

✓ Милек, ер һәм транспорт һалымын түләү ваҡыты 1 декабрҙә тамамлана. Әлегә тиклем һалым белдереүе килмәгән булһа, уны йәшәгән урын буйынса почта бүлексәһендә, күп функциялы үҙәктә, һалым хеҙмәтендә, шулай уҡ Федераль һалым хеҙмәтенең сайтында "Һалым түләүсенең шәхси кабинеты"нда алырға мөмкин. "Башинформ" хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда йәшәүселәргә 5,8 миллиард һумлыҡ милек һалымы иҫәпләнгән. Уның күпселек өлөшө транспортҡа тура килә - 3,1 миллиард һум. Мөлкәткә - 1,8 миллиард, ергә 0,9 миллиард һум күләмендә һалым инер тип көтөлә.

✓ ***"Әйҙәгеҙ, совет замանындағы белем биреү мәктәбен тергеҙәйек. Ул донъяла иң яҡшыһы ине, закон сығарыу тәҡдимдәребеҙ шуға йүнәлтелергә тейеш. Берҙәм дәүләт имтиханын бөтөрөргә кәрәк. Был йәштәрҙе яфалау ғына".***



ҠЫҪҠАСА

# БУШЛАЙ ҺӨТ

✓ **Башҡортостанда "Һөт кухнялары" селтәрен үҫтереү дауам итә. Был турала республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙҙы.** "Өс йыл самаһы элек һөт кухняларын яңыртырға хәл иттек, ошо ваҡыт эсендә ете тулы етештереү майҙансығы эшләй башланы. Улар Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Белоретта, Сибайҙа һәм Үрге Ҡыйғы ауылында урынлашҡан. Шулай уҡ барлыҡ муниципалитеттарҙа 140 пункт эшләй. Башҡортостанда аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙәге 23 400 бала, 39 етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған бала, шулай уҡ 404 йөклө ҡатын-ҡыҙ һәм бала имеҙгән әсәләр бушлай һөт ризыҡтары менән тәьмин ителә. Күптән түгел "Һөт кухняһы"нда яңы эремсек барлыҡҡа килде. Ул, элекке серия эремсеге кеүек үк, тәбиғи продукттарҙан әҙерләнә. Был ныҡ файҙалы һәм тәмле. Мөмкинлек булыу менән үҙебеҙҙең таратыу пункттары селтәрен киңәйтергә, ә киләсәктә республиканың барлыҡ райондарын үҙебеҙҙә етештерелгән продукция менән тәьмин итергә ниәтләйбеҙ. Быны яҡшы йүнәлеш тип иҫәпләйем, балаларҙың һәм уларҙың әсәләренең һаулығы - бөтә нәмәнән дә мөһимерәк", - тине Радий Хәбиров.

✓ **Тәфтиш комитеты рәйесе Александр Бастрыкин Берҙәм дәүләт имтиханын бөтөрөргә кәрәк тип иҫәпләй.** "Әйҙәгеҙ, совет заманындағы белем биреү мәктәбен тергеҙәйек. Ул донъяла иң яҡшыһы ине, быны бөтәһе лә таныны, закон сығарыу тәҡдимдәребеҙ шуға йүнәлтелергә тейеш. Берҙәм дәүләт имтиханын бөтөрөргә кәрәк. Был йәштәрҙе яфалау ғына", - тине ул "Кешенең именлеген тәьмин итеүҙә хоҡуҡтың роле" конференцияһында сығыш яһап. Бынан алда Бастрыкин "РИА Новости" агентлығына интервьюһында дистанцион уҡытыуҙы тәнҡитләне. Бындай форматта материал традицион белем алыуға ҡарағанда насарыраҡ үҙләштерелә, тип билдәләне ул. Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә белдереүҙәренсә, Берҙәм дәүләт имтиханынан тулыһынса баш тартыу белем сифатын кәметеүгә килтереүе ихтимал. Бынан тыш, имтихан - абитуриенттарҙы юғары уҡыу йорттарына һайлап алыу өсөн һөҙөмтәле механизм.

✓ **Башҡортостанда өсөнсө кварталда күсемһеҙ милек 4-5 процентҡа ҡиммәтләнгән.** Баҙар быйыл әүҙем үҫешә башланы, аналитиктар быны льготалы ипотека программаһы менән бәйләй. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, беренсел баҙарҙа хаҡтар 2020 йылдың икенсе кварталына ҡарата - 5 процент, дүртенсе кварталына 9,5 процентҡа артҡан. Икенсел баҙар ағымдағы йылдың апрель-июненә - 4,2 процент, уҙған йылдың аҙағына 8,8 процент үҫеш күрһәткән. Республика буйынса беренсел баҙарҙа квадрат метрҙың уртаса хаҡы беренсе кварталда - 71,8 мең һум, икенсеһендә - 73,8 мең һум, өсөнсөһөндә 77,5 мең һум тәшкил иткән. Икенсел баҙарҙа "квадрат"тың уртаса хаҡы - 63,4, 64,9 һәм 67,7 мең һум. Өфөлә хаҡтар күпкә юғары. "Фатирҙар донъяһы" федераль порталы мәғлүмәттәре буйынса, беренсел баҙарҙа квадрат метрҙың уртаса хаҡы өсөнсө кварталда - 93,2 мең һумдан ашыу. Өфөлә беренсел баҙарҙағы фатирҙың уртаса хаҡы - 4,8 миллион һум. Баш ҡаланың икенсел баҙарындағы хәл: "квадрат"тың уртаса хаҡы - 82,4 мең һум, фатир - 4,62 миллион һум.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# РАУИЛ БИКБАЕВ ИСЕМЕНДӘГЕ...

**Депутаттар Өфөнөң Көньяҡ паркына республиканың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың исемен бирергә тәҡдим итте.**

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының Мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт комитеты ҡарамағындағы мәҙәниәт буйынса эксперт советы был тәҡдимде хупланы. "Дәүләт Йыйылышына граждандарҙан күренекле башҡорт шағиры Рауил Бикбаевтың исемен мәңгеләштереүгә ҡағылышлы мөрәжәғәттәр килә, - тип хәбәр итте Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Республика халҡы быға тиклем республика Башлығының "Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхвәт улы Бикбаевтың хәтерен мәңгеләштереү тураһында" указына ярашлы башланған эште тиҙләтеүҙе һорай. Былтыр Киров районы Көньяҡ биҫтәһендәге яңы паркка шағирҙың исеме тәҡдим ителде. Әлегә башланғыс тормошҡа ашырылмаған". Парламент спикеры һүҙҙәренсә, хәҙер был мәсьәләгә кире ҡайтырға һәм башланған эште тамамлап ҡуйырға кәрәк. "Рауил Бикбаев баһалап бөткөһөҙ әҙәби һәм ғилми мираҫ - уҡыусылар, шиғриәт һөйөүселәр, ғалимдар араһында ла танылыу яулаған 50-нән ашыу шиғри, әҙәбиәт ғилеме, ғилми-тикшеренеү әҫәрен ҡалдырған, - тине Константин Толкачев. - Мин уны шәхсән белә инем: 2008 йылда Рауил Төхвәт улы Дәүләт Йыйылышы депутаты итеп һайланды. Ул ысын халыҡ шағиры ине. Беҙ уның ижади мираҫын популярлаштырырбыҙ һәм уның тураһында иҫтәлекте һаҡларбыҙ".

# БАЙРАМДЫ ҠАРШЫЛАП...

**Өфөлә 450 йыллыҡ юбилей уңайынан яҡынса 50 миллиард һумға объекттар һалына һәм төҙөкләндерелә.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң 450 йыллығына һалынырға һәм төҙөкләндерелергә тейешле объекттар исемлеге тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Ошо маҡсатҡа федераль һәм республика бюджеттарынан яҡынса 50 миллиард һум аҡса тотоноу планлаштырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, тантаналар 2024 йылда ойошторола. Радий Хәбиров әйткәнсә, был юбилей ҡунаҡтар өсөн түгел, ә тәү сиратта ҡала халҡы өсөн. Шуға күрә бөтә ихаталарҙа, урамдарҙа, парктарҙа, скверҙарҙа тәртип урынлаштырыла. Төп төҙөлөш объекттары ла була, бына уларҙың бер нисәһе:

- Яңы Евразия китапханаһы (4 миллиард)
- "Өфө -2 ҡаласығы" археологик материалдар һаҡлағысы (1,5 миллиард)
- Дим биҫтәһендә ишеү слаломы өсөн ҡоролмалар комплексы (396 миллион)
- Спорт көрәше үҙәге (5,3 миллиард)
- Фехтование үҙәге (700 миллион)
- Математика лицейы (2,9 миллиард)
- Кузнецов затонында 2200 урынлыҡ мәктәп (2 миллиард)
- Һуғыш ветерандары госпиталенең яңы корпусы һәм уны йыһазландырыу (6 миллиард)
- Октябрь революцияһы урамын (1,37 миллиард), Пугачев урамын (3,8 миллиард) төҙөкләндереү
- Генерал Рыленко һәм Пугачев урамдары киҫелешендә юл үткәргес төҙөү (3,8 миллиард)
- Генерал Рыленко урамын төҙөү (3,8 миллиард)
- Кузнецов затонында Өфөнө көньяҡтан урау юлы (450 миллион)
- Йәмәғәт транспортын модернизациялау (998 миллион)
- Воровский урамы тәңгәлендә Ағиҙел аша күперҙе ремонтлау (4 миллиард)

# СИТКӘ ЛӘ ҺАТАБЫҘ...

**Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнеше ғинуар-сентябрҙә 3,4 миллиард доллар тәшкил иткән. Экспорт күләме - 2,7 миллиард доллар, импорт - 0,7 миллиард доллар. Федераль таможня хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, әйләнеш күрһәткесе уҙған йылдың осоронан 28 процентҡа юғарыраҡ.**

Башҡортостан экспортының нигеҙен алты төп тауар төркөмө: нефть һәм нефть продукттары, химия сәнәғәте продукцияһы һәм каучук, машина эшләү, аҙыҡ-түлек һәм уның өсөн сеймал, ағас һәм целлюлоза-ҡағыҙ изделиелары, металл һәм уларҙан изделиелар тәшкил итә, тип белдерҙеләр Башҡортостандың Тышҡы иҡтисади эшмәкәрлек буйынса дәүләт комитетында. Төбәктәр рейтингында Башҡортостан экспорт буйынса 25-се урынды биләй, шул уҡ ваҡытта республика карбонат, ағас-юнысҡы плитәләр, арҡандар, шнурҙар һәм поливинилхлорид экспорты йәһәтенән беренсе; турбодвигателдәр һәм газ турбиналарын оҙатыу буйынса икенсе; кальцийлы сода экспорты йәһәтенән өсөнсө урында тора, тип билдәләнеләр дәүләт комитетында. Ҡытай, Ҡаҙағстан, Беларусь, Нидерландтар, Финляндия, Төркиә, АҠШ, Германия, Латвия, Үзбәкстан 2021 йылдың ғинуар-сентябрендә Башҡортостандың ун контрагент иле исемлегенә инде. Был илдәр менән сауҙа әйләнеше 2 миллиард долларҙан ашыу тәшкил иткән (тышҡы сауҙа әйләнешенең дөйөм күләменән 62 процент).

# ЭШ БИРЕҮСЕГӘ ЯРҘАМ

**Был көндәрҙә 800-ҙән ашыу эш биреүсе федераль программа буйынса ярҙам алды. 2021 йылдың мартында эшләй башлаған федераль программа буйынса бөгөн 1350 эшһеҙ кеше эшкә урынлашҡан. Унда бөтәһе 825 эш биреүсе ҡатнашҡан. Ярҙам саралары сиктәрендә октябрҙә 120 эш биреүсенең хеҙмәт коллективтары 240 граждан менән тулыландырылған.**

- Сарала ҡатнашҡан һәр өсөнсө кеше эшһеҙ ине. Субсидияланған яллау программаһы буйынса 35 инвалид, 256 пенсия алды йәшендәге, 116 яңғыҙ йәки балиғ булмаған йәштәге балалар тәрбиәләгән күп балалы ата-әсә, төрмәнән сыҡҡан 3 граждан эш тапты. Был сара беҙгә социаль яҡтан яҡланмаған категорияға ҡарағандарҙы эшкә урынлаштырырға өҫтәмә мөмкинлек бирә, пандемия сәбәпле барлыҡҡа килгән эшһеҙлек кимәлен кәметергә булышлыҡ итә, - ти Башҡортостан ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрының беренсе урынбаҫары Юрий Мельников.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: октябрҙә программаға төҙәтмә индерелде - яңы ҡағиҙә буйынса, эш биреүселәр 2021 йылдың 1 августына мәшғүллек үҙәгендә иҫәптә торған эшһеҙ граждандарҙы эшкә ҡабул иткән өсөн дәүләт ярҙамы ала. Быға тиклем ул 2021 йылдың 1 ғинуарына тиклем иҫәптә торған һәм "эшһеҙ" тигән статусы булған кешене урынлаштырған өсөн бирелә ине. Шулай уҡ эшкә урынлашҡанда дәүләт ярҙам итәсәк конкурста ҡатнашыусыларҙың исемлеге киңәйтелде. Әгәр быға тиклем унда 2020 йылда уҡыу йортон тамамлаусылар ғына булһа, хәҙер эш биреүсе инвалидлығы булған граждандар, инвалид бала тәрбиәләгән яңғыҙ һәм күп балалы ата-әсәләр, иректән мәхрүм итеү урындарынан сыҡҡандарҙы эшкә урынлаштырған өсөн субсидия аласаҡ.

Яңы вариантта ул ағымдағы йылдың 15 декабренә тиклем эшләй, тимәк, ошо датаға тиклем "Рәсәйҙә эш" порталында хеҙмәткәрҙәр һайлауға ғариза ҡалдырырға мөмкин. Әйткәндәй, программа бойомға ашырыла башлағандан алып 1270 эш биреүсе 8600 вакансия барлығы тураһында белдерҙе.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2022 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында ҙур түләүле парковка төҙөлөшө башлана. Был хаҡта Өфө хакимиәте башлығы Сергей Греков хәбәр итте. Ул 3700 урынға иҫәпләнә. Мэр әйтеүенсә, был мәсьәлә Мәскәүҙә "Транспорт аҙналығы"нда тикшерелде. "Парковка урындары баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн уңайлы булыр. Улар уңайлы ваҡытта уңайлы урында машиналарын ҡалдырып китә алыр", - тине Сергей Греков. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса, декабргә Өфөлә "ПАЗ" маркалы автобустар ҡалмаҫҡа тейеш, тине ҡала мэры.

✓Өфөнөң Совет майҙанын яңы йыл шыршыһы биҙәй. Уның бейеклеге - 23 метр. "Совет майҙанында өсөнсө йыл рәттән яңы йыл шыршыһын ҡуялар. Биш йылдан ашыу тәнәфестән һуң 2019 йылда ошо күркәм йола тергеҙелде. Совет майҙанын төҙөкләндереү буйынса күләмле эштәр башҡарылғанлыҡтан, хәҙер бында ауыр пиксель шыршыны ҡуйып булмай. Шуға майҙанды ысын шыршы менән биҙәргә хәл ителде", - тип хәбәр иттеләр Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән. Артабан иһә яңы йыл ҡаласығын төҙөү, боҙ һындарын һәм тауҙарын эшләү башлана.

✓Декабрҙә Өфөлә яңы боҙ аренаһын һәм балалар хоккей мәктәбен асыу күҙаллана. Канада стандарты буйынса 60х26 метр ҙурлыҡтағы хоккей майҙаны, биш сисенеү бүлмәһе, кафе, спорт магазины, бронь зонаһы, балкон һәм судьялар урыны - былар барыһы ла 2021 йылдың декабрендә Ростов урамындағы "Астра Арена" биләмәһендә асыла. "Комплекста "Астра" хоккей клубы ла үҙ ишектәрен аса. Был иһә секцияла 300-ҙән ашыу урын булдырырға мөмкинлек бирергә тейеш. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, яңы боҙ аренаһы шәхси аҡсаға төҙөлә. Ошо майҙансыҡта 12 спорт төрө буйынса 1100 кеше шөғөлләнә.

✓Өфөлә халыҡтың 82 проценты яңы коронавирус инфекцияһынан прививка яһатҡан. Өфө хакимиәте башлығы Сергей Греков һүҙҙәренсә, уҙған аҙнала баш ҡала ошо кимәлгә еткән. "Бөгөн был күрһәткес 82 процентҡа тиң, - тине ҡала мэры. - Сәнәғәт предприятиеларында вакцинация буйынса эште дауам итергә һәм көсәйтергә кәрәк". Роспотребнадзорҙың республика идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина һүҙҙәренсә, ҡайһы бер предприятиеларҙа хеҙмәткәрҙәргә прививка эшләү күрһәткесе 100 процентҡа етмәгән.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

**✓ *Шулай ҙа был изге ғәмәл Өфөнө бар йәмғиәткә йәшел ҡала булараҡ билдәле иткән ағастарҙы ҡырмаһын ине. Бер йортто күтәреү өсөн, бәлки, ярты йыл да етәлер, ләкин бер ағас үҫеп буй етһен өсөн әллә күпме йылдар кәрәк.***



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# КӘРӘКЛЕ УҠЫУ ЙОРТО

**Башҡортостандың Ағиҙел һәм Баймаҡ ҡалаларында үҙенең филиалдары булған күп профилле урта һөнәри белем биреү учреждениеһы - Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы 75 йыллығын билдәләне.**





Уҡыу йорто 1946 йылда нигеҙләнгән Өфө нефть техникумы һәм 1961 йылда асылған Өфө энергетика техникумы ҡушылыуынан барлыҡҡа килгән. Уны тамамлаған билдәле кешеләр араһында Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимов, СССР Хөкүмәте ағзаһы Тәлғәт Хурамшин, академик Александр Николаев бар.

Колледж директоры Роза Аслаева билдәләүенсә, уҡыу йортоноң педагогик коллективы иң амбициоз мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлеш алған. Бында оҫтаханалар булдырыу һәм кадрҙар ҡеүәтен үҫтереү буйынса системалы эш алып барыла. "24 уҡытыусы төрлө һөнәрҙәр буйынса демонстрацион имтихан алыу хоҡуғына эйә эксперт булараҡ һәм WorldSkills Russia төбәк чемпионатын үткәреү, 36 уҡытыусы демонстрацион имтиханды баһалау буйынса уҡыны һәм тест тикшереүҙе үтте, - ти ул. - 2017 йылдан алып колледж WorldSkills Russia хәрәкәтендә әүҙем ҡатнаша. Уны колледжға индереү буйынса ветеран һәм тәжрибәле педагог Люция Пономарева күп эшләне".

Былтыр декабрҙә чемпионаттың төбәк этабында колледждың 13 студенты ҡатнаша һәм дүрт - беренсе, өс икенсе урын ала. Ике студент профессионаллек өсөн медальоны менән бүләкләнә. Еңеүселәр быйыл августа беренсе тапҡыр Өфөлә үткән IX WorldSkills Russia "Йәш һөнәрмәндәр" милли чемпионатында Башҡортостан исеменән сығыш яһай, ә колледж дүрт компетенция буйынса майҙансыҡтар булдырыу өсөн яуаплы була. Чемпионат һөҙөмтәләре буйынса уҡыу йортоноң дүрт студенты еңеү яулай.

"Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы лайыҡлы рәүештә алдынғы белем биреү учреждениелары иҫәбенә инә. Уны хатта ҡайһы берҙә студенттары һәм яғыулыҡ-энергетика комплексы өлкәһендәге предприятие-партнерҙары һаны буйынса бәләкәй вуз тип тә атайҙар, - тине "Торатау" конгресс-холында үткән байрам тантанаһында республика Хөкүмәтенең вице-премьеры Азат Бадранов. - Йылдан-йыл бында уҡырға теләгән студенттар һаны арта, сөнки улар хеҙмәт баҙарында кәрәкле һәм юғары эш хаҡы түләнгән һөнәр ала. Колледжды тамамлаусылар хеҙмәт йылъяҙмаһына, беҙҙең иҡтисадҡа ҙур өлөш индерә".

**Галина БАХШИЕВА.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЮБИЛЕЙҒА ӘҘЕРЛӘНЕП...

"Арт-Квадрат"та Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Сергей Греков йәмәғәтселек менән баш ҡаланың 450 йыллығына әҙерлек буйынса фекер алышты. Сарала шулай уҡ БР Башлығының Йәмәғәт киңәшен һәм ҡала мөхитен үҫтереү мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе Ольга Сарапулова, Ҡаланың урындағы әүҙемлек үҙәге етәксеһе Гөлшат Әхмәҙиева ҡатнашты, модератор булып БР Йәмәғәт палатаһы рәйесе Азамат Йәнбирҙин сығыш яһаны.

- Ҡала башлығы булараҡ мин дә, беҙҙең команда ла байрам уңайынан эшләгән эштәрҙең ғүмерлеккә ҡалала ла, халыҡ күңелендә лә ҡалыуын теләйбеҙ, - тине Сергей Греков һәм нимә төҙөләсәген түгел, ә кем төҙөйәсәге тураһында һөйләшеү төп урында тороуын билдәләне. - Бында йәмәғәт фекере лидерҙары йыйылған һәм беҙ уларҙың беҙҙең идеяларҙы халыҡҡа һәм, киреһенсә, халыҡтыҡын беҙгә еткереүҙәрен теләйбеҙ.

Сергей Греков фекеренсә, граждандарҙың инициативаһы власть тарафынан ишетелергә һәм халыҡ ҡалаға үҙгәрештәргә үҙенең дә ҡатнашлығы барлығын тойорға тейеш. Ольга Сарапулова Өфө кеүек юбилейын билдәләгән эре ҡалаларҙың ниндәй концепция ҡуллана алыуы менән таныштырҙы һәм миҫал итеп Түбәнге Новгородтың 800 йыллығын байрам итеүҙе килтерҙе. Ул ҡала юбилейын билдәләүгә әҙерлеккә тотош йыл бағышланырға, уның дауамында фестивалдәр, концерттар, форумдар кеүек төрлө форматтағы саралар үтергә тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Үҙ сығышында Гөлшат Әхмәҙиева ҡала халҡының баш ҡаланы ниндәй итеп күрергә теләүҙәрен асыҡлау өсөн социологик һорау алыу үткәрергә кәрәклеген билдәләне. Фекер алышыу барышында йәмәғәтселәр үҙҙәренең идеяларын тәҡдим итте: ҡалала велоҡулса ойоштороу, ультра-марафон үткәреү, мәҙәни мираҫ объекттарын реставрациялау һ.б.

Бынан тыш, юбилейҙы үткәреүгә үҙ өлөшөн индереүселәрҙең исемдәрен яҙып барыу өсөн китап булдырыу фекере лә әйтелде. Үҙ сиратында Сергей Греков бер генә идеяның да иғтибарһыҙ ҡалмаясағын вәғәҙә итте.

# ҮТКӘҮЕЛ АСЫЛДЫ!

Баш ҡаланың Дуҫлыҡ монументы янында ер аҫты үткәүеле асылды. Уны асырға БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров килде. Төҙәлеш Ағиҙел йылғаһы ярын реконструкциялау сиктәрендә тормошҡа ашырылды. Үткәүелдең оҙонлоғо 110 метр. Андрей Назаров белдереүенсә, юлдың был өлөшөндә транспорт күп йөрөгәнлектән, юл аҫты үткәүеленә ихтыяҗ күптән булған. "Ер аҫты үткәүелен төҙөү ҡала өсөн мөһим әһәмиәткә эйә. Беренсенән, уның булыуы менән беҙ йәйәүлеләр һәм велосипедсылар өсөн яр буйына сығыуҙы хәүефһеҙ иттек, икенсенән, юлдағы артыҡ кәсергәнеште алып ташланыҡ. Был йәйәүлеләргә лә, автоһәүәҫкәрҙәр өсөн дә уңайлыраҡ буласаҡ", - тине Андрей Назаров.

Үткәүел видеотеркәү камералары, хәрәкәтте күрһәтеүсе яҡтыртыу ҡорамалдары менән йыһазландырылған һәм инвалид коляскаһында йөрөүселәр өсөн айырым күтәргескә эйә. Юлдың ер аҫты өлөшөндә, төп туннелдән тыш, техник һәм ярҙамсы биналар: һыу иҫәпләү ҡоролмаһы, таҙартыу ҡорамалдары, насос һәм коммутатор бүлмәләре бар. Ер аҫты өлөшөнән яр буйына сыҡҡан яҡта триплекс быяла менән уратылған күҙәтеү майҙансығы эшләнгән. Йәйәүлеләр үткәүелен төҙөү 2019 йылда башланырға һәм 2020 йылда тамамланырға тейеш ине. Әммә, Андрей Назаров аңлатыуынса, Дуҫлыҡ монументы яғында "Өфө II ҡаласығы" мәҙәни мираҫ объекты урынлашҡан. Ер эштәре барышында унда боронғо хайуандарҙың ҡалдыҡтары һәм көнкүреш әйберҙәре табылыуы һәм был урында археологик тикшеренеү талап ителеүе сәбәпле, ваҡыты күсерелгән. Һөҙөмтәлә үткәүелдең туннель өлөшөн төҙөү ярты йылдан һуң ғына башланды.

*БАШ ҠАЛАМ*

# КҮҢЕЛЕМӘ ЯҠЫН ...

**Һәр кемгә үҙенең тыуып үҫкән ауылы, ҡалаһы яҡын һәм ҡәҙерле. Минең күңелем түрендә иһә һәр ваҡыт республикабыҙҙың баш ҡалаһы - Өфө. Үҙем күптән ситтә йәшәһәм дә, Өфөмә йылына бер нисә ҡайтып әйләнәм. Һәм килгән һайын Өфөнө башҡа ҡалалар менән сағыштырам да уның барыбер ҙә матурыраҡ, күркәмерәк һәм йәшелллеккә мул булыуын билдәләйем.**

Һуңғы килеүемдә ҡала урамдарында ҙур, яңы, заманса автобустарҙың күп булыуына иғтибар иттем. Элекке ПАЗ автобустары, күпселек осраҡта, тыштан да, эстән дә бысраҡ булыуы менән иҫтә уйылып ҡалған. Уларҙың бер-береһен уҙырға тырышып, салондағы пассажирҙарҙың хәүефһеҙлегенә ҡул һелтәп, Өфө урамдары буйлап елдереүе үткәндә ҡалып бара һәм был шәхсән минең өсөн шатлыҡлы ваҡиға. Транспорт мәсьәләһенә ҡағылышлы һорауҙың бөгөн баш ҡалала киҫкен тороуын һәм шәхси автобустарҙы юлдан алыуҙарына ҡаршы булыусыларҙың етерлек икәнлеген һөйләнеләр. Ләкин һәр яңылыҡ индерергә тырышыу, яҡын киләсәктә уларҙың ниндәй ыңғай һөҙөмтәләргә килтерәсәген барыһы ла аңлап етмәй һәм был, асылда, дөрөҫ. Тик Өфө урамдарында ҙур һәм таҙа автобустарҙың йөрөүе күпкә яҡшыраҡ икәнлеген күпмелер ваҡыттан һуң барыһы ла төшөнөр, тип ышанам.

Ҡала күҙгә күренеп ҙурая һәм йорттар ҙа бейегерәк була бара. Беҙҙең бала саҡ, йәшлек йылдары уҙған ыҡсым ихаталар, ағас йорттар юғала бара. Әлбиттә, быны күреү күңелгә ҡыйын, ләкин тормош дауам итә, эргә-тирәлә барыһы ла үҙгәрә, яңыра, алмаштырыла. Шуға күрә дүрт ғаилә һыйҙырышлы ике ҡатлы ағас йорт урынына йөҙәрләгән ғаиләне фатирлы итәсәк бейек йорттарҙың ҡалҡып сығыуы - замана талабы. Шулай ҙа был изге ғәмәл Өфөнө бар йәмғиәткә йәшел ҡала булараҡ билдәле иткән ағастарҙы ҡырмаһын ине. Бер йортто күтәреү өсөн, бәлки, ярты йыл да етәлер, ләкин бер ағас үҫеп буй етһен өсөн әллә күпме йылдар кәрәк. Бөгөнгө хаҡында ғына уйлап, киләсәккә ҡул һелтәмәһәләр ине, тип теләге килә. Балаларға фатир ҡалдырып та, улар таҙа, саф һауаға сарсап йәшәһә, был аҙымдан ни файҙа! Ә йәшел урман - йәшел ҡалҡан.

Элек-электән Үҙәк баҙар, "Өфө" универмагы халыҡ гөрләп торған, ҡаланың үҙәге булды, тип әйтһәм дә хата булмаҫ. Бөгөн дә был урындарҙан кеше әҙәймәүе, элеккеҫә үк ололарҙың сәскә, йәшелсә-емеш һәм башҡа әйберҙәр һатып ултырыуы мине бала сағыма алып ҡайта. Ләкин аҙым һайын тиерлек "төртөп" сығылған бәләкәй вагондар шул тирәләге йәмде кәметә. Бәлки, бөтә майҙан буйлап таралған вагонсыҡтарҙы (вагончики) бер урынға йыйып, бер стилдә биҙәп ҡуйырғалыр?

Якутов паркы янында йәшәгәс, бөтә бала сағым шунда үтте. Бөгөнгө көндә лә балаларҙың ғына түгел, ә бөтә ҡала халҡы һәм Өфө ҡунаҡтары өсөн ҡыҙыҡлы булған балалар тимер юлының гөрләп эшләп тороуы өсөн шатмын. Атайым менән ял һайын паркка сығып йөрөр инек, ә ҡайтыр саҡта ул миңә 15 тингә туңдырма алыр ине. Хәҙер ҙә паркка К.Маркс урамы яғынан ингән яҡтан туңдырма киоскылары янына үткән саҡта, яҡты хәтирәләргә бирелеп, мотлаҡ туңдырма алып үтәм.

Өфөм - матур хәтирәләр ҡалаһы, бала сағым һәм йәшлегем үткән ғәмһеҙ осором. Ниндәй генә үҙгәрештәр кисерһә лә, баш ҡалам минең өсөн элекке кеүек үк яҡын һәм ҡәҙерле. Ҡалаға ҡағылышлы һәр яңылыҡ һәм үҙгәреш тик яҡшылыҡ алып килһен.

**Миңзәлә АБДУЛЛИНА.**
**Силәбе ҡалаһы.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Атеросклероз

❖ Был липид һәм аҡһым алмашыныуы боҙолоуы арҡаһында барлыҡҡа килгән эластик һәм мускул-эластик артерияларҙың хроник ауырыуын етен майы яҡшы дауалай. Көнөнә бер тапҡыр ас ҡарынға 1 ҡалаҡ етен майы эсергә кәрәк. 1 ай дауаланырға. 2 аҙна туҡтап торғас, ҡабатларға була.

❖ 300 грамм шыйыҡ балға ваҡ ҡырғыстан үткәрелгән 200 грамм һарымһаҡ ҡушырға һәм 1 аҙна ҡараңғы урында торорға. Дауаны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Дауаланыу мөҙҙәте 2-3 ай.

❖ 2-шәр балғалаҡ таҙартылмаған көнбағыш майы (нерафинированный) һәм бал, лимон һутының дөйөм күләменән 1/4 өлөшөн ҡушырға. Яңы һығып алынған лимон һутын ҡулланырға. Килеп сыҡҡан дауаны ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

### Шәкәр диабеты

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған дегәнәк йәбешкәгенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Өс өлөшкә бүлеп эсеп бөтөргә, ашау ваҡытына ҡарамай. Дауаланыу оҙайлы, әммә һөҙөмтәле.

❖ Ҡанда шәкәр кимәлен кәметеү өсөн 1 стакан имән сәтләүеге һәм бер ус имән япрағын алып, барыһын да ваҡларға һәм быяла һауытҡа һалырға. Өҫтөнә ярты литр араҡы ҡойоп, 4 минут торорға һәм ауыҙын ҡапҡас менән ябырға. Ҡраңғы урында 10 көн төнәтергә. Шунан ике ҡат марля аша һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1 ҡалағын 50 мл һыуға болғап эсергә. 1 ай дауаланғас, 1 ай туҡтап торорға һәм ҡабаттан 1 ай дауаланырға. Ошо рәүешле йылына ике тапҡыр дауаланыу курсы үтеү яҡшы.

### Ангина

❖ Ҡурай еләген өҙөп алғандан һуң үҙәксек - төп ҡала. Ярты литр банкаға үҙәк-төптәрҙе һалып, өҫтөн сығарғансы араҡы ҡойорға, ҡараңғы урында 14 көн төнәтергә һәм һөҙөргә. Ангина булғанда йоҡлар алдынан 1 балғалаҡ дауаны бер нисә секунд ауыҙҙа тотоп, йотоп ятырға. Хәл яҡшырғансы дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Бер яҡтан, ҡоролоҡ, икенсе яҡтан, янғындар бесәнлектәрҙе юҡ итә. Игенгә лә хаҡтар артты. Артабан да шулай дауам итһә, ауыл халҡы малсылыҡ шөғөлөнән яйлап ситләшмәҫ тимә.*



ЙОЛАНДАН ЙӘН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

XIX быуаттың 90-сы йылдары башында башҡорттарҙың көнкүреше менән ҡыҙыҡһыныусы П.С. Назаров, һуңғараҡ Д.П. Никольский йәйләүҙәрҙәге тирмәләрҙә бик күп традицион әйберҙәр күргән, уларҙың күбеһе ағастан эшләнгән булған. Һандыҡ һәм ағас һауыт-һабанан тыш түшәк, ҙур көбөләр, самауыр өсөн аяҡ, урын тип аталған махсус аҫлыҡтар булған. Самауыр өсөн аҫлыҡты П.С. Назаров "ултырғыс" тип атай, сөнки ул шул уҡ ултырғыстар кеүек эшләнгән, "ауылда уны урындыҡ эргәһенә ҡуйып, өҫтөнә самауыр ултырталар, йәйләүҙә ул бәләкәй өҫтәл рәүешендә ҡулланыла" тип яҙа. Д.П. Никольский көнсығыш башҡорттарының ҡымыҙ ҡойолған һабаларҙы тәпәш эскәмйәгә ҡуйып, тирмә уртаһына урынлаштырыу ғәҙәттәре тураһында әйтә: "тирәләп... ҡунаҡтар хужа менән ултыра һәм ҡымыҙ эсәләр". Был аҫлыҡтар, тәпәш эскәмйәләр һәм бәләкәй өҫтәлдәр билдәле бер формала эшләнгән һәм йыш ҡына һырлап йә буяп биҙәлгән.

Тирмә эсенең йыһазланышы хужаның матди етешлегенән торған. Ғаилә байыраҡ булған һайын, көнкүреш әйберҙәре күберәк һәм төрлөрәк, интерьер сағыуыраҡ булған. Һырланған һауыттар һәм йыһаз (тәпәш карауаттар, эскәмйәләр, бәләкәй өҫтәлдәр, кәштәләр, аяҡтар) хужаның хәлле булыуын, юғары социаль хәлен сағылдырған. Шул уҡ ваҡытта башҡа әйберҙәр (ҡулдан һуғылған туҡымалар, ҡайылған әйберҙәр, балаҫтар, металл һәм тиренән эшләнгән һауыттар) менән бергә улар ипле, үҙенсәлекле ансамбль хасил иткән.

Тирмә эсендә әйберҙәрҙе урынлаштырыу тәртибе боронғо төрки йәмғиәтендә үк яйға һалынған. Башҡорт тирмәһендә һандыҡтарҙы һәм түшәкте, түрҙе, утлыҡты урынлаштырыу тәртибе ҡаҙаҡтарҙа, ҡырғыҙҙарҙа, ҡайһы бер үзбәктәрҙә, ҡарағалпаҡтарҙа, көньяҡ тыва халҡында, нуғайҙарҙа һәм башҡа туғандаш күсмәндәрҙәге кеүек булған. Уртаҡ терминдар ҙа байтаҡ. Интерьерҙың декоратив-художество нигеҙе оҡшаш: түшәк, кейеҙ, балаҫ, төҫлө туҡымалар һәм сигеүҙән тыш тирмәлә һырланған һәм буялған һандыҡтар, өҫтәлдәр, тәпәш карауат, эскәмйә, соҡоп эшләнгән һәм семәрләнгән һауыт-һаба һәм башҡа ағас әйберҙәр бар.

Тыва халыҡ сәнғәтен өйрәнгән этнограф С.И. Вайнштейн шундай асыш яһаған: тыва халҡында ағасты һырлау һәм буяп биҙәкләү башлыса тирмә эсен йыһазландырыу өсөн ҡулланылған. Ағас әйберҙәрҙе семәрләүҙе ул "тирмәлә тыуған" боронғо сәнғәт тип иҫәпләгән.

Башҡорттарҙа ағас һырлау киңерәк ҡулланылған. Әммә тирмәне биҙәү традициялары, һис шикһеҙ, ауыл торлаҡтарының интерьерына һәм йорт кәрәк-ярағына түгел, дөйөм биҙәү сәнғәтенә лә йоғонто яһаған.

Башҡорт өйҙәренең ҡоролошона күп кенә күскенселек традициялары күсерелгән. Был йыһаздарҙан йәки кәрәк-яраҡтарҙан хас әйберҙәр ҡулланыуҙа ғына түгел, ә йортто "таҙа" һәм хужалыҡ яғына бүлеү, түр урынды айырып ҡуйыу, тура мөйөшлө интерьерҙы йомшартырға тырышыуҙа ла күренгән (был маҡсатта бүрәнәләрҙе мөйөшөнән алыҫлыҡта сутлап (юнып) төшөргәндәр, мөйөштәрен балсыҡ менән һылағандар, шаршау һәм пәрҙәләр элгәндәр), уны туҡымалар һәм семәрле ағас менән биҙәгәндәр.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЫЛЫҠМАҪ



# МАЛЫ БАРҘЫҢ ҺЫЙЫ БАР

**Ер-һыу туңып, ҡар ятыуҙы көтөп кенә торған ауыл уңғандары һуғым һуя башланы. Билдәле булыуынса, был эшкә ҡағылышлы һәр төбәктең үҙенә генә хас йолаһы бар. Уларҙы теүәл атҡарыуға әле лә башҡорт халҡы ҙур иғтибар бирә. Ите тәмле, йомшаҡ, бәрәкәтле, үҙенә, туғандарына насип булһын, мал ҡото китмәһен тигән теләктә башҡарыла улар.**
**Күгәрсен, Көйөргәҙе районларында ла элек-электән үҙенсәлекле тәртип һаҡланған. Был төбәктәрҙә көндөң һыуытыуы ғына шарт түгел. Ҡарҙың күп итеп яуыуын көтәләр. Малды таҙа итеп һуйыу, эсәктәрен ҡарҙа тапап, ышҡып йыуыу өсөн кәрәк ҡар. Хеҙмәт ветераны Хәлит ҠУНАҠҠУЖИН һуғым йолаһының Көйөргәҙе тарафтарында нисек башҡарылыуы тураһында һөйләне.**

- Беҙҙең яҡта "һуғым" тиеп мотлаҡ эре малды ғына әйтәләр. Кәзә-һарыҡ һуйған кеше тураһында "Уның быйыл һуғымлығы юҡ", тип әйтә торғайнылар. Кәзәнең маллығы, тигән кинәйәлә лә шул мәғәнә һалынғандыр инде. Ғәҙәттә, тана, башмаҡ, йылҡы малын инселәп ҡалдыралар, йәғни ҡышҡылыҡҡа һуғымға тип ниәт итәләр. Көрәйһен өсөн уны башҡа мал-тыуарҙан айырым ашаталар. Халҡымда бик тапҡыр әйтем бар: "Балы булһа, себене булыр, өҫтөн ябып тотмаһаң, малы булһа, ҡазаһы булыр, һаҡлай белеп тормаһаң".

Һуғымлыҡты һаҡларға, яратырға, иркәләргә лә оноторға ярамай. Юғиһә, һүгә-һүгә, әрләй-әрләй, кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә арт һанына һәнәк менән тондора-тондора аҫраған малдың ите нисек тәмле булһын инде!

Һуғым һуя торған көн алдан билдәләнә. Өмәгә хужаның туғандары һәм күрше-күлән саҡырыла. Эре малды йығып салыр өсөн кәм тигәндә дүрт-биш ир-егет булырға тейеш. Салған ваҡытта бала-сағалар, ҡатын-ҡыҙҙар ҡарап торорға тейеш түгел. Йән биргәндә оло мал ныҡ хырлай, балалар ҡурҡып ҡалыуы ихтимал.

Беҙҙең ауылда малды ергә йығып салалар ҙа, аҙаҡ тояҡтарынан аҫып ҡуйып, тиреһен тунайҙар. Шулай иткәндә, эс-ҡарынын алғанда ла, тиреһен һыҙырғанда ла ит бысранмай. Һуйыусының үҙенә лә эшләргә уңайлы.

Мал һуйғанда һәләт кәрәк, сөнки һәр нәмәнең үҙ рәте, үҙ тәртибе бар. Төрлө кешенән салдырып бармайҙар. Халҡыбыҙҙа "Мал көрлөгө көтөүсенән" тигән әйтем бар, әммә иттең һутлылығы-татлылығы һуйған кешегә бәйле. "Ҡулы тәмле" тигән кешене генә саҡыралар. Һунарсыларҙы, шулай уҡ ауылда бесәй, эт атып йөрөгәндәрҙе элек-электән һуғымға яҡын ебәрмәнеләр. Улар хатта үҙҙәренең малын да салманы. Эт-бесәй үлтергән, ҡош-ҡорт аулаған кеше һуйған иттең тәме булмай, тигән ырым бар. "Ҡулы тәмле" тигәндәрҙе сиратлап йөрөттөләр беҙҙең ауылда. Уға алдан уҡ әйтеп ҡуялар. Салыусының тәһәрәтле булыуы ла мотлаҡ шарттарҙан һаналды. Кейгән кейеменең таҙалығы ла мөһим булды. Ғәҙәттә, салған кеше итте тураҡлаһа, тәмле була, тип тә әйтә торғайнылар.

Малды аҫып, эс-ҡарыны алынғас ҡына, ҡатын-ҡыҙҙарға һуйған урынға килергә рөхсәт ителә. Малдың тиреһен элек шунда уҡ тоҙлап элеп ҡуя торғайнылар. Хәҙер уны йыйыусы булмағас, күптәр сүплеккә ташлай. Алыпһатарҙар күп, әммә етештереүсе юҡ. Ярҙамсы хужалыҡтар булмай тороп, тире йыйыусылар, заготовителдәр ҙә булмаясаҡ инде. Беҙҙә үҙебеҙҙә шундай производство булдырырға мөмкин тип уйлайым. Элек һәр ауылда һыйыр, үгеҙ тиреһен 45-50 һумға йыйып йөрөрҙәр ине. Хәҙер 10-15 һумға алыусы булһа, бик хуш. Ғөмүмән, ауыл продукцияһының хаҡы элек тә булманы, хәҙер ҙә юҡ.

Ҡатын-ҡыҙҙар туҡ һәм ас эсәген, ҡарынын, китапсыҡтарын алып, йылға буйында тәүҙә ағын һыуҙа, аҙаҡ ҡарҙа аяҡтары менән ышҡыпышҡып йыуып, йәнә йылғала сайҡайҙар. Шулай иткәндә эсәктәр ап-аҡ булып таҙарына. Йәш килендәрҙең, ҡыҙҙарҙың уңғанлығын эсәктәрҙең таҙалығына ҡарап баһалаған була торғайнылар элек. Йыуып алып ҡайтҡас та, уны ҡайнар һыу менән бешекләп, ҡарынын ҡабаттан таҙарталар. Элегерәк шул көндө үк тултырма ла тултыра торғайнылар. Һуйғанда, эсәктәрен йыуғанда ярҙамлашҡандарҙың барыһын да кисен һуғым ашына саҡыралар. Ит бүлеүҙең дә үҙ рәте була торғайны. Салыу һөйәген, йәғни муйын итен салған кешегә тотторалар.

Беҙҙең ауылда ит менән картуфты өлөшләп бирәләр, ҡоротлап, туҡмаслы, һалмалы һурпа, тултырма бирелә. Хужа менән хужабикә һуғым һуйырға ярҙам иткәндәргә рәхмәт әйтә, ә ҡунаҡтар итте, бешерелгән аҙыҡтарҙы маҡтай-маҡтай, теләктәр теләй.

Егерме-утыҙ йыл элек һуғым аштары ваҡытында ауыл айырыуса гөрләне. Ул ваҡытта гармунсылар һәр өйҙә тиерлек ине. Йырлашып, бейешеп, оло байрамға әүерелә торғайны һуғым һуйған мәлдәр. Ҡыҙып алып, клубҡа сығып та бейеп алалар. Бер нисә кешенең һуғым ашы бер юлы тура килһә, төрлө ярыштар ҙа үткәрелде. Һуғым ашынан ҡайтҡанда һәр кемгә мул итеп күстәнәс бирелә, үҙҙәренең өлөшө һалына.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һуғым һуйыуға, һуғым ашына ҡағылышлы йолаларыбыҙ, шөкөр, быуындан-быуынға тапшырылып килә. Ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә заман үҙенең төҙәтмәләрен индергән хәлдә лә, ауылда күпселек халыҡ ошо йолаларҙы тоторға тырыша. Тик йылдан-йыл Башҡортостанда күҙәтелгән ҡоролоҡ ауыл халҡының мал-тыуарын кәметеүгә килтерҙе. Сөнки бесән әҙерләү, мал аҙығын туплау ныҡ ҡимmәткә төшә. Былтырлы-быйыллы үлән ныҡ йоҡарҙы, бесәнде ауыл эшсәндәре юл буйынан, уйһыулыҡтарҙан, йылға тирәһенән эҙләп сабып еткерҙе. Бер яҡтан, ҡоролоҡ, икенсе яҡтан, янғындар бесәнлектәрҙе юҡ итә. Игенгә лә хаҡтар артты. Артабан да шулай дауам итһә, ауыл халҡы малсылыҡ шөғөлөнән яйлап ситләшмәҫ тимә. Быйыл ҡоролоҡ сәбәпле Хәйбулла районында йәшәгән ҡоҙам һыйыр малын берәүгә генә ҡалдырҙы. Бесәнде тулыһынса тиерлек һатып алды. Һатып алған бесән менән генә туйындырып булмай шул малды. Икенсе йыл уныһын да тотоноп, бер нисә баш кәзә алырға ниәтләгәнен ишетеп, ныҡ борсолдом. Ауылда йәшәп тә һыйыр ҙа тота алмаһаң, яҡшы түгел бит инде...**

**Лена БАРЫЕВА**
**яҙып алды.**

✔ *Таҙларҙың икенсе бер төркөмө төньяҡ йүнәлешендә, Танып йылғаһы буйлап барып, уның урта ағымындағы урманлы киң районды биләй. Танып таҙлары оҙаҡ ваҡыттар дауамында әйле таҙлары менән бәйләнештәрен өҙмәй.*



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ТАҘЛАР - ТАРИХ АТАҺЫ ГЕРОДОТ АРГИППЕЙҘАРЫ ВАРИҪТАРЫ

**Башҡа бер ырыуҙар араһында артыҡ билдәле булмаған, атамаһы ла сәйерерәк яңғыраған башҡорт этник төркөмдәренең береһе - таҙлар (тазлар) тип исемләнә. Күрәһең, тарихи процестар барышында ошо ырыу вәкилдәренең айырым-айырым төркөмдәре, Көньяҡ Урал территорияһына килеп урынлашып, башҡа башҡорт ырыуҙары составына инеп киткән. Бәлки, ошо сәбәптәндер инде, хәҙерге осорҙа үҙҙәренең ата-бабаларының үтә боронғо һәм ҡеүәтле бер ҡәүем ағзалары булғанлығы хаҡында иҫләүсе таҙлар вәкилдәре һирәгерәк. Таҙларҙың компакт төркөмдәре Башҡортостандың Борай районының Варҙытамаҡ, Йомаҡай (Йомаш), Яңы Ҡарғалы, Иҫке Таҙлар, Яңы Таҙлар, Таҙтүбә, Арҙаш һәм Әрнәш, Балтас районының Түсебай, Шауъяҙы, Иҫке Ҡарғалы, Һәйтәк ауылдарында йәшәй. Йәнә шуға ла иғтибар итергә була: Дыуан районының иң төпкөл төбәгендә Таҙтүбә ауылы бар (унда Рәсәй губерналарынан күсерелеп килтерелгән рус крәҫтиәндәренең вариҫтары йәшәй), әммә Таҙтүбә тип аталған тау янындағы һәм ошо яҡтағы башҡа ерҙәргә ҡасандыр дыуан-әйле һәм һарт-әйле башҡорттары хужа булған. Рус телендә Таҙтүбә тауы Лысая гора, тип аталған хәлдә лә, батша Рәсәйе замандарында Таҙ-Дыуан олоҫо ла теркәлгән була.**

Таҙлар ырыуының боронғо тарихы Үҙәк Азия (совет историографияһына ул Урта Азия, тип аталып ингән) территорияһында йәшәгән төрки ҡәүемдәренә барып тоташа. Ошо турала күренекле башҡорт тарихсыһы, этнолог Рәил Кузеев былай тип яҙа: "Таз (тас) ҡәбиләһенә ҡараған ырыу төркөмдәре Төньяҡ Алтай кумандиндары (сеок тас. - Башҡортса "таҙ һөйәге" тигәнгә тура килә. - **Авт. иҫк.**), ҡаҙаҡтар (Кесе Жузда таз йәиһә таҙлар ҡәбиләһе, Оло Жузда тастар-арғын, тас-коян ырыуҙары), ҡырғыҙҙар (сарыбағыш ҡәбиләһенең таздар ырыуы), үзбәктәр (тас-катаган ырыуы; Зеравшандың манғыт ҡәбиләһендәге таз ырыуы), төркмәндәр (йомудтар составындағы таздар йәиһә даздар) составына ингән. Л.П. Потапов тастарҙың телеуттар менән этник яҡынлыҡта булыуы хаҡында фараз иткән. Быға "Монголдарҙың йәшерен тарихы" ("Сокровеннное сказание монголов") яҙмаһында монголдарға буйһонған "урман халыҡтары" иҫәбендә телестар менән йәнәш тас ырыуының иҫкә алыныуы нигеҙ булған. Л.П. Потапов билдәләүенсә, ул заманда тастарҙың йәшәү урыны Саян-Алтай ҡалҡыулығында булған. Әгәр был фараз дөрөҫ икән (таҙларҙың ырыу-ҡәбилә төркөмдәренең артабанғы тарихы ысынлап та уларҙың монголдар менән тарихи бәйләнештә булыуын раҫлай), ул саҡта тастарҙың килеп сығышы боронғо төркиҙәргә барып тоташа.



Ҡайһы бер туранан-тура булмаған мәғлүмәттәр тастарҙың уғыр-самодий ҡәбиләләре менән этник бәйләнештә булыуы хаҡында һүҙ йөрөтергә мөмкинлек бирә. XVIII быуатта Обь йылғаһының Таз тигән ҡушылдығы буйында, селькуптар йәшәгән районда, тасангоручи йәиһә тазукарачея ырыуы күсенеп йөрөгән. Формалашҡан осоронда самодийҙар һәм уғырҙар менән ҡатнашлығы булған кумандиндар составында таз сеогы булыуын тикшеренеүселәрҙең бер генә тапҡыр иҫкә алмауы бындай мөмкинлеккә иғтибарлы булырға мәжбүр итә. Әммә II быуат баштарында таҙларҙың көнбайышҡа, Дәште-Ҡыпсаҡҡа үтеп ингән ырыу төркөмдәренең һис һүҙһеҙ төрки телле булыуын тағы ла бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алабыҙ. Таҙларҙың Арал буйы далаларына һәм артабан көнбайышҡа үтеп инеүе монгол эпохаһына тиклем башлана. XII быуатта йәшәгән ҡыпсаҡ кенәздәренең береһенең, Бүнәктең туғанының, исеме Таҙ булған. Урта быуаттарҙа ҡәбилә башлыҡтарының йыш ҡына улар үҙҙәре етәкләгән берләшмә этнонимына ярашлы аталыуы сығанаҡтарҙан яҡшы билдәле (башҡорт шәжәрәләрендәге Мөйтән бей, Уран баба, Дыуан-Һаҡал, Ҡыпсаҡ хан, Ҡара-Табын бей һ.б. менән сағыштырып була). Монголдарҙың Көнсығыш Европаға походтары башланыуы һәм Алтын Урҙа барлыҡҡа килеү осоронда таҙлар теләүҙәр менән бергә көньяҡ далаларында, Эмба һәм Урал арауығында күсенеп йәшәй. Рукнетдин Бейбарс хәбәр итеүенсә, XIII быуат аҙағында улар тәүҙә Токта ғәскәре составында, уға хыянат иткәс, уның дошманы Нуғай яғында үҙ-ара һуғышта ҡатнаша. Таҙларҙың бер өлөшөнөң төньяҡҡа, Урал алдына күсеп китеүенең сәбәбе тап ошо ваҡиғалар, Нуғайҙың тармар ителеп, Токтаның еңеүе менән бәйле булыуы бик ихтимал, улар бында еңеүсенең үс алыуынан ҡотолорға иҫәп тотҡан. Бындай һығымтаны тағы ла бер нәмә - таҙларҙың Урал алдына компакт масса менән түгел, ә айырым төркөмдәр менән килеп, төрлө ырыу-ҡәбиләләр: бөрйән, үҫәргән, ҡыпсаҡ, табын һәм башҡалар составына ҡушылып китеүе менән аңлатып була. Асылда таҙ ырыуы төркөмдәре бөтөн Башҡортостанға тарала.

Таҙлар бер ни тиклем компакт рәүештә ике тарафта урынлаша. Уларҙың бер төркөмө табындар менән бергә Уралға һәм Урал аръяғына табан йүнәлә. Улар әйле ырыуының ҡаратаулы һәм дыуан-әйле төркөмдәренә йәнәш ерҙәрҙе биләй. Таҙларҙың бер нисә ауылы XVIII быуатта ҡайһы бер сығанаҡтарҙа теркәлгән Себер даруғаһының Тазлар олоҫон хасил итә. П.И. Рычков исемлегенә ул әйлеләр составындағы "Таз-Дыуан" түбәһе исеме аҫтында индерелә. XVIII быуатта, башҡорттарҙың аҫаба ерҙәре тау заводтары өсөн тартып алынғас, тазлар төньяҡҡараҡ китеп, ҡаратаулылар һәм дыуандар составына инеп китә.

Таҙларҙың икенсе бер төркөмө төньяҡ йүнәлешендә, Танып йылғаһы буйлап барып, уның урта ағымындағы урманлы киң районды биләй. Танып таҙлары оҙаҡ ваҡыттар дауамында әйле таҙлары менән бәйләнештәрен өҙмәй. Улар, риүәйәттәрендә һөйләнелгәнсә, Урал аръяғындағы ырыуҙаштарына, тегеләре Таныпҡа килеп йөрөй.

Әммә этнология өлкәһендә таҙлар ырыуының тарихи сығышы буйынса ғалим-этнолог Р.Ғ. Кузеевтың ғилми фараздарына тулыһынса тап килмәгән мәғлүмәттәр, йәиһә уның ҡараштарын бер ни тиклем кимәлдә инҡар иткән тикшеренеүҙәр ҙә бар. Ошо проблема хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡанда дөйөм башҡорт тарихына ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе лә иҫәпкә алыу фарыздыр.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



## ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Ҡамау ҡулсаһын йырып сығыу ваҡыты 18 февралгә, төнгө сәғәт 10-ға тәғәйенләнә. 3-сө гвардия армияһының командующийы Д.Д. Лелюшенко ла ошо ҡарарҙы хуплай. Ул корпус командирына беҙҙең частар оборона тотҡан йүнәлештә - Иллирия - Штеровка ауылдары рубежына табан хәрәкәт итеп, корпустың иҫән ҡалған көстәрен фронт линияһы аша алып сығырға бойора. Корпус рейд барышында командование тарафынан ҡуйылған хәрби бурысты намыҫ менән үтәй. Ысынлап та, рейд башланғандан бирле ни барыһы 6 ғына көн үтеүгә ҡарамаҫтан, дошман тылында көнө-төнө ал-ял белмәй алышҡан совет яугирҙары дошман көстәрен иҫ китмәле юғалтыуҙарға дусар итә, немецтарға ғына хас теүәллек менән ҡоролған төҙөк тыл структураһын аяуһыҙ емерә, паника тыуҙыра. Шул уҡ ваҡытта фронттың был яғындағы армия частарының 7-се гвардия корпусына бер нисек тә ярҙам ала алмауы, совет авиация частарының рейдтағыларға булышлыҡ итергә йәлеп ителмәүе арҡаһында ошо героик рейдта ҡатнашҡан 14-се, 15-се һәм 16-сы гвардия дивизиялары ла ҙур юғалтыуҙарға дусар була. Килеп тыуған ситуацияла төп бурыс - инде тамам йонсоған яугирҙарҙы ҡамауҙан мөмкин булғанса имен-аман алып сығыу була. Корпус командиры М.Д. Борисов дошман ҡамауын емереп сығыуҙы хәҙер инде 16-сы гвардия дивизияһы тип атала башлаған Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙарына йөкмәтә - нисек кенә булмаһын, беҙҙең яугирҙарыбыҙҙың хәрби абруйына, яуҙарҙа күрһәткән фиҙаҡәрлегенә ышаныс көслө була.

Генерал-майор М.М. Шайморатов ҡамауҙан сығыу планын үҙенең командирҙарына ентекләп аңлата: иң алда капитан Абдулла Әхмәҙиев һәм лейтенант Кәшфи Шәрипов етәкләгән разведка дивизионы бара, улар артынса 60-сы һәм 62-се полктар, корпус штабы подразделениелары ҡуҙғала, ә 15-се гв. атлы дивизияһы аръергард ролен үтәй.

Билдәләнгән ваҡытта, төн ҡараңғылығын файҙаланып, 16-сы һәм 15-се дивизия яугирҙарынан хасил булған колонна хәтәр юлға сыға. Разведка дивизионы артынса, колонна хәрәкәтен етәкләп, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов үҙе һәм дивизия штабының оператив бүлеге начальнигы, тәжрибәле офицер, майор Г.А. Черников бара. Көтөлмәгән хәл килеп тыуған хәлдә башҡорт генералы арттараҡ хәрәкәт иткән подразделениеларға һис кисекмәҫтән яңы ҡарарҙарын, бойороҡтарын еткерә алырлыҡ урынды һайлай. Колонна юлһыҙ урындарҙан, тәрән ҡар ярып, алға бара.

Ҡабул ителгән план үҙ һөҙөмтәһен бирә: немецтар ҡамау эсендә тороп ҡалған корпус частарының ҡасан һәм ниндәй йүнәлештә ҡуҙғалып китеүен абайламай ҡала. Етмәһә, дошман командирҙары яңылыша: улар, совет корпусы Дебальцево станцияһын урап үтеп, уға көнбайыштан һөжүм итәсәк, тип уйлай. Дебальцевонан алыҫ булмаған Редкодуб разъезына табан танкылар менән көсәйтелгән ике батальон пехота ебәрелә, шул уҡ ваҡытта Городище ауылы районынан шул уҡ йүнәлештә тағы ла ике батальон немец пехотаһы ҡуҙғала. Таң атыуға бер-береһенең хәрәкәтен йыраҡтан күреп ҡалған немец подразделениелары, совет корпусы частарына юлыҡҡанбыҙ, тип уйлап, ашығыс рәүештә артиллерия уты аса. Атыш байтаҡ ҡына дауам итә, һөҙөмтәлә немецтарҙың яңылышыуы һөҙөмтәһендә уларҙың 400-гә яҡын һалдаты сафтан сыға.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**✓ Алып барыусы: "Хәҙер Таһир Кусимов полкы политругының улы Миҙхәт Мәмбәтовҡа һүҙ бирелә. Уның атаһы Әхмәтхан Хужанияз улы ҡаты һуғышта батырҙарса һәләк булған", - тине. Шаңҡып ҡалдым, минең өсөн оло яңылыҡ ине был.**



# БЕҘ АТАЙҺЫҘ

**Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы, күренекле дәүләт эшмәкәре, ғалим, Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, Рәсәй Федерацияһының почетлы халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, "Халыҡтар дуҫлығы" ордены кавалеры Миҙхәт Әхмәтхан улы МӘМБӘТОВ 1941 йылдың 15 сентябрендә Хәйбулла районының Мәмбәт ауылында тыуған. 1965 йылда Башҡорт дәүләт университетын, 1971 йылда ГИТИС янындағы юғары режиссерҙар курсын, 1975 йылда БДУ аспирантураһын тамамлай. Филология фәндәре кандидаты. 1975-1983 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетында, 1983-1990 йылдарҙа Стәрлетамаҡ педагогия институтында уҡыта. 1990-1994 йылдарҙа Башҡортостан Хөкүмәтендә халыҡ мәғарифы һәм мәҙәниәте бүлеге мөдире, 1994-1995 йылдарҙа БР Премьер-министр урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы булып эшләй. 1995-2005 йылдарҙа Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары. 2005-2006 йылдарҙа Башҡортостан Президенты ярҙамсыһы, 2006-2008 йылдарҙа Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары, 2008-2011 йылдарҙа - Өфө ҡала хакимиәте башлығы кәңәшсеһе. Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзите тап Миҙхәт Әхмәтхан улы Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары булып эшләгән осорҙа барлыҡҡа килде. Быйыл Миҙхәт Әхмәтхан улы үҙенең 80 йәшлек юбилейын билдәләй. Уны ошо ғүмер байрамы менән ҡотлап, түбәндәге әңгәмәне тәҡдим итәбеҙ. Унда һүҙ, асылда, шәхестең бала сағы хаҡында бара.**

**Миҙхәт Әхмәтхан улы, бала сағығыҙҙың иң иҫтә ҡалған ваҡиғалары хаҡында һөйләгеҙ әле...**

- Мин бик һуң, дүрт йәшемдә генә атлай башлағанмын. Әсәйем көнө-төнө эштә булған, ризыҡ та етмәгәндер инде. Мине күберәген апайым һәм ағайҙарым ҡараған. Әсәйемдең Хәйбулла атлы агроном ҡустыһы район үҙәгендә эшләгән ваҡытында ауылыбыҙға килгән. Мин урамда ултырғанмын. Ул миңә таяҡ тотторған да: "Ана, үгеҙ килә!" - тип ҡурҡытҡан. Мин һикереп торғанмын да, йүгергән дә киткәнмен. Шунда тәүге тапҡыр үҙ аяғым менән йөрөй башлағас, йырлап йөрөгәнем иҫтә:

Атаҡайым, ҡайт инде,
Аҡ мендәргә ят инде.
Анау тауға ҡар яуған,
Мынау тауға ни булған?
Кеше атаһы ҡайтып ята,
Атайыма ни булған?

Мине урамда көнбағыш биреп тә, тин биреп тә йырлатҡандар. Ағайымдар, апайымдар елтерәтеп алып ҡайтып китә торғайнылар. Прокурор булып эшләгән Һибәтулла ағайым минең хаҡта: "Бәләкәйҙән яланаяҡ саң борҡотоп бейей, йырлай торғайны", - тип гәзиттә яҙып сыҡты. Ҡартатайымдарға Мөжәүир хәҙрәттең юлы төшкәндә ҡунаҡ саҡырғандар, улар алдында үҙ һөнәрҙәремде күрһәтер булғанмын. Ҡул сабып дәртләндергәндәр, етмәһә, аҡса ла биргәндәр.

Беҙҙең ауылда һуғыш яланынан тәүге "похоронка" склад мөдире булып эшләгән Нәфисә еңгәйгә килә. Әсәйем һөйләй торғайны: "Эй, йәлләйбеҙ Нәфисә киленде, бергә илашабыҙ. Үҙемдең шундай көнгә ҡалырымды уйламай ҙа инем..." Нәфисә еңгә минең атайымды юҡлынып йырлауымды ишетеп микән, келәткә индереп йырлата ла, йә яңы һуйылған малдың эсәк-ҡарынын, йә борсаҡ, йә көнбағыш биреп ҡайтара. Университеттың 1-се курсында уҡығанда Рамаҙан Йәнбәков, Зиннур Ураҡсин, Рәүид Миңлебаев, Тимербай Исхаҡов менән бергәләп агитбригадала йөрөгәндә үҙебеҙҙең ауыл клубында ла концерт ҡуйҙыҡ. Шунда Нәфисә еңгәй: "Мин һинең бәләкәй сағыңда йырлағаныңды ишетеп, әртис булыр был бала, тип юрай торғайным", - тип хәтерҙәгеһе менән уртаҡлашҡайны.

**Бала сағығыҙ һуғыш йылдарына тура килгәс, атай-әсәй иркәләүҙәре лә тәтемәгәндер инде...**

- Атай һуғышта, әсәй көн-төн эштә, беҙҙе кем иркәләһен инде. Бәләкәй саҡта әсәйемдең мине иркәләгәнен бөтөнләй хәтерләмәйем. Атайҙан ҡалған кейемде кейеп алыр ҙа, егеп килтергән ығыш үгеҙен етәкләп, эшкә сығып китә һәм ҡараңғы төшкәс кенә ҡайтып инә. Асығып-талсығып, йәне алҡымына килеп ҡайта. Ундай саҡта ниндәй наҙ, иркәләү тураһында һүҙ булыуы мөмкин. Әсәбеҙҙең ул саҡтағы ҡатылығын апайым да иҫләй. Иҫләй ҙә, аҡлай ҙа ине. Апайыбыҙ Аҡъярға күсеп китте лә бүтән ҡайтманы. Беҙ әсәй менән өс малай тороп ҡалдыҡ. Күберәк ауырлыҡтар ағайымдар елкәһенә төштө инде. Рәфҡәт ағайымдың уҡытыусыһы килеп әсәйемә: "Вазифа апай, Рәфҡәтең уҡымай бит, әйтһәңсе", - тип зарланып китә. Әсәйем мине: "Ана, Рәфҡәттең дәресен әҙерләш", - тип ултыртып ҡуя торғайны. Икебеҙ бер класта уҡыйбыҙ.

Йәй көнө бесәндә ҡырҙа ҡыуышта ятабыҙ. Ауылда концерт булһа ғына ҡайтабыҙ. Ауылды, әсәйҙе һағынабыҙ, унда ла әсәмдең беҙҙе һағынып көтөп алғанын тойманыҡ. "Тәмәке тартһағыҙ, йөмкә ҡыҙҙырып баҫам ауыҙығыҙға", тигәнгә микән, беребеҙ ҙә тәмәке тартманыҡ.

Ә инде беҙ өлкәнәйеп, килендәр йомшай башлағас, әсәм бөтөнләй икенсе кешегә әүерелде. Беҙгә генә түгел, ейән-ейәнсәрҙәренә ярҙам итеү йәһәтенән өлтөрәп торҙо. Бер осор ауылда иң өлкән кеше булып китте. Уны ҡулда йөрөткән һымаҡ йөрөттөләр. Доға уҡый белгән ағинәй дәрәжәһендә йыназаларға саҡыра торғайнылар. Миңә лә доғалар өйрәтте. Хәҙер әсәм өйрәткәндәрен генә беләм, ятларға тырышып ҡарайым, килеп сыҡмай. Әсәмдеке тел осома килә лә сыға, килә лә сыға. Уларҙың дөрөҫмө-түгелме икәнен дә белмәйем. Ашарға ултырғанда әсәм үҙенең алдындағы ризыҡын: "Миҙхәткә, Миҙхәткә", - тип минең алдыма өйгәнен ҡатыным көләп хәтерләй. Мин уның был хәстәрен элек мәхрүм иткән наҙҙарын ошо рәүешле ҡайтарырға тырышыуы тип аңланым. Әсәм ауырып түшәккә ятҡас, янына барҙым. Ул тороп ултырҙы, үҙем тубыҡланып, башымды тубығына һалдым да: "Әсәй, башымды һыйпа әле", - тинем. Көлдө. Беҙҙә улайтып иркәләү юҡ бит инде. Башымды һалғас, ҡулын башыма тейгеҙеп алды ла: "Балаларҙың кемеһенендер түбәһендәге сәсе ике урау ине, һинеке икән", - тигән асыш яһаны вафатына ике көн ҡалғас. Ике урау - ике тапҡыр өйләнеүгә, тигән ырым бар бит беҙҙең халыҡта, шуға ишараһы булды инде. "Сәсең матур гына", - тигән булды тағы ла. Шунан һуң бер нисә көн үткәс, ысын донъяға күсеп китте гәзизебеҙ.

**Миңә лә әсәйегеҙ менән аралашыу бәхете тейҙе. Уны Мәмбәттә "һөләк көтөүсеһе" тиҙәр ине бит инде. Күлдән һөләк тотоп алып килеп, шуны кешеләргә һалып, кире күлгә алып барып ебәрә икән. Ни өсөн шулай итеүен һорашҡайным, әсәйегеҙ: "Улар һауытта һыу менән генә асығып ултыра, һөләктәрҙе ас тотһаң, гонаһ була", - тигәне иҫемдә ҡалған. Был хаҡтағы мәҡәлә "Киске Өфө" гәзитендә баҫылып сыҡты ваҡытында...**

- Беҙгә Өфөгә килгәндә лә һөләктәрен алып килә ине. Тегендә уларҙы ҡарамайҙар, асыҡтыралар, ти торғайны. Ваннабыҙға һыу йыйып, һөләктәрен шунда ебәреп, тәрбиәләүҙән йәм тапҡандыр, һуңынан ҡалдырмай алып ҡайтып китер ине.

**Бала сағығыҙ үткән мөхиттең шәхесегеҙ формалашыуҙағы йоғонтоһо хаҡында ни әйтерһегеҙ?**

- Миңә әсәйемдең атаһында, ҡартатайымдарҙа бик йыш булырға тура килде. Дин тотҡан, биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмаған кешеләр йәшәгән йорттағы мөхит иң киткес йылы, яҡты ине. Ҡорбан салыуҙар, аят уҡытыуҙар, Мөжәүир хәҙрәт менән аралашыуҙары үҙе ни тора! Мөжәүир хәҙрәт килһә: "Дәрүиш килгән", - тигән хәбәр тарала. Ҡунаҡ йыйылар, шунда ҡымыҙ эсәләр, Йомағужа йыраусынан боронғо йырҙарҙы ҡат-ҡат йырлаталар. Беҙҙең төп бурыс - аш алдынан, ашағандан һуң, ҡулына таҫтамал һалып, еҙ таҫҡа еҙ ҡомғандан ҡул йыуҙырыу булды. Ҡартатайымдарға барһаң, үҙеңде бөтөнләй икенсе донъяға эләккәндәй хис итәһең. Ризыҡты исраф итмәү, валсыҡтарына тиклем ташламау, ҡыҫҡырып һөйләшмәү, асыуланмау. Йорттағы ҙур һүҡма сәғәттең һуғыуы ла һиҫкәндерә, ваҡыттың, ғүмерҙең ҡәҙерен белергә ишаралағандай була ине.

**Бала саҡтың ғүмерлек һабаҡ алырлыҡ, ғибрәт булырҙай ваҡиғалары ла булмай тормай...**

- Бер саҡ әсәм тоҙ, шырпы, тағы ла нимәләр алыр өсөн 12 тәңкә аҡса бирҙе. Шуны кәрткә отторҙом. Үҙемдән олораҡ йәштәге малайҙар менән уйнағайным. Кәрт уйнап бөткәс, күмәкләп һыу инергә киттек. Теге аҡсаның ҡайҙа ятҡанын беләм бит инде. Әсәмә нимә тип яуап бирәм, тигән уй баштан сыҡмай. Малайҙарҙан алда теге өйгә килеп, аҡсаны йәһәт кенә алдым да, йүгереп ҡайтып өйгә бикләндем. Тегеләр килеп: "Бур, аҡсаны бир", - тип өй ишеген емерер хәлгә еттеләр. Ошонан һуң ике һабаҡ алдым. Берҙән, кәрт уйнамаҫҡа, икенсенән, кеше әйберенә теймәҫкә.

**Һуғыш осоро ваҡиғаларын иҫләйһегеҙме?**

- Мин һуғыш башланған йылды тыуғанмын. Бер хәтирә - тәҙрәне тын менән иретеп, үгеҙ егеп эшкә киткән әсәйҙе ҡарап ҡалыу, ҡайтҡанын түҙемһеҙләнеп көтөп алыу. Атайымды күрергә теләү тойғоһо миндә ифрат көслө булды. Әле лә йәшәй ул хис миндә.

Бер ваҡыт беҙҙе, атайһыҙ үҫкәндәрҙе, Дим ҡасабаһындағы Башҡорт атлы дивизияһы музейына саҡырҙылар. Музейҙа ултырғанда алып барыусы: "Хәҙер Таһир Кусимов полкы политругының улы Миҙхәт Мәмбәтовҡа һүҙ бирелә. Уның атаһы Әхмәтхан Хужанияз улы 1942 йылдың 5 декабрендә Түбәнге Деево хуторы янындағы ҡаты һуғышта батырҙарса һәләк булған",- тине. Шаңҡып ҡалдым, минең өсөн оло яңылыҡ ине был. Һорашып ҡараһам, мәғлүмәтте Сәғит Әлибаевтың "Комиссар яҙмалары" китабынан алыуҙары хаҡында әйттеләр. Китапхананан шул китапты табып уҡыһам, унда атайым хаҡында мәғлүмәт күп булып сыҡты. Атайым тураһында һуғыш ваҡытында "Ҡыҙыл атлылар" гәзитендә лә күп яҙылған булған. Артабан Ростов өлкәһе хәрби комиссарына хат яҙҙым. Деево ауылы бөгөн юҡ икән, урынында һәйкәл тора. Унда Рәми Ғарипов та булып киткән. Плитаһына 12 фамилия яҙылған, атайымдың исем-шәрифе юҡ. Шул яҡта йәшәүсе яҙыусы Мәхмүт Сәлимов әленән-әле һәләк булыусы батырҙарҙың исеме табылыуын хәбәр итте. Киләсәктә яңы табылған исемдәр яҙылған тағы бер обелиск асылыуы көтөлә. Өмөттө өҙмәйем һаман. Уландарым менән бергә барып ҡайтыу тураһында хыялланам.

**Әгәр ҙә Өфө, университет, юғары белем тигән оло донъяны белмәй, ауылда тороп ҡалған булһағыҙ, бөгөн кем булыр инегеҙ?**

- Шул ағайымдарҙың юлын ҡыуыр инемдер инде. Өлкән ағайым ғүмере буйына ферма мөдире булды, икенсе ағайым ғүмере буйына механизатор булып эшләне, "Атҡаҙанған механизатор" дәрәжәһендә туҡтатты эшен. Ауыл тормошо миңә ят түгел, нисек тә йәшәр инем. Хатта минең менән бергә Аҡъяр мәктәбендә уҡығандарҙың күбеһе ауылда тороп ҡалды. Класташтарымдың берәүһе генә спорт менән шөғөлләнеп, Аҡъярҙа ДОСААФ-та хеҙмәт итте. Ул саҡта илебеҙҙә ауыл хужалығы аяғында ныҡлы баҫып тора ине. Эшләгән кеше хур булманы. Ғүмер буйы һауынсы булып эшләгән Таңһылыу еңгәм ике тапҡыр "Ҡыҙыл байраҡ" ордены кавалеры.



**Рәсәй буйынса ауылдарҙың яйлап бөтөүгә табан барыуына ла шаһитбыҙ. Эш урыны булмағас, йәштәр ҡалаларға күсенә, шуның һөҙөмтәһендә мәктәптәр ябыла. Әммә тәбиғәт бушлыҡты һөй-**

# ҮҪТЕК...

**мәй, изге урын буш тормай. Ҡасандыр кемдәрҙер килеп, бушап ҡалған ауылдарҙы яуларға тейеш булып сыға. Нисек итеп ауылдарҙы һаҡлап ҡалырға һуң?**

- Бигерәк тә матур тәбиғәтле ауыл урындарына ҡыҙыҡһыусылар күп буласаҡ. Хәйбуллаға ҡайтҡанда көньяҡтағы бер район аша үтеп йөрөйбөҙ. Унда юлдың ике яғына ла көнбағыш сәселгән, гөрләп үҫеп ултырған баҫыуҙар. Бәхтиһәң, был ерҙәрҙе Ырымбурҙар ҡуртымға алып, көнбағыш сәскән икән. Тимәк, изге урын буш тормай тигән процесс әле үк бара. Ул ерҙәр бит шул тирәләге ауыл кешеләренеке. Ниңә ул ерҙәрҙе урындағы халыҡ файҙаланмай? Күп мәсьәлә, әлбиттә, урындағы етәкселәргә бәйле. Ошо ерҙе һөрөп, сәсеп, уңышын йыйып алыуҙы улар ойоштороорға тейеш. Ауылды халыҡ үҙе һаҡларға бурыслы, тигән һүҙгә килгәндә, Ҡәҙим Аралбайҙың тыуған ауылы Таңатарға ҡайтып, бер нисә кеше йорт һалып ҡараны, тик дәррәү рәүештә ҡайтыусылар табылманы.

Мин әрмелә Калуга өлкәһендә хеҙмәт иттем. Әле совет власының иң көслө йылдарында ундағы ауылдарҙа ҡарт-ҡоролар ғына тороп ҡалғайны. Ә Башҡортостан шарттарында ауылды һаҡлау милләтте һаҡлауға тиң мәсьәлә итеп ҡаралырға тейеш. Йә, миңә Салауат, Белорет, Күмертау ҡалаһында тыуып үҫкән башҡорт яҙыусыһын, артисын атағыҙ, тип әйткәнем дә бар. Ҡаланы үҫтереү проблема түгел, ул һин теләһәң-теләмәһәң дә үҫә. Ҡаланың үҫеш системаһы өсөн барыһы ла эшләнгән. Әле Сибайҙан Подольск аша Гайға поезд юлы һалыу мәсьәләһе килеп тыуғас, халыҡты, йәштәребеҙҙе тыуған яғыбыҙҙа эш менән тәьмин итерлек, мәктәптәрҙе һаҡлап ҡалырлыҡ мөмкинлектәр асыласаҡ.

Хәҙерге ауылдарҙа ферма юҡ, ә магазиндар һөт, ит ризыҡтары менән тулы. Шул уҡ ваҡытта республиканың төньяҡ-көнбайыш райондарында колхоздар һаҡланып ҡалған. Илеш, Туймазы, Дүртөйлө яҡтарында колхоздар икенсе формала ойошҡан. Ә беҙҙең яҡтарҙа хатта фермаларҙы нигеҙенә тиклем емереп ташланылар.

**80 йәшкә етһәгеҙ ҙә, йәштәрсә оптимистһығыҙ, быны серҙәре лә барҙыр бит?**

- 80 йәшлек булараҡ, нисек булырға тейешлегемде белмәйем. Беҙҙекеләр оҙон ғүмерле булған бит инде. Әсәм йөҙгә етте, уның ҡустылары - береһе 90-да донъя менән бәхилләште, икенсеһе әсирлек, һөргөн ғазаптарын үтһә лә, әле лә иҫәнһау, шөкөр, яңыраҡ 98 йәшен тултырҙы. Апайым 90 йәшендә донъя ҡуйҙы, бер ағайым 85-кә, икенсеһе 80-гә етте. Һәр көн бер сәғәт массаж, гимнастика яһауым, тәмәке тартмауым, көн һайын саф һауала йөрөү, донъямдың бөтөн булыуы, балаларымдың барыһының да урынлашҡан булыуы, тәүге ғаиләмдәге балаларымдың хәҙергеләре менән аралашып йәшәүҙәре - ошолар ҙа йоғонто яһамай ҡалмайҙыр. Ҡатыным Нәфисәгә бик рәхмәтлемен, ул балаларҙың барыһына ла тигеҙ ҡарай.

**Етәксе, ойоштороусы, кеше булараҡ үҙегеҙҙең күңелде тынысландырып, һеҙҙе бәхетле иткән, башҡаларҙың хәтеренә уйылған ниндәй сифаттарығыҙҙы, эштәрегеҙҙе телгә алып үтер инегеҙ?**

- Минең дошмандарым юҡ. Төрлө мөхиттә аралашып йәшәргә тура килде, эшемдә, ғаиләмдә, ауылда, Мәскәүҙә. Күп кенә ситуацияларҙы алдан һиҙеүем хатта үҙемде дошманы тип һанаған кешеләр менән дә мөнәсәбәтте ыңғай ҡорорға ярҙам итте. Күңелемә ятмаған, күрәлмаған кешеләр менән дә аралашырға, ниндәйҙер мөнәсәбәт ҡорорға тура килде, сөнки биләгән вазифаларым шулай булырға ҡушты. Мөнәсәбәттәрҙе ҡатмарлаштырырға бер ваҡытта ла тырышманым. Ҡаҡлы ялға киткәнсе кемдәр менән эшләгәнмен, барыһының да миндә телефон номерҙары бар, барыһы менән дә аралашам. Урамда берәйһе осрап: "Һеҙ миңә шул ваҡытта ярҙам иттегеҙ", - тип әйтеүселәр күп. Уларҙың күбеһен танымайым да. Хөкүмәттә, Президент аппаратында эшләгәндән һуң ҡала хакимиәтенә күскәс, ундағы водителдәр, техничкалар донъяуи йомоштары менән килә торғайны. Уларға хәлемдән килгәнсе ярҙам итергә тырыштым.

Бер мәл пенсиялар, балалар пособиелары, эш хаҡтары түләнмәй йә һуңлап түләнә башлаған ауыр заман килде. Шул саҡта ҡала хакимиәте бинаһына һуғыш, хеҙмәт ветерандары, инвалидтар митингҡа килде. Уларҙы урамда тотмаҫ өсөн актовый залға индерҙеләр ҙә, социаль мәсьәләләр буйынса мэр урынбаҫары булып эшләүсене аңлашырға ултыртып ҡуйҙылар. Ярһып-ярһып һөйләне ветерандар, таяҡтары менән туҡылдаттылар, тормошобоҙҙоң ауыр булыуы хаҡында дөрөҫ дәлилдәр килтерҙеләр. Парҙарын сығарып бөткәнсе уларҙы оло түҙемлек менән тыңлап ултырҙым да, шулай һүҙ башланым: "Хөрмәтле һуғыш, тыл ветерандары, һеҙҙең алда Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған яугирҙың улы баҫып тора. Һеҙҙең күбегеҙ һуғыштан иҫән ҡайтып, балаларығыҙҙы уҡытып, тәрбиәләп, кеше итеп аяҡҡа баҫтырғанһығыҙ. Ә беҙ атайһыҙ үҫтек. Һеҙ фашистарҙы һуғышта ҡыйратып, илгә ҡайтып һуғыш ваҡытында ҡыйралған илебеҙҙе, үжалыҡтарҙы аяҡҡа баҫтырғас, беҙҙең әсәйҙәргә енеллек килде. Беҙҙең ғаиләләргә енеллек килде. Һеҙҙең арҡала икмәккә туйҙыҡ. Өҫтөбөҙ бөтәйҙе. Шуға күрә мин үҙемдең быуын исеменән һеҙҙең алда баш эйәм, оло рәхмәтемде белдерәм. Был ҡыйынлыҡтар ваҡытлыса. Һеҙ яуҙарҙа йөрөгәндә сабыр итә белдегеҙ. Ошо ауыр мәлдә лә мин һеҙгә оло сабырлыҡ теләйем. Тормош енеләйер ул, гел былай бармаҫ..."

Залда оло тынлыҡ урынлашты. Ветерандар яйлап сыға башланы. Кемеһеләр килеп арҡамдан һөйә, кемеһеләр ҡосаҡларға итә. Бындай ситуациялар тормошомда байтаҡ булды.

Мин Хөкүмәттә эшләгәндә Яңы йыл шыршылары, Еңеү көндәре, Хөкүмәт, Президент исеменән сәскәләр, веноктар һалыу кеүек бихисап сараларҙы үткәрә торғайным. Ҡалаға эшкә күскәйнем, шул саралар ҙа артымдан бурыс булып эйәреп барҙы ла ҡуйҙы. Саралар йөкмәткеле, мәғәнәле, күңелле һәм оригиналь булһын өсөн фантазияны ла эшкә егергә тура килде. Бер йылды Бөйөк Еңеү байрамында трамвай вагондарын бергә ялғап, һуғыштан ҡайтыусы поезд эшләнек. Күҙ алдына килтерегеҙ: ҡала советының ҡаршыһына ветерандарҙы тейәп, тантаналы рәүештә поезд килеп туҡтай. Ҡатындар, йәштәр, балалар һалдаттарҙы сәскәләр менән ихлас ҡаршылай. Ҡосаҡлашалар, илашалар. "Кемдең идеяһы булды ул?" тип, Урал Насир улы Бакиров һаман шул Еңеү байрамын маҡтап һөйләй...

**Һеҙ ҡала хакимиәтендә эшләгән осорҙа тарихта тәүге тапҡыр баш ҡаланың башҡортса "Киске Өфө" гәзите сыға башланы. Әйтергә кәрәк, "Киске Өфө" милләтебеҙ сәхифәһенең өр-яңы битен башлап ебәрҙе. Шулай бит?**

- "Киске Өфө" "Вечерняя Уфа" кеүек мәғлүмәти баҫма булырға тейешме? Ошондайыраҡ һөйләшеүҙәргә шаһит булырға тура килде Өфөлә башҡорт телендә гәзит сыға башлағанда. Һәр яңылыҡ, бигерәк тә ул сығымдарға бәйле булһа, йәнә рухиәт өсөн икән, ҡаршылыҡтарға осрай. Был осраҡта ла башланғысты хуплаусыларға ҡарағанда, аяҡ салыусылары күберәк булғандыр. Әммә гәзиттең тәүге һандары тарала башлау менән уның башҡа баҫмаларҙан үҙенең йүнәлеше, тәрән йөкмәткеһе, актуаллеге, ҡыйыулығы менән айырылып торғанын уҡыусылар күҙгә элә һалды һәм ул Өфөлә генә тороп ҡалмай, тотош республикаға таралды ла китте. Беҙ уны баш ҡала менән һәр ауыл, район араһындағы рухи, мәғлүмәти күпер итеп ҡабул иттек. Һәм бына 20 йылға яҡын ул үҙенең ошо ролен дауам итә. Хәҙер инде йәшәйешебеҙҙе "Киске Өфө"һеҙ күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Ысынлап та, ҡорғаҡһыған ергә ямғыр шифаһы нисек йән өрһә, шулай килеп инде гәзит рухи донъябыҙға. Килеп инде лә, уҡыусыларын яңынан-яңы рубрикалары, рухи, сәмле һүҙе менән ҡыуандырып, үҙенең тейешле урынында ҡалды. Тағы ни әйтәһең? Афарин, "Киске Өфө"ләр!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*



# ТӘҮЛЕК ӘЙЛӘНӘМЕ, ӘЛЛӘ ҺУҘЫЛАМЫ?

**Ваҡыт төшөнсәһе арауыҡ менән бергә халыҡ мәҙәниәтенең иң төп төшөнсәләренең береһе. Ваҡыт һәм арауыҡ төшөнсәләре бик боронғо төшөнсәләр. Мин был бәләкәй генә күҙәтеүемдә ваҡытты философик төшөнсә булараҡ аңлатырға йыйынмайым. Быға минең белемем дә етмәй.**

Студент йылдарында "Нимә ул донъя, арауыҡ һәм ваҡыт?" тигән һорауҙар менән ныҡлап ҡыҙыҡһыныып, соҡона башланым. Университетта беҙҙе уҡытҡан бер философ минең китапханала оҙаҡ ултырып, күп уҡыуымды күҙәтеп, "Нимәне аңларға тырышып улай күп уҡыйһың?" тип һорашҡас, үҙемде уйланырға мәжбүр иткән баяғы темаланы атаным. Философ миңә оҙаҡ ҡына һынсыл ҡарап торғандан һуң: "Егет, ул темаға күптәр инеп киткәйне, тик кире сыға алманылар. Был тема күптәрҙе харап итте. Һаҡ бул!" - тип мине киҫәтеп ҡуйҙы. Аҙаҡ был философ уҡытыусы мине иҫкәртһә лә, үҙен һаҡлай алманы. Баяғы мине ҡурҡытҡан ергә инеп китеп, сыға алмай, хәстәханаға эләгеп харап булды, бахырың.

Ысынлап та, бик ауыр һәм фундаменталь тема. Бөтә донъяға билдәле ғалимдар әле булһа был тема өҫтөндә баш вата. Мине, ғөмүмән, философияның "арауыҡ", "ваҡыт", "донъя" төшөнсәләренән бигерәк, "Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ шул нәмәләр тураһында уйландымы икән, әгәр уйланһалар, уларҙы нисегерәк күҙ алдына килтерҙеләр, аңланылар икән?" тигән һорау ҡыҙыҡһындыра ине. Ә был юҫыҡта уларҙы философиянан бигерәк этнография фәне өйрәнә. Һәм этнограф булараҡ, был теманы ярайһы уҡ асыҡлай алғандаймын. Быны шул үҙем асыҡлай алған тиклеменең телебеҙгә ҡағылышлы бер бәләкәй генә өлөшөн уҡыусыларға тәҡдим итергә булдым. Сөнки был башҡорт теленең хәҙерге хәле, торошо менән туранан - тура бәйле.

Беҙҙең күптәребеҙ магазиндарҙың йәки башҡа ниндәйҙер ойошмаларҙың ишегенә, стенаһына "Тәүлек әйләнәһенә эшләй", тип яҙылған алтаҡталарҙы уҡығаны ла, күргәне лә бар. Тик бик һирәктәр генә: "Ә тәүлек әйләнәме ни?" - тип уйланалыр. Урыҫ теле өсөн "Круглые сутки", "Круглый год" тигән һүҙбәйләнеш дөрөҫ. Сөнки уларҙа ваҡыт цикл барлыҡҡа килтерә, ә башҡортта ваҡыт һуҙыла һәм шуға күрә төрлө ойошмаларҙың ишегенә, стенаһына урыҫса "Круглые сутки" тигән яҙыу эргәһенә башҡортса "Тәүлек буйына" тип яҙыу дөрөҫ булалыр. Башҡорт теле ҡанундарына "ваҡыт әйләнә" тигән төшөнсә ят нәмә. Беҙҙең үҙебеҙҙең телебеҙҙә Ислам менән бергә килеп ингән "ваҡыт" һүҙенә тиклем "саҡ" тигән термин булған. Был һүҙ төрлө фонетик варианттарҙа бөтә төрки телдәрендә лә бар. Йәғни, ваҡытты аңлатҡан "саҡ" һүҙе беҙҙең төп үҙ һүҙебеҙ. Был һүҙ телебеҙҙә әле лә әүҙем ҡулланыла. Мәҫәлән, бала саҡ, теге саҡ.

Телсе ғалимдар урыҫтың ваҡытты аңлатҡан "время" тигән һүҙенең тамырында "вращаться", йәғни "әйләнеү" тигән мәғәнә ятҡанлығын күптән асыҡлағандар. Ғалимдар шулай уҡ был "время" һүҙенең "веретено" (орсоҡ) һүҙе менән бер тамырлы икәнен дә билдәләп ҡуйған.

Ғалимдар төрлө халыҡтарҙың мәҙәниәтендә ваҡыт йә цикл (әйләнеү), йәиһә һуҙым (линия) булараҡ формалашҡан, тиҙәр. Донъялағы эреле-ваҡлы халыҡтар һәр ҡайһыны ваҡытты йәшәгән тәбиғәтенән һәм шуға бәйле хужалыҡ итеү ысулынан, йәғни үҙенең тормош тәжрибәһенән сығып, үҙенсә аңлай һәм был халыҡтың мәҙәниәтендә (телендә, фольклорында, этнографияһында һ.б.) үҙ сағылышын таба. Урыҫтарҙың ата-бабаларының йәшәү шарттары, хужалыҡ итеү ысулдары ваҡытты цикл мәғәнәһендә формалаштырһа, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ үҙ тормош тәжрибәһенән сығып, ваҡытты һуҙым мәғәнәһендә аңлағандар.

Шулай итеп, хәҙер үҙ тыуған телен ныҡлап белмәгән йәки уны белергә лә теләмәгән быуын формалашып килә. Баяғы алтаҡталарҙағы "тәүлек әйләнәһенә" тигән яҙыуҙар (туранан-тура калька-тәржемәләр) телде белмәүҙең ҡасафатылыр, тип уйлайым. Беҙгә телебеҙҙең үҙенсәлектәренә һаҡсыл булырға, уларға ихтирам менән ҡарарға өйрәнергә кәрәк. Сөнки улар халыҡтың тарихи үткәненең сағылышы, эҙе. Ата-бабаларыбыҙҙың беҙгә ҡалдырған иң оло мираҫылыр...

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

***✓ ...Сүкеш тотҡан Рәүиз өйгә табан атлаған Ерәнде күреү менән, бәләкәй бала шикелле, ишек артына боҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Шунан ҡапыл бер соҡорға төшөп китте. Күҙ асып йомған арала муйындан аҫта тора ине.***




Урам осонан был яҡҡа боролған ҡара пикапты күреү менән ҡото осҡан Рәүиз алан-йолан ҡаранды, йәһәт кенә боҫорға ине лә, ләкин яңы төҙәлеп ятҡан өй, кәртәләп алынмаған ихатала йәшенер, ҡасыр урын юҡ ине. Үкенесле уй һыҙып үтте: "Их, нишләп кенә бөгөн бында килдем икән? Берәр аҙна күренмәй торорға булған да бит..." Тик хәҙер һуң, коллекторҙар уны тағы ла бәргесләп аласаҡ. Ипотека, кредит, проценттар... Уй, ул "аңлашыуҙар"! Ҡаҡшатты Бузмый менән Ерән! Эйе, уларға ҡушамат таҡҡан Рәүиз. Өс көн элек ошо ике әҙмәүер уны ап-аруҡ ҡына тәпәләштереп киткәйне. Хәйер, уға тиклем дә танау аҫтында йөҙрөк терәгәндәре булды. Шул мәлдәр иҫкә төшөү менән тәне зымбырлап китте.

- Нишләп һаман бурысыңды түләмәйһең, йәнеңде алабыҙ! - тип екерҙе был ике әшнә аҙаҡҡы килгәндәрендә.

- Аҡса табыу менән...- тип инде нисәнсе ҡат ҡабатланы Рәүиз.

- Һо, имеш, аҡса таба! Тәк, иҫкә төшөр, кем булып эшләйһең?

- Мин корректор...

- Нимә! Был беҙҙе мыҫҡыл итәме? Беҙ - коллектор! - тип екерҙе Ерән.

- Корректор тиген һөнәр бар! - Бузмыйы ғилемлерәктер, уныһы шулай тине.

- Нимә менән булыша кор-р-р-ректор?..- тип ышанмағандай һораны Ерән.

- Улмы? - Бузмый Рәүиздең яғаһынан ҡулын ыҫҡындырҙы, ҡорбанын ситкә этте лә, ауыҙын мыҫҡыллы бәлшәйтте. - Тауыҡ ҡыйлыҡта ем эҙләйме? Былар хәреф сүпләй. Эҙләгән еме - яҙыу хатаһы. Шулаймы, корректор?

- Шу-шу-шу... - тип өҙләкһеҙ баш ҡаҡты Рәүиз.

Уның күпме эш хаҡы алғанын ишеткәс, Бузмыйҙың ауыҙы йәнә мыҫҡыллы салышайҙы:

- Тимәк, бурысың йөҙ йылдан ғына ҡайтара! Нимә, көтәбеҙме?

- Шуға ла беҙ - тиҙләтеүселәр - бында, - тине Ерән.

Бузмыйҙың йөҙрөгө танау аҫтына терәлде.

- Кеше яҙғанды төҙәтеүсе, бурысты ҡасан ҡайтараһың, юҡһа, беҙ бит хәҙер һинең яҙмышыңды "төҙәтәбеҙ"! Һинең яҙмыш - тотош хата!

Ҡайтара алмай шул. Ҡәйнәһе Милана Дауисовна уны төп башына ултыртты. "Һинең вкус юҡ, төҙәлөш материалдарын үҙем һайлайым", - тип бөтөн аҡсаны һыпырып алды. Һәм был яҡҡа юлды онотто. Эйе, Милана Дауисовна баштан уҡ ҡыҙын уға кейәүгә биргеһе килмәгәйне. Диана менән өйләнешкәс тә мөнәсәбәте үҙгәрмәне. Ҡыҙын бик бай кешегә биреү, юғары даирәләрҙә өйөрөлөү тураһында хыялланған ханым университет тамамлап, корректор булып саҡ эшкә урынлашҡан бер хәйерсене Дианаһының үҙ итеүен һис кенә лә аңлай алманы. Тик әсәһенең көнөн-төнөн ҡолаҡ итен сәйнәүе кәләшен дә үҙгәртте, үҙе лә ҡай саҡ әсәһенә оҡшай башланы. Меҫкен кейәүҙең уларға ярарға тырышып, ашығып коттедж һала башлауы - шуның бер ғилләһе. Рәүиз ауылдағы иҫке өйөн һата алды, унан барыбер әллә ни аҡса сыҡманы. Хәйер, төүге взносҡа таҡы-тоҡо етеп ҡалды... "Төҙәлөш кәрәк-яраҡтарын үҙем хәстәрләйем", тигән ҡәйнә, кейәүенә банк биргән барлыҡ аҡсаны алыу менән, килеп күренмәҫ булды. Дианаһы ла әсәһе һүҙенән сыҡманы, уның янына ҡайтты ла китте: "Йортондо һалып бөткәс, килерһең".

Рәүиз Дианаһына шылтырата, тик тегенеһе, ғәҙәтенсә, телефонды алмай. Уның урынына ҡәйнәһе тауыш бирә: "Әйтелде бит, һалып бөт өйөңдө башта, шунан шылтырат! Минең ҡыҙым алтындан да ҡыйбат. Уны һоратыусылар әле лә етерлек..."

* * *

Бына хәҙер Рәүизгә нисек булһа ла йортто төҙәп бөтөргә лә, кәләшен кире ҡайтарырға кәрәк. Яйлап эшкиндерер ине, тик бына коллекторҙар ҡара күләгәһенә әйләнделәр, килә лә баҫалар.

Ана, ҡара пикап урам буйлай. Машина хужаһы - бегемотҡа оҡшаған Бузмыйы уғата яуыз. Рәүиздәр яғында һимеҙ кешене "бузмый", тиҙәр. Ул шулай ҡушамат таҡты төп коллекторға. Бына-бына машина һалынып ятҡан өйө эргәһенә килеп туҡтаясаҡ. Рәүиз иһә уларға күренмәҫ өсөн ер тишегенә инергә әҙер. Һатҡан иҫке өйҙөң ишеге генә стенаға терәүле тора. Ҡомартҡы ишек тип, ташларға йәлләп ошонда алып килеп һөйәгәйне. Яланғас стенаға терәлеп, ҡыуыш яһаған, ләкин ҡыуыштың ике яғы ла асыҡ. Рәүиз бер урында зыр әйләнде. Ҡасырға! Ҡотолоп ҡалырға!

Пикап йорт эргәһенә килеп туҡтаны.

- Теге байғош ялт-йолт итеп күренеп ҡалғайны, әллә тәҙрә аҫтына сүкәйҙе, - тине Ерән.

- Дүрт стена араһында ҡайҙа ҡасһын? Ҡолағынан тотоп бында алып кил, ул әле тулыһынса корректор булып бөтмәгән...

- Аңламаным, нисек булып бөтмәгән?

- Корректировка эшләйбеҙ корректно ғына итеп. Артабан ул текст корректоры түгел, ә тормошоноң корректоры буласаҡ.

Ерән иренен ҡыйшайтып көлдө, шунан ергә төкөргәс, өй яғына атланы. Ә Рәүиз үҙе лә һиҙмәҫтән һөйәлгән ишек артына боҫто. Уға тиклем, нишләптер, өс тапҡыр ишеккә туҡылдатты. Ни хәл итәһең, аптыраған өйрәк күлгә арты менән сума...

- Эй, сыҡ, иҫәүән! Аҡылдан яҙҙыңмы әллә? - тине Ерән ишеккә ҡарап.

Яуап биреүсе булманы. Ерән эйелеп "ҡыуыш" эсенә ҡараны. Күҙе аҡайҙы: берәү ҙә юҡсы! Һуң, ул бит корректорҙың ошонда инеп ҡасҡанын үҙ күҙҙәре менән күрҙе! Быныһы ҡалай була?

Хәйер, кисә бер әшнәһенең яңы машинаһын ныҡ йыуғайнылар, баш әле лә зәңкеп тора. Шулай булғас, юҡ нәмә күренһә лә, аптыраҡ түгел... Ул ситкәрәк китеп, йәһәтләп тәмәке тоҡандырҙы. Ныҡ итеп берҙе һурҙы ла, ышанмаған төҫлө иҫке ишеккә ҡараны. Ишек эргәһендә сүкеш ята.

- Ә-ә-ә, минең менән йәшенмәк уйнамаҡсыһыңмы, клоун! Хәҙер тәпәйеңдән һөйрәп сығарам! - Ерән һөйләнә-һөйләнә ишеккә яҡынлашты. - Сыҡ, йәнеңде алмаҫ борон. Уһу, бында ҡараңғы. Мин ҡараңғылыҡты ныҡ яратам, белеп ҡуй! Ҡараңғылыҡ минең дуҫым! Ҡараңғы, рәхәт ҡараңғыла! Күҙҙе быуа торған япма бөркәнеп ултырмайҙыр бит теге хәрәсән? - Ерән һөрмәнеп, ишек артына инеп китте.

Машина эсендә ултырған Бузмый ярҙамсыһын һәм ҡорбанын көтә-көтә хәле бөттө.

- Сволочь, ауыҙынан борлап тора ине. Хәҙер аулаҡта баш төҙәтә, тимәк! Атаңды уҡытмаһаммы! - тип һөйләнә-һөйләнә машинаһынан сыҡты ла өй яғына атланы.

- Эй, һин ҡайҙа?

Яуап биреүсе булманы. Бузмый өйҙә тегеләй ҙә, былай ҙа әйләнеп сыҡты, бер йән эйәһен дә тап итмәне.

- Шайтан алғыры, ҡайҙа олаҡты ярҙамсым? Был ни булды? - Ул оҙаҡ ҡына баҫып торҙо. - Теге етешмәгән корректор менән бер нәмә уйланылармы? Икеһе лә юҡ бит. Ярар, асыҡларбыҙ...

Сығып барған еренән күҙе иҫке ишеккә төштө. Әҙерәк уйланып торғас, тегене күтәреп алды. Иҫкерәк, ну, бара. Иҫке булһа ла ныҡ күренә. Буярға ғына кәрәк. Баҡсаға алып барһа, һатып алыусы табылыр. Арзан малға ҡыҙыҡмаған кеше юҡ. Бузмый ишекте пикабының кузовына һалды ла, ҡуҙғалып китте. Ерән кәрәгән аласаҡ әле унан.

...Сүкеш тотҡан Рәүиз өйгә табан атлаған Ерәнде күреү менән, бәләкәй бала шикелле, ишек артына боҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Шунан ҡапыл бер соҡорға төшөп китте. Күҙ асып йомған арала муйындан аҫта тора ине. "Баҙ булғанын белмәнем бит! Баҙҙа ҡасып ҡотолоп булырмы икән? Әллә кире сығырғамы? Юҡ, был ҡотолоу юлы! " Рәүиз аҫҡа табан нисек осҡанын үҙе лә һиҙмәне.

Ир күҙен асҡанда тирә-йүн яп-яҡты ине. Ниндәйҙер йылы нур менән солғап алынғайны ул. Тирә-йүн яҡты, ә ҡояш юҡ.

"Мин ҡайҙа? Бында бит бөтөнләй икенсе донъя. Үлеме мин, тереме?" Йөрәге жыу итеп китте, хатта тороп ултырғанын да һиҙмәй ҡалды. Хәҙер кемдәр килер? Рәхмәт фәрештәләреме, әллә уны язалаусылармы? Төүге һорауҙары нимә булыр? "Ыһ" тип ыңғырашты ул. Бер яҡтан, коллекторҙарҙан туҡмалмай-һыҙланмай ғына китеп барыуы яҡшы. Икенсе яҡтан, Дианаһы уны юғалтып өҙгөләнәсәк. Улар бит яратышып өйләнештеләр. Тик ҡәйнәһе... Юҡ, берәүҙе лә яманларға ярамай, ул хәҙер баҡый донъяла... Банк өйҙө тартып аласаҡ, ҡатынына ул бер нәмә лә ҡалдыра алманы, шуныһы үкенесле. Нишләп берәү ҙә күренмәй? Фәрештәләрҙе көтә-көтә көтөк булынды бит. Әллә был донъяла ла ул япа-яңғыҙымы? Ул тағы тирә-яғына күҙ һалды. Ер аҫтына төшкән һымаҡ ине лә баһа, ләкин бының күге бар. Рәүиздең күҙе даһрайҙы: күк ҡояшһыҙ, барыбер шундай нурлы. Хушландырыр яғымлы нур, эйе, бында ҡояш кәрәкмәй ҙә.

"Ғәләмәт хәлдәр... Мин бер ниндәй ҙә баҙға төшөп китмәгәнмен. Ишек артында... Ишек артында икенсе донъя? Ул ҡалай була инде? Нисек тә берәйһен табырға кәрәк". Рәүиз тирә-яғына ҡарана-ҡарана ары атланы. Һуҡмаҡ, гүйә, зөмрәт япмала. Ә ағастарҙың матурлығы! Япраҡтары алтын төҫөндә, үҙҙәре ем-ем килә. Рәүиз күҙҙәрен ышҡыны. Бына бер мәл япраҡтар бөтәһе лә бер юлы икенсе яғына әйләнде. Уларҙың был яғы фирүзә төҫөндә ине. "Ыста, мин ожмахталыр ул!" Дианаһы менән хушлашыуы ғына мәғәнәһеҙ килеп сыҡты. Шулай ҙа күңелдә үкенес юҡ. Ул тирәйүндең матурлығына хайран ҡалып атлай бирҙе, сәскәләргә ҡарап күҙе ҡамашты. Ауыҙ тирәһенә эйелеп-һығылып төшкән емештәрҙе тәмләне.

Аҙмы-күпмелер барғас, тәбиғи, бындағы ваҡыт иҫәбен Рәүиз белмәй, бер тауыш ишетелгән һымаҡ булды. Ирҙең ҡолағы ҡарп итеп ҡалды. Эйе, кемдер ыңғырашҡан һымаҡсы... Хәҙер шул яҡҡа боролдо. Ошондай хозурлыҡ эсендә кем ыңғырашырға тейеш? Аҙымын тиҙләтте һәм бер аҙҙан ҡатып ҡалды. Алдында көйәнтәләй кәкерәйеп Ерән ята ине. Һиҫкәнде, әлбиттә. "Мине эҙәрлекләп килеп еткәнме! Иҫән саҡта тайырға кәрәк был тирәнән!" Шулай ҙа ҡурҡыу тиҙ үтте, сөнки үҙенә бында хәүеф янамағанын йәнетәне менән тоя ине. Йөрәге йәнә ғәйрәт менән тулышты. Рәүиз ыңғырашҡан әҙәмгә яҡыныраҡ килде. Аһ-аһ, арандай ҙур ине бит, нимә булған уға, нишләп бәләкәсәйеп ҡалған? Рәүиз уға табан эйелде, шул саҡ үҙенең ҡулдарына иғтибар итте һәм Ерәндән үҙен күпкә ғәйре икәнен аңғарҙы. Тегегә инде ҡыйыу тауыш менән өндәште.

- Бында нишләп ятыш, коллектор?

- Кем һин, эй, мәрхәмәтле кеше?

"Әллә һуҡырайған?"

- Нимә, танымай башланыңмы?

- Хөрмәтле корректор! Таныным! Таныным тауышыңдан. Ҡәҙерлем, нишләйбеҙ был ҡараңғы зинданда?

- Ҡараңғы? Нимә, алйып бараһыңмы әллә? Донъя нурға сумған! Беҙ Йәннәттә!

- Нисек? - Ерән күҙен ышҡыны. - Сәсрәп кенә киткере, бер нәмә лә күрмәйем. Ҡотҡар мине, изгелекле корректор. Мин тамуҡта!

Рәүиз тынысландырыр өсөн тегенең иңбашына ҡағылды.

- Күрәм! Бына күҙем асылды, - тип ҡыҫҡырып ебәрҙе Ерән. - Бер ҡағылыуың булды, күҙем асылды! Вәт, әй! Һин яҡтылыҡ! Һин әүлиә!

- Тағы нимә тип һайрамаҡсыһың?

Ерән уны ишетмәне шикелле, тирә-яғын байҡаны, ауыҙы салышайҙы.

- О-о-о-о-о! Был бит... Иҫ киткес! - Ул торған еренән кире ултыра төштө. Күҙҙәрен ышҡыны, битен усланы. Рәүиз Ерәндең алдашмағанын, ысынлап та, әле генә күрә башлауына ышанды, ул иркен тын алды: тимәк, был Рәүиздең донъяһы! Ерән башын сайҡай-сайҡай тағы тороп баҫты һәм хәҙер бәһлеүән Рәүизгә ҡарап шаҡ ҡатты.

- Оһо, мин һине бер байғош тип күрә инем. Һин бит алпамышаның да алпамышаһы! Кисер мин оңҡотто!

- Юхалана башланыңмы? Нимә, үҙең генә мәңге бүгәй булып йөрөрмөн тип уйлағайныңмы? Тормош алмаш килә ул, - тип өҫтәне Рәүиз асыу менән. - Йә, киҙән миңә теге мәлдәге һымаҡ!

- Коллектор булып яңыраҡ ҡына эшләй башланым бит... Нимә ҡушалар, шуны үтәргә тура килә.

- Ярай, бигәйбә, һинең - үҙ юлың, минең - үҙ юлым.

- Ана, мине тағы ҡараңғылыҡ баҫты! Китмә!

**(Дауамы бар).**

*✓ "Билдәле рус фотографы Сергей Прокудин-Горский 1910 йылда төшөргән "Башкиръ стрелочникъ" фотоһына мөрәжәғәт иттем. Әйткәндәй, был башҡорттарҙың беренсе төҫлө фотоһы".*



АФАРИН!

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮ СӘНҒӘТЕНЕҢ...

## рухи сағылышы ул "Байыҡ"

**Ошо көндәрҙә Өфөлә "Байыҡ" башҡорт бейеүҙәрен башҡарыусыларҙың сираттағы телевизион конкурсы үтте. Бына инде 13 йыл рәттән ойошторолоп килгән иҫ киткес энергиялы һәм матур, ысын мәғәнәһендә халыҡ фестиваленә әүерелгән сарала Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 20 меңдән ашыу бейеүсе ҡатнашып өлгөрҙө.**

"Байыҡ" быйыл да башҡорт бейеү сәнғәтенең рухи сағылышына, ысын байрамға әүерелде. Унда Башҡортостандың, Санкт-Петербург, Сорғот, Силәбе өлкәһенең Һатҡы ҡалаһынан оҫта бейеүселәр һәм матур коллективтар ҡатнашты. Уларҙың барыһы ла Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының махсус призына лайыҡ булды.

"Йыл сәхнәләштереүсеһе" исемен иғлан итеү конкурстың иң тулҡынландырғыс һәм ҡыуаныслы өлөшө булғандыр. Был юғары баһаға Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Хәлил Ишбирҙин лайыҡ булды һәм уға 100 мең һумлыҡ премия тапшырылды. Хәлил Әнүәр улы Стәрлетамаҡ бейеү театрына нигеҙ һалыусы, "Бөрйән егеттәре", "Порт Артур" һәм башҡа бик күп танылған бейеүҙәр авторы булараҡ барыһына ла яҡшы таныш. Бөгөн ул республиканың район-ҡалаларында балаларға бейеү сәнғәтенең серҙәрен аса. Быйылғы "Байыҡ" конкурсында башҡорт бейеүенең легендаһы 20 йыл үткәндән һуң уҡыусылары менән бергә йәнә сәхнәгә күтәрелде һәм көслө, йөрәктәрҙе елкендерер пластик спектакль күрһәтте.

Ә бына "Байыҡ" телевизион конкурсының алыштырғыһыҙ баһалама ағзаһы, Башҡортостандың халыҡ артисы Ратмир Бәҙретдиновтың яҡты иҫтәлегенә булдырылған махсус премия сығышы менән Учалы районынан Айназ Низаметдиновҡа тапшырылды. Шулай уҡ "Халыҡ бейеүсеһе" номинацияһында Учалының "Ләйсән" ветерандар ансамбле етәксеһе Ғәлимйән Хилажев, ә "Рәсәй Федерацияһында халыҡ бейеүен пропагандалаған өсөн" номинацияһында Санкт-Петербургтан Александра Соловьева еңеүсе тип табылды. Ике һайлап алыу туры йомғаҡтары буйынса "Иң яҡшы йыл етәксеһе" исеменә Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Лиана Бурмистрова лайыҡ булды.

Шулай итеп, "Байыҡ" йылдан-йыл тамашасыларын оҫта бейеүселәре менән генә түгел, яңы һәм үҙенсәлекле бейеүҙәре менән дә һоҡландыра. Яңы асыштарға, таланттарға быйыл да бай булған конкурстың Гран-приһына лайыҡ булған бейеүселәр һәм коллективтарҙы телевизор ҡараусылар тиҙҙән Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм Ҡурай-ТВ каналдарындағы тапшырыуҙарҙан ҡарай аласаҡ.







# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРЕБЕҘ...

## төп нөсхәһендә тергеҙелә

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала "Тамға" II халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсының финалы уҙҙы. Оҫталар күс һалып, күҙ нуры түгеп, күңел йылыһы биреп эшләгән сағыу кейемдәре менән Ә.-З. Вәлиди исемендәге Милли китапханала таныштырҙы.**

Быйыл конкурстың йомғаҡлау турында 36 кеше ҡатнашты. Улар эштәрен "Башҡорт халыҡ кейеме - реконструкция", "Заманса автор костюмы", "Балалар кейеме", "Башҡорт милли ювелир биҙәүестәре", "Башҡорт традицион костюмы аксессуарҙары" номинацияларында күрһәтте. Эштәрҙе Башҡортостандың Милли әҙәби музейы директоры Гөлдәр Моратова, Рәсәйҙең Дизайнерҙар, ЮНЕСКО-ның Рәссамдар союздары ағзаһы Александр Кирдякин, Р. Кузеев исемендәге Этнология тикшеренеүҙәре институты ҡарамағындағы Археология һәм этнография музейының өлкән ғилми хеҙмәткәре Елена Нечвалода, Өфө художество-гуманитар колледжында ювелир һөнәре буйынса уҡытыусы Миңлегөл Дәүләтова, Республика халыҡ ижады үҙәгенең фольклор буйынса баш белгесе Гөлгөнә Баймырҙина һәм башҡа жюри ағзалары баһаланы.

Конкурсҡа быйыл да сағыу, үҙенсәлекле эштәр тәҡдим ителде. Бигерәк тә боронғо фотоһүрәттәргә ҡарап тергеҙелгән кейемдәр зауыҡлы булыуы менән айырылып торҙо. Был юлы оҫталар балалар кейеменә лә ҙур иғтибар бүлгән: малай-ҡыҙҙар ҡурсаҡтай кейенеп, сәхнә түренә уҙҙы. Милли кейемдә йөҙ-ҡиәфәттәре бөтөнләй башҡа бер төрлө үҙгәреп, күҙҙәре балҡып, һындары турайып киткән балаларҙы күреүе шатлыҡлы булды. Ғөмүмән, конкурста төрлө йәштәгеләр, төрлө социаль статустағы боронғо башҡорт кешеләренең кейемдәре күрһәтелде: урта йәштәрҙәге ир-уҙамандарҙың байрам кейеме, байбисәләр, һөнәрмәндәр, бала-саға, яугирҙар, туй кейемдәрендәге йәш кәләш менән кейәү һ.б. Улар араһында тимер юл хеҙмәткәре булған башҡорт кешеһе образы айырылып торҙо. "Реконструкция булғас, уның тәүсығанағы - гравюраламы, рәсемдәме, фотоһүрәттәме сағылдырылған өлгө булырға тейеш. Шуға күрә, мин "Башҡорт халыҡ кейеме - реконструкция" номинацияһында ҡатнашыу өсөн билдәле рус фотографы Сергей Прокудин-Горский 1910 йылда төшөргән "Башкиръ стрелочникъ" фотоһына мөрәжәғәт иттем. Ул Уралда экспедиция барышында Ҡатаутамаҡ эргәһендә башҡорт милләтле тимер юл хеҙмәткәрен төҫлө фотоға төшөргән. Әйткәндәй, был башҡорттарҙың беренсе төҫлө фотоһы. Ул өҫтөнә сәкмән, аяғына сабата, башына кейеҙ ҡалпаҡ кейгән. Тимер юл хеҙмәткәренең билдегенә сигнал бирә торған бәләкәй флагтар, борғо, карбид фонарь эленгән. Ул осорҙа махсус кейемдәрҙә эшләгән тимер юл хеҙмәткәрҙәре араһында көндәлек кейемендә эшкә сыҡҡан башҡорт кешеһен осратып, фотоға төшөрөп алған булһа кәрәк рус фотографы", - тип таныштырҙы эше менән Артур Батыршин. Әйткәндәй, жюри ағзалары ла башҡорт иратын, ғәҙәттә, яугир, батыр образында күҙәләндерергә һәм шуға ярашлы кейемдәрҙе тергеҙергә тырышыуҙарын, ә бындай ябай эшсән халыҡ вәкилдәрен күрһәтеү яңылыҡ булыуы хаҡында телгә алды.

Италия, Төркиә, Ҡаҙағстан илдәренән, Мәскәү, Ҡурған, Силәбе, Ырымбур, Һамар өлкәләренән, Пермь крайы һәм Башҡортостандан 200-гә яҡын ҡатнашыусынан "сүпләп" алынған бәхетлеләр араһынан төп еңеүсе декабрь айында оло байрам сараһында билдәләнәсәк, тип көтөлә.











ИНТЕРНЕТТАН



# ИРЕҢ ҠЫҘЫУМЫ?

■ Үҙҙәрен агрессив тотҡан ир-егеттәрҙең үҙ-үҙенә ышанысы түбән була. Дөйөм алғанда, бөтөн ир-атҡа ла ирҙәрсә ҡылыҡтар, мәҫәлән, үҙеңде хәүеф аҫтына ҡуйыу, психоактив матдәләр ҡулланыу, агрессияға бирелеү хас. Атланталағы ауырыуҙарҙы контролдә тотоу һәм профилактикалау үҙәге тикшеренеүселәре үҙен ысын ир-егет итеп тоймаған ир-аттың ҡылыҡтарын тикшереп ҡараған. Һынауҙарҙа 18 йәштән 50 йәшкә тиклемге 600 кеше ҡатнашҡан. Улар үҙҙәренең ҡылыҡтары тураһында һөйләгән, уның фекеренсә, ысын ир-егет ниндәй булырға тейеш тигән һорауға ла яуап биргән. Ғалимдар асыҡлауынса, кем үҙен етерлек кимәлдә ҡыйыу һәм көслө тип иҫәпләмәй, улар күпкә агрессивыраҡ булған. Ундайҙар үҙенә ҡорбан табып, уға зыян килтереүҙән дә тартынмай, алкоголде лә йышыраҡ ҡуллана.

■ "Совет спорты" баҫмаһы Zee News сайтына һылтанма яһап, һимеҙ кешеләргә фитнесты С витамины ҡушылған аҙыҡ өҫтәмәләре алыштыра ала, тип яҙа. Колорадо университеты ғалимдары ошондай һығымтаға килгән. Был файҙалы витаминды даими ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына күнегеүҙәр яһаған кеүек тәьҫир итә икән. Тулы кәүҙәле кешеләрҙә эндотелин аҡһымы әүҙемлеге һөҙөмтәһендә ҡан тамырҙары эшмәкәрлеге боҙола, был иһә йөрәк менән бәйле проблемаларға алып килә. Был аҡһымдың әүҙемлеген даими спорт менән шөғөлләнеү генә түбәнәйтә ала. Шуға ла ғалимдарҙың яңы асышы бындай категория кешеләр өсөн еңеллек килтерәсәк. С витамины ҡан тамырҙары эшмәкәрлеген яҡшырта. Һис юғында, С витамины ҡабул иткәндән һуң организмға дәрт өҫтәлеп, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән күнегеүҙәр эшләй башлауы ла бар. Шулай ҙа Швейцария ғалимдары ла был витамин спортсылар өсөн кәрәкле, тип иҫәпләй.

■ Раш университеты ғалимдары яңы диета уйлап тапҡан. MIND диетаһы тип аталған был диета когнитив тайпылыштарҙы (хәтер, аҡыл ҡеүәһенең һәм башҡа когнитив функцияларҙың түбәнәйеүе) булдырмаҫҡа ярҙам итә. 4,7 йыл дауам иткән һынауҙарҙа 960 өлкән йәштәге кеше ҡатнашҡан. MIND диетаһын тотҡандарҙың баш мейеһе 7,5 йәшкә йәшерәк булып сыҡҡан. Йәғни, улар был тайпылыштар менән башҡаса туҡланыусыларға ҡарағанда һуңғараҡ осрашҡан. Диета 15 компонентты үҙ эсенә ала. 10 төркөм аҙыҡ-түлек - мейе өсөн файҙалы, ә 5 төрлө ризыҡтан - ҡыҙыл иттән, майлы аҙыҡтарҙан, фастфудтан, майҙан һәм маргариндан, тәмтомдан баш тартырға кәрәк. Ғалимдар билдәләүенсә, сәләмәт булырға теләгән кеше көн һайын ҡапҡылап алыу өсөн сәтләүектәр ҡулланһын. Борсаҡ кеүек ҡуҙаҡлыларҙы көн аша ашарға кәрәк. Шулай уҡ аҙнаһына ике тапҡыр ҡош ите, еләктәр, балыҡты аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла әҙерләү мөһим. Бынан тыш, көнөнә 1 балғалаҡ аҡ май рөхсәт ителә. Сырға килгәндә, ул көнөнә 1 порциянан артыҡ булырға тейеш түгел.

■ Ҡайһы берәүҙәр ябығыу өсөн диета тотҡандан һуң ит ризыҡтарынан баш тарта. Бындай кешеләргә соя нигеҙендәге диета тоторға мөмкин, ти табиптар. Соя - тәбиғи продукт, ул насар холестерин күләмен кәметә, майҙарҙы яндырырға булышлыҡ итә. Әммә соя продукттарын ун көндән дә оҙағыраҡ ашарға ярамай. Диета мәлендә тулыһынса тәм-томдан, икмәктән, макарондарҙан, картуфтан баш тартырға кәрәк. Йәшел сәй һәм һыу эсеү файҙалы.

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

# АСЫЛЫҢДА ЙӘШӘҮ НИНДӘЙ МӘРТӘБӘ!

**Аҫҡын районының Солтанбәк ауылына тағы юл төштө. Байтаҡ йылдар элек бында һәр башҡорттоң йөрәк яраһы булған Һөйәнтүҙ ваҡиғаһы урынына китеп барышлай һуғылғайныҡ. Тәүҙә ауыл осондағы:**
**Ҡара ла ғына урман, ҡая бите,**
**Шаулайҙыр ҙа микән ел саҡта.**
**Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,**
**Ейәндәрем уҡыр бер саҡта, -**
**тигән яҙыулы таш стела янында туҡталып, ауыл ҡарттары менән осрашып, хәтер яңыртҡайныҡ.**



Ул саҡта ауыл хакимиәте башлығы булып эшләгән Ғазинур Исламов менән ауыл аҡһаҡалы Нурулла ағай Хәсәнов тыуған яҡ тарихы менән айырыуса ҡыҙыҡһына булып сыҡты. Улар Һөйәнтүҙ ауылы тирәһен байҡап сығып, әллә нисәмә урында туғандар ҡәберлегенә лә тап булған. Хатта ошо стелаға урын әҙерләгәндә лә солтанбәктәр боронғо ҡәбер урындарына юлыҡҡан. "Кеше һәм мал һөйәктәре аҙым һайын табыла, - тигәйне ауыл хакимиәте башлығы. - Ә бит дүрт зыяраты бар ауылдың..."

Эйе, был төбәк ошо тарихты һаҡлай, быуындан-быуынға һөйләп ҡалдыра. Килмәк Нурышев, Аҡай Күсемов, Йосоп Арыҡов етәкселегендәге 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы Яйыҡтан Камағаса, Тубылдан Волгағаса ерҙәргә һуҙыла. Ихтилалға Себер юлының балыҡсы, унлар, ҡыр-танып ырыуҙары башҡорттары ла ҡушыла. Улар Ырымбурҙан Әй буйына юлланған каратель экспедицияһы начальнигы урынбаҫары полковник Алексей Иванович Тевкелев етәкләгән отрядҡа һөжүм яһау ниәте менән Һөйән йылғаһының Ҡариҙелгә ҡойған ерендә ултырған Һөйәнтүҙ ауылына йыйыла. Баш күтәреүселәрҙең тупланыу өсөн нишләп тап ошо ауылды һайлауы ла аңлашыла. Ваҡиғалар 1736 йылдың ғинуарында була һәм ихтилалсыларға артабан Әй яғына юлланыр өсөн ҡышҡы боҙ өҫтө уңайлы һанала. Ырымбурҙан йүнәлгән Тевкелевҡа балыҡсы, унлар һәм ҡыр-танып ырыуҙары башҡорттары әҙерләгән һөжүм тураһындағы мәғлүмәт юлда уҡ билдәле була. Был хаҡта уға кем еткергәндер, әлегә был тарихсыларға мәғлүм түгел. Һөйәнтүҙ ауылын Тевкелев 24 ғинуарҙа көтмәгәндә килеп баҫа. Ауылдағы 1 мең самаһы яугир үлтерелә, бала-сағаларҙы, ҡарт-ҡороно, ҡатын-ҡыҙҙы - барлығы 105 кешене һарайға ҡыуып индереп, тереләй яндыралар. Тевкелев бының менән генә туҡталып ҡалмай, яуға әҙерләнгән Себер юлы башҡорттарының башҡа ауылдарына ла теҙгенен бора. Тағы ла 51 ауылды ер менән тигеҙләй, тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса, был төбәктә 15 мең самаһы кешенең йәне ҡыйыла. Ғөмүмән, 1735-1740 йылғы ихтилал ваҡытында башҡорт ерендә барлығы 725 ауыл яндырыла, 40-50 мең самаһы кеше юҡ ителә...

Солтанбәк ауылына ингән урында ҡуйылған стела ошо тарих тураһында һөйләй ҙә инде. Ул ваҡиғаға өс быуатҡа яҡын ваҡыт үтһә лә, "Тәфтиләү" тигән ҡарғыш йыры һаман да бөгөргәрҙә телә. Башҡортҡа ғына түгел, башҡа милләт вәкилдәренә лә тәьҫир итә ул. Мәҫәлән, XIX быуаттың урталарында Юрьев (хәҙер Тарту) университеты студенты әрмән егете Георг Додохьян яугир башҡорттар башҡарыуында "Тәфтиләү"ҙе тыңлағас, һоҡланыуынан иҫ-аҡылы китә һәм шул тәьҫир аҫтында, көйгә таянып, "Цицернак" йырын ижад итә. "Тәфтиләү"гә оҡшаш был көй хәҙерге көндә әрмән халыҡ йыры һәм гимны. Ғабдулла Туҡай ҙа 1912 йылда Өфөгә килгәс, башҡорт халыҡ йыры "Тәфтиләү"ҙе тыңлап тетрәнә һәм уның көйөнә үҙ һүҙҙәрен яҙа. "Тәфтиләү"ҙең "Эй, мөҡәддәс моңло сазым" варианты шулай тыуа ла инде...

Тарихи хәтеребеҙҙе, милли үҙаңыбыҙҙы күпме генә юйырға тырышмаһындар, халыҡ рухын барыбер үлтереп булмай. "Беҙ үҙебеҙҙең башҡорттар икәнебеҙҙе һәр саҡ белдек, - ти ауыл хакимиәте башлығы Ғазинур Исламов, - ләкин беҙҙе мәктәптә татар те-

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# АУЫЛДАР, БӘЙГЕГӘ!

**Башҡортостанда "Айыҡ ауыл" конкурсы башланғанға тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт та үтеп киткән. Тәүҙә ул бер нисә кешенең шәхси инициативаһы булып башланһа, хәҙер инде республика кимәленә күтәрелеп, хатта Рәсәй кимәленә лә сыға башланы - былтырғы конкурс еңеүселәрен 5-се каналдан килеп төшөрҙөләр, күптән түгел Һарытау өлкәһе айыҡлыҡ темаһы буйынса ғилми-ғәмәли онлайн конференция үткәреп, унда Башҡортостан тәжрибәһен Волга буйы федераль округына таратыу фекере лә яңғыраны.**

Быйылғы конкурс сентябрҙә иғлан ителде һәм әлеге ваҡытта уның муниципаль этабы бара. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты үткәргән онлайн-конференцияла ла конкурс сиктәрендә сәләмәт тормош рәүешен пропагандалау, ауыл халҡына наркологик, психотерапевтик ярҙам күрһәтеүҙә ведомство-ара хеҙмәттәшлекте камиллаштырыу, был темаларҙы яҡтыртыуға республика һәм районДарҙың медиа ресурстарын, шул иҫәптән социаль селтәрҙәрҙәге төркөмдәрен йәлеп итеү иғтибар үҙәгендә булды. Ойоштороу комитеты рәйесе, Республика Хөкүмәте вице-премьеры, БР һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин тап йәмәғәт ойошмаларының халыҡ аңына үтеп инерлек яңы ысулдар, йәш быуында яңы ғәҙәттәр булдырыуын билдәләп үтте.

Ойоштороу комитеты рәйесе урынбаҫары, БДБҠ Президиумы рәйесе, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова конкурстың былтырғы тәжрибәләре хаҡында һөйләне һәм быйылғы айырмалыҡтар менән таныштырҙы. Мәғлүм булыуынса, былтырғы конкурста 12 еңеүсе асыҡланғайны һәм улар үҙҙәренең ауылын төҙөкләндереүгә яулаған урындарына ярашлы 2 миллиондан 5 миллион һумға тиклем аҡсалата ярҙамға лайыҡ булды. Еңеүсе 8 ауылда балалар майҙансығы, алтыһында спорт майҙансыҡтары, шул иҫәптән 3 ауылда хоккей ҡумтаһы, берәһендә баскетбол майҙансығы төҙөлөргә, бынан тыш, ял парктары төҙөкләндерелергә, урамдарға ут үткәрелергә, юлдарға асфальт түшәлергә һәм башҡа эштәр башҡарылырға тейеш.

Былтыр конкурстың муниципаль этабында ике меңдән ашыу ауыл ҡатнашһа, быйыл 1537 ғариза ғына бирелгән. Быны тажзәхмәт сиренә бәйле эпидемиологик хәл менән дә аңлатырға мөмкин. Һәр йылдағыса, Баймаҡ районы ҡатнашыусы ауылдар һаны буйынса алдынғылыҡты бирмәй - уларҙан 89 ауыл үҙ көсөн һынай. Ҡалтасы (былтыр - 26, быйыл - 75), Ауырғазы (42 - 73), Дәүләкән (45 - 73), Стәрлетамаҡ (55 - 67) райондары ла әүҙемләшкән. Шулай уҡ Архангел, Благовещен, Иглин, Көйөргәҙе, Мәсетле, Тәтешле, Өфө, Яңауыл райондарынан да ауылдар һаны артҡан, Благовар, Кушнаренко райондарынан - етешәр, Бишбүләк, Йылайыр райондарынан - дүртәр ғариза булған. Башҡа райондарҙан ҡатнашыусылар һаны 11 һәм унан күберәк, 11 районДан - һәр ауыл советынан берәр ҡатнашыусы.

✓ ***Бөгөн беҙ тәбиғәттән, шулай итеп Илаһтан, айырылғандан айырыла барабыҙ. Бетон һәм суйын диуарҙар беҙгә ағастар һәм үләндәр биргән энергияны бирмәй.***






лендә, республикабыҙ - Татарстан, баш ҡалабыҙ - Ҡаҙан тип уҡыттылар. Беҙ хатта Салауат батырыбыҙҙы ҡайҙандыр көньяҡ Башҡортостандан икән тип белә инек. Бәхтиһән, уның тыуған ере беҙгә йылға аша, яҡында ғына булған һәм беҙ үҙебеҙ ҙә Салауат тоҡомдары икән. Шуны һуңғы йылдарҙа ғына белеп, хайран ҡалып йөрөүебеҙ..."

Эйе, хәҡиҡәтте йәшереп, ҡояшты ҡаплап, йылғаларҙы ер аҫтына баҫырып булмай шул.

Ир-егеткәйҙәрҙең өмөттәрен

Тәфтиләүҙәр генә быуа алмаҫ, - тигән юлдар бар "Тәфтиләү" йырында. Оҙайлы йылдар үҙ теленән, сәнғәтенән һәм мәҙәниәтенән ситләтелгән Аҫҡын районы башҡорттары милли асылына ҡайта, шәжәрәләрен тергеҙә, тарих төпкөлдәренән хәҡиҡәт эҙләй, шәхестәрен барлай. Был көндәрҙә лә Солтанбәккә беҙҙе арҙаҡлы шәхестәренең береһе - Шаһийән Миңлеғәлиевтың хәтер кисәһе айҡанлы саҡырҙылар. Унда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты вәкилдәре, райондың үҙенең йәмәғәт эшмәкәрҙәре, тыуған яҡты өйрәнеүселәре йыйылғайны. Аҫҡын районы хакимиәте башлығы Динис Рәдис улы Йосопов та үҙенең урынбаҫарҙары, хеҙмәттәштәре менән сараның башында йөрөнө.

Кем ул Шаһийән Миңлеғәлиев? "Ул аҫҡындарға, яҡташтарға, туғандарға беҙҙең балыҡсы ырыуы шәжәрәһен, беҙҙең тарихи хәҡиҡәтте алып ҡайтыусы, - тип һөйләне Шаһийән ағайҙың ҡустыһы, Солтанбәк ауылында йәшәүсе Рәмил Миңлеғәлиев тантананы асып һәм шәхес тураһындағы хәтирәләре менән уртаҡлашып. - Ағайым республикабыҙҙың күренекле тарихсыларын, ғалимдарын, яҙыусыларын, журналистарын районыбыҙға һәм ауылыбыҙға алып ҡайтып, тарихыбыҙҙы тергеҙеү буйынса ҙур эш башҡарҙы. Ул хәрби кеше ине, оҙаҡ йылдар Украинаның Чернигов өлкәһе Прилуки ҡалаһында, артабан Калуга өлкәһе Козельск ҡалаһында хеҙмәт итте. 1988 йылда Өфөгә күсеп ҡайтты һәм ныҡлап ауыл, ырыу, нәҫел тарихын өйрәнә башланы. 1680 йылдан башлап тергеҙеп, барлап, нәҫел шәжәрәбеҙҙе төҙөнө. Нәҡ ошо шәжәрә балыҡсы ырыуы башҡорттарын асылына алып ҡайтыу өсөн бик ҙур һәм һөҙөмтәле эш булды.

Шаһийән ағай ауылыбыҙҙа юл булмауына, халыҡтың тарихи үткәненә битараф булыуына, нәҫел тамырҙарын өйрәнергә тырышмауҙарына, юғары уҡыу йорттарының башҡорт бүлектәренә беҙҙең уҡыусыларҙың инә алмауына ла гел борсола ине. Ошо мәсьәләләр буйынса ул бик күп ишектәрҙе шаҡып, етәкселәр менән һөйләште. Уның ярҙамы менән байтаҡ егет һәм ҡыҙҙар юғары уҡыу йорттарына инеп, белем алып, бөгөн уңышлы эшләп йөрөй. Ауылда тыуған яҡты өйрәнеү музейын булдырырға кәрәк, тип тә янып йөрөй торғайны. Иң ҡыҙғанысы шул, бөгөн өлгәшелгән уңыштарыбыҙҙы, Солтанбәккә тиклем һалынған тигеҙ юлды, ауылға йәм биреп торған ике ҡатлы социаль-мәҙәни үҙәкте, Һөйәнтүҙ фажиғәһенә иҫтәлегенә ҡуйылған стеланы, хәҙер ауылыбыҙҙың һәр йортонда үҙҙәренең нәҫел шәжәрәләре эленеп тороуын ул күрә алманы. Районыбыҙҙа, ырыуыбыҙҙа барған ыңғай үҙгәрештәрҙе юғарынан күреп, рухы һөйөнөп тороуына ышанам. Шаһийән Миңлеғәли улының тыуыуына 90 йыл тулыу уңайынан таҡташ асылыуына бик шатбыҙ һәм ошо эште ойоштороусыларға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ".

Ҡоролтай ҡунаҡтары билдәләүенсә, ауыл кимәлендә үҙ шәхестәренә арнап бындай таҡташ асыу тәүге тәжрибә һәм бында, әлбиттә, район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Фәйрүзә Юнысова етәкселегендәге әүҙемселәр тырышлығын баһалау кәрәк. Солтанбәктәрҙең дә рәхмәт һүҙе уларға адресланды. Һүҙҙәрендә генә түгел, күҙҙәрендә, йөҙҙәрендә лә ихласлыҡ уты балҡыны ул көндә солтанбәктәрҙең. Матур мәктәп бинаһында ихласлап үҙ һөнәрҙәре, кәсептәре өлгәләрен күргәҙмәгә ҡуйып, сарала ҡатнашыусылар иғтибарына тәҡдим иттеләр. Күмәк балалы ғаиләләр ҙә теҙелешеп тороп, үҙҙәренең балыҡсы ырыуының дауамы һәм киләсәге икәнен раҫлап һүҙ әйттеләр. Мәҫәлән, биш бала тәрбиәләп үҫтереүсе Рәйсә һәм Вәлинур Суфияновтарҙың бер ейәне Динислам ҡунаҡтарға үҙҙәренең шәжәрәһен күрһәтеп, балыҡсы башҡорттары тамырҙары тураһында ентекләп бәйән итте. Мәктәп музейын ойоштороусы, бик күп ҡомартҡы материалдар туплаусы уҡытыусы Фәйрүзә Фағаманова иһә тарихсыларҙан ҡайһы бер һирәк осрай торған экспонаттарға аңлатма биреүҙе үтенде, айырыуса ғорурлыҡ менән балыҡсы башҡорттарына хас милли кейем өлгәләрен күрһәтте. Шулай уҡ балаларҙың да, мәргән уҡсыларҙың да, башҡа милли спорт төрҙәрен тергеҙеүселәрҙең дә сығыштары биҙәне сараны. Солтанбәктең иманлы, нурлы, вайымлы ҡатын-ҡыҙҙары "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына ойошоп, үҙҙәренең етәкселәрен һайлап, ауылдың нурҡото булырға ниәтләнеп ҡалдылар.

Эйе, үҙ халҡының, милләтенең киләсәген ҡайғыртып йөрөүсе тынғыһыҙ зат Шаһийән Миңлеғәлиевтың тырышлығы бушҡа булмаған. Тарихи тамырҙарын белә, һанлай, баһалай Солтанбәктә ололар ҙа, йәштәр ҙә, балалар ҙа. Урта мәктәбендә йөҙгә яҡын бала уҡыған ауылдың, киләсәк быуындарҙың дауамлы булырына ышаныс ныҡ. Шулай булһын!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Онлайн-конференцияла Эльвира Айытҡолова конкурста ҡатнашыусыларға ниндәй методик һәм практик ярҙам ойошторолоуы тураһында ентекләп аңлатты. Мәҫәлән, былтырғы кеүек үк быйыл да республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы тарафынан районлдарға халыҡты эшкә урынлаштырыу һәм уларға һөнәри белем биреү мәсьәләләре буйынса онлайн консультациялар уҙғарылған. Октябрь һуңында ике көн буйына ғаиләләге низағтарҙы иҫкәртеү һәм хәл итеү, ғаиләлә көс ҡулланыуға юл ҡуймау, айырылышыу проблемалары буйынса тура бәйләнеш үткән. Әммә шылтыратыусылар бик аҙ булған. Әйткәндәй, былтыр ҙа бындай саралар ваҡытында шундай битарафлыҡ күҙәтелгән. "Быныӊ сәбәбе - халыҡ шундай консультациялар, ярҙам хеҙмәте булыуы тураһында хәбәрҙар түгел, - тине Эльвира Ринат ҡыҙы. - Ишеткәне лә шылтыратырға йөрьәт итмәй. Бында халыҡ менән эшләү зарур".

БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 1-се Республика наркология диспансерының баш табибы Руслан Арыҫланов ауыл халҡына наркологик ярҙам күрһәтеүҙә ведомство-ара бәйләнеште камиллаштырыу тураһында сығыш яһаны. Бөгөн барлыҡ ҡылынған енәйәттәрҙең - 70, юл-транспорт фажиғәләренең 60 проценты алкоголь ҡулланыу һөҙөмтәһе, тип белдерҙе ул. Быйыл 33 муниципаль районда алкоголизм, психоздар беренсе тапҡыр асыҡланған сирлеләр теркәлгән, шул уҡ ваҡытта "Айыҡ ауыл" конкурсында тотош районы менән ҡатнашҡан төбәктәрҙә бындай хәл күҙәтелмәгән.

Алкоголь ҡулланыу - ул үҙеңдең генә тормошоңдо боҙоу түгел, ғәмәлдә ғаиләлә тыныслыҡ бөтә, ололар ғына түгел, хатта балалар ҙа тынысһыҙға әйләнә, нервылар ҡаҡшай һ.б. Бындай осраҡта ла белгестәр ярҙамы ҙур роль уйнай. Халыҡты психотерапевтик ярҙам менән тәьмин итеү мөмкинлектәре, ярҙам маршруты менән Республика клиник психотерапевтик үҙәге (РКПЦ) етәксеһе Илгиз Тимербулатов таныштырҙы. Бөгөн республикала был йәһәттән өс кимәлле ярҙам күрһәтелә: тәүҙә район үҙәк дауаханаларындағы кабинеттарҙа, һуңынан амбулаторияларҙа, өсөнсө кимәлдә инде РКПЦ-ла. Һәр район медицина округтарына беркетелгән һәм мәғлүмәттәрҙе учреждение сайтында ла табырға мөмкин. Шулай уҡ сайтта табиптарҙың онлайн консультацияһын алырға була. Был хеҙмәттәр барыһы ла бушлай, әгәр кеше аноним булып ҡалырға теләһә - хеҙмәт түләүле.

Онлайн-конференция Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыусылар өсөн ижади флешмоб иғлан итте - унда барлыҡ ижади фантазияны эшкә ҡушырға һәм барлыҡ алымдарҙы ҡулланырға мөмкин, әммә төп маҡсат бер булырға тейеш: халыҡта сәләмәт тормош рәүешен формалаштырыу, алкоголизмды профилактикалау. Эйе, тап профилактикалау, сөнки БДБК Президиумы ағзаһы, медицина фәндәре докторы Сәлиә Мырҙабаева белдереүенсә, барлыҡ эшмәкәрлек, конкурстар һәм башҡа саралар алкоголизмдың беренсел диагнозын асыҡлауға түгел, ә уны алдан иҫкәртеүгә, булдырмауға йүнәлтелгән. Был инде алкоголь ҡулланыуҙы сикләү түгел, ә уны бөтөнләй ҡулланмау тигәнде аңлата, республикала уның хоҡуҡи нигеҙе ҡанунлаштырылған менән дә ныҡытылған.

Әйткәндәй, ауылдарҙа, айырым муниципалитеттарҙа алкоголь һатыуҙы бөтөнләй тыйыу мөмкинме? Быға нисек өлгәшергә? Ошо һәм башҡа һорауҙарығыҙҙы 1 декабрҙә ауылдарҙа ойоштороласаҡ бушлай юридик консультацияларҙа бирә һәм асыҡлай алаһығыҙ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Яҙмышыңды яҡшыртыу өсөн тәбиғәттән нисек ярҙам алырға

Бөйөк мәҙәниәт булдырған боронғо гректар бик йыш тәбиғәтте күҙәтеп, унан илһам алған.

Мөхәббәт һәм матурлыҡ алиһәһе Афродита үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһында яңынан тыуыу һәләтенә эйә булған. Ҡая аша тишеп сыҡҡан тамырҙар, елдең көсө һәм һыу ташыу, һыу ҡайтыуҙарҙың еңелмәҫ көсө гректарҙы Аполлон тураһындағы күҙаллауҙарға илһамландырған. Тәбиғәт һыҙаттары грек колонналарында һәм башҡа архитектура мотивтарында сағылыш тапҡан.

Бөгөн беҙ тәбиғәттән, шулай итеп Илаһтан, айырылғандан айырыла барабыҙ. Бетон һәм суйын диуарҙар беҙгә ағастар һәм үләндәр биргән энергияны бирмәй.

Тәбиғәт мейенең уң яҡ ярымшары ярҙамында Ижадсы менән әүҙем бәйләнеш программалауҙа ярҙам күрһәтә ала. Паркта йәки яланда йөрөүҙән максималь файҙа алыу өсөн аңығыҙҙы үләндәрҙә, ҡыуаҡтарҙа һәм ағастарҙа булған йәшәү көсөнә йүнәлтегеҙ. Уларҙың ярҙамын физик терәк итеп кенә тоймағыҙ, ә энергетик һыт биреүсе итеп ҡабул итегеҙ. Үҙҙәренең булмышы, ҡыштырлауы, еҫе аша улар һеҙгә Илаһ менән бәйләнештә булыуын хәбәр итә икәнен тойоғоҙ.

Тәбиғәт донъяһы буйлап яҡшы, әүҙем сәйәхәт ҡылыуҙан тыш, Филлс Диллер әйткән "яҡшы, әүҙем ултырыу"ҙы ла күҙ уңынан ысҡындырмау файҙалы. Ултырып, күҙҙәрегеҙҙе йомор һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, үҙегеҙҙең яҡты нурға сорналған Юғары Минегеҙҙе күрер өсөн тәбиғәттән дә ҡулай урын табып буламы икән?! Бүрәнәлә, үләндә, шәп ағыусы йылға эргәһендә уңайлы итеп урынлашып, бер нисә секундҡа көсөргәнештән ҡотолоп, бер нисә тапҡыр тәрән итеп тын алып, Ижадсыны яратығыҙ...

Күрерһегеҙ, был һөйөү ике яҡлы.

## Ыңғай фекерләү өсөн уйҙарыңда таҙарыныу шарт

Тәбиғәткә һоҡланып, һеҙ ыңғай фекерләү юлында бик күп ҡаршылыҡтарҙан ситләшәһегеҙ. Бындай кәртә булып йыйыштырылмаған өй, эштәге ҡыйынлыҡтар, кире энергия биргән һүҙҙәрҙе көндәлек тормошта ҡулланыу ғәҙәте тороуы ихтимал. Былардың һеҙҙе сикләнгән һәм пессимистик фекерләргә мәжбүр итеүен танығас, һеҙ уйығыҙҙа таҙарыныуға программалаша алаһығыҙ.

Өйөгөҙҙө йыйыштырмағанһығыҙмы? Көсөргәнештән арынығыҙ ҙа, уйығыҙҙа соланды, гаражды, өй башын һәм башҡа бысраҡ урындарығыҙҙы таҙартыуығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Быны бер нисә тапҡыр ҡабатлағас, тузып ятҡан кәштәләргә, кәрәкмәгән әйбер өйөмдәренә башҡаса түҙеп торор көсөгөҙ юҡ икәнен аңларһығыҙ. Иртәме-һуңмы, һеҙ йыйыштырыныу өсөн ваҡыт табырһығыҙ. Был физик таҙалау ғына түгел, уйҙарҙа таҙалау ҙа буласаҡ.

Хәҙер эш тураһында. Ни тиклем күберәк эшләһәгеҙ, һеҙгә шул тиклем күберәк өйләр, ә етәксегеҙ сәбәп булһа ла, булмаһа ла һеҙҙе әрләй. Һеҙгә эшегеҙҙе яҡшыраҡ итеп ойошторорға кәрәк. Уйҙарығыҙға тәьҫир итеү һәм тормошҡа ҡарашығыҙ күҙлегенән ҡарағанда, был йыйыштырылмаған өйҙән яҡшыраҡ түгел. Ыңғай фекерләү һәләтен һәм "теге яҡтан" ярҙам алыр өсөн һеҙгә уйҙа ғына таҙарыныу кәрәк. Тап шулай, көсөргәнештән арынып, һеҙ үҙегеҙҙең өй таҙалағаныҒыҙҙы күрҙегеҙ, тап шул рәүешле эшегеҙҙең тәртипкә һалыныуын да күрерһегеҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 29 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Кулагины. Ловушка". [16+]
16.00 Т/с "Кулагины. Отложенный разрыв". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20, 3.15 Т/с "Идиот". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Д/ф "Дело совести". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45, 20.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 М/ф "Крылья". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Все, кроме любви". [16+]**
**3.15 Спектакль "Необычная история в обычной деревне". [12+]**
**5.15 "100 шагов на войне..." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**

## 30 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Кулагины. Щелочь". [16+]
16.00 Т/с "Кулагины. Грехи прошлого". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20, 3.15 Т/с "Идиот". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика live #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.00, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.20 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**17.00 Интервью. [12+]**
**17.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**18.30, 22.00 "Уфимская волна-2021". Финал музыкального конкурса радио "Спутник ФМ".**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Сады осенью". [16+]**
**3.15 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**5.15 Мы дети войны. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 1 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Кулагины. Иволга". [16+]
16.00 Т/с "Кулагины. Негодное покушение". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20, 3.15 Т/с "Идиот". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Д/ф "Ҡуласа". [12+]**
**17.00 Д/ф "Золотое наследие". [12+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Тайны дворцовых переворотов. Завещание императора". [12+]**
**2.45 Спектакль "Не женщина - дракон". [12+]**
**4.30 "Алтын тирмә". [0+]**
**5.15 "100 шагов на войне..." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 2 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Кулагины. Добрый самаритянин". [16+]
16.00 Т/с "Кулагины. Всего лишь ноль". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20, 3.15 Т/с "Идиот". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Д/ф "Ҡуласа". [12+]**
**17.00 Д/ф "Золотое наследие". [12+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Этно-краса". [12+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика live #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Тайны дворцовых переворотов. Завещание императрицы". [12+]**
**2.45 Спектакль "На том и на этом свете". [12+]**
**4.15 Автограф. [12+]**
**4.45 Д/ф "Дело совести". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 3 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Кулагины. Жажда". [16+]
16.00 Т/с "Кулагины. Фантик". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Аншлаг и Компания. [16+]
23.50 Торжественная церемония вручения Российской национальной музыкальной премии "Виктория".
1.55, 2.50 Т/с "Идиот". [12+]
3.45 Т/с "Личное дело". [16+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "Георгий Данелия. Вечный обманщик". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика live #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.30 Автограф. [12+]**
**14.00 Мы дети войны. [12+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Уфа. Живое. [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45, 20.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Тайны дворцовых переворотов. Я-император". [12+]**
**2.00 Спектакль "Семь девушек". [12+]**
**4.00 Әлләсе... [12+]**
**4.45 "Бай". [12+]**
**5.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 4 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Несломленная". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "И в счастье и в беде". [12+]
1.10 Х/ф "Злая судьба". [12+]
4.23 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 19.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 Преград. Net. [6+]**
**10.15 "Этно-краса". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Москва). КХЛ.**
**19.30 "Память сердца". [12+]**
**20.00 Ради добра. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Тайны дворцовых переворотов. Падение Голиафа". [12+]**
**2.15 Спектакль "Эх, друг Байтимер..". [12+]**
**4.00 Башҡорттар. [12+]**
**4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.15 "100 шагов на войне..." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**5.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 5 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.20, 3.25 Х/ф "Обет молчания". [16+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Петросян-шоу. [16+]
13.30 Т/с "Несломленная". [12+]
18.40 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40, 0.10 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
23.15 Д/ф "30 лет без Союза". [12+]
1.45 Х/ф "Дуэль". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "Сулпылар". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.00 "Елкән". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Созвездие талантов". [6+]**
**19.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика live #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Х/ф "Тайны дворцовых переворотов. Вторая невеста императора". [12+]**
**1.30 Спектакль "Банкрот, или свои люди сочтемся". [12+]**
**3.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**4.30 Спортивная история. [12+]**
**5.00 "Память сердца". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

*ИҒЛАН*

Студенческий билет и зачетную книжку № С-2188 на имя Саубанова Салавата Сулпановича, студента УКСиВТ, в связи с утерей считать недействительным.

## *СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 ноябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**1 декабрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 10.00 16+
**"Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтовтың повесы буйынса, А. Ишбулдина). 12+
**2-3 декабрь Премьера! "Балам"** (В. Емелева), спектакль-терапия. 16+
**4 декабрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). Ә. Хөсәйеновтың юбилейына арнала. 18.00 16+
**5 декабрь "Һөйәркә"** (Т. Миннуллин), драма. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 декабрь "Униженные"** (З. Биишева), драма. 12+
**3 декабрь "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айытматов), хикмәт. 12+
**4 декабрь "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 16+
**5 декабрь "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00 0+
**"Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**2 декабрь "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова), бэби-спектакль. 11.00, 16.00 0+
**4 декабрь "Любовное приключение"** (В. Аношкин). 18.00 18+
**4-5 декабрь "Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). 11.00, 13.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**30 ноябрь "В сердце светит Русь"**, С. Есенинға арналған музыкаль-әҙәби кисә. 6+
**2 декабрь "В сердце светит Русь"**, С. Есенинға арналған музыкаль-әҙәби кисә. 11.00, 13.00 6+
**3 декабрь "Бах, джаз и "Лунная соната"**, органсы Д. Ушаков концерты. 6+
**5 декабрь "Сюрпризы зимнего органа"**, ғаилә өсөн концерт. 15.00 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**2-3 декабрь Премьера! "Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин әҫәрҙәре буйынса, Н. Ғәйетбай), хикәйәт. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**2 декабрь "Конец игры"** (З. Сөләймәнов", йәштәр өсөн социаль драма. 11.00 12+
**3 декабрь "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 10. 00 0+
**4 декабрь "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 13. 00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 декабрь "Сердце на снегу"**, концерт. 19.00 6+
**2 декабрь "Ҡарауыл! Атай өйләнә?!"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 12+
**3 декабрь "Нисек кейәүгә сығырға"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 12+
**4 декабрь "Хушығыҙ, хыялдарым"** (Ә. Атнабаев), драма. 18.00 12+
**5 декабрь "Витаминки спешат на помощь"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+
**"Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Ноябрь - Декабрь (Рабиғел ахыр - Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (24) дүшәмбе | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 30 (25) шишәмбе | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 1 (26) шаршамбы | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 2 (27) кесе йома | 7:49 | 9:19 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 3 (28) йома | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 4 (29) шәмбе | 7:52 | 9:22 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 5 (1) йәкшәмбе | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ ***Еңеүселәрҙең исеме 3 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Ҡурай даны" милли телевизион премияһын тапшырыу тантанаһында иғлан ителәсәк.***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 28 НОЯБРЬ - ӘСӘЙҘӘР КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**46-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡая. Әсә. Алҡым. Эверест. Баул. Ҡорған. Мәрҙәс. Жанр. Кои. Нимфа. Туған. Шварц. Ашлама. Гимназия. Вертолет. Тәүү. Бата. Тәре. Герб. Оя. Негр.

**Вертикаль буйынса:** Мифтахов. Буранғолов. Нөгәр. Элиста. Тотҡон. Ямалетдинов. Ебегән. Емтек. Зита. Әхмәтҡужин. Аяҡ. Айбар. Мөлкәт. Ғөрәф. Нужа. Айыу.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



# ҠУЛЫҢДА ҠАҒЫҘ БУЛҺЫН!

**Республика халҡы 16 ноябрҙән вакцинация йәки COVID-19 инфекцияһы менән ауырыу тураһында сертификат һәм ҡағыҙ QR-кодҡа эйә була ала. Уны "Дәүләт хеҙмәте" порталында алдан теркәлмәйенсә лә күп функциялы үҙәк офисында алырға мөмкин. Үҙегеҙ менән паспорт, СНИЛС, Мотлаҡ медицина страховкаһы полисы, инглиз телендә данаһы кәрәк булһа, сит ил паспортын алып барырға кәрәк. Яҙма рәүештәге ышаныс ҡағыҙы менән башҡа кешенекен дә алырға була.**

Сертификатта вакцинация ваҡыты, препарат исеме күрһәтелмәй, унда тик QR-код, шәхси мәғлүмәт һәм дата ғына ҡуйыла. Иң мөһиме - документтың һул яҡ мөйөшөндәге QR-код. Бер ниндәй ҙә мисәт юҡ, шуға күрә МФЦ-ға бармайынса ла уны һәр кем үҙе ҡағыҙға сығарып алырға мөмкин.

Электрон төрҙә ҡуллана белгәндәр өсөн йәмәғәт урындарына барғанда был сертификатты мобиль ҡоролманан (телефондан) күрһәтеү ҙә етә. Был хеҙмәт менән йәшәргә рөхсәт булған сит ил граждандары ла ҡуллана ала.

Сертификатты ике ысул менән ҡағыҙға сығарып алырға мөмкин. Әгәр "Дәүләт хеҙмәте"нә инеү паролен онотһағыҙ, ғариза ҡабул итеү тәҙрәһенә мөрәжәғәт итегеҙ. "Шәхси кабинет"ҡа инә алғандар дөйөм файҙаланыу тәҙрәһендә ҡағыҙға үҙаллы сығарып ала. Был хеҙмәт айырыуса интернет менән файҙалана белмәгән оло йәштәгеләр өсөн ҡулай. Был хаҡта статистиканан да күренә: яңы ҡағиҙә ғәмәлгә ингән тәүге өс көндә сертификат сығарып алырға мөрәжәғәт иткән 3279 кешенең 1836-һы - 60 йәштән үткәндәр.

Хеҙмәтте алырға барғанда сертификат йәки коронавирус менән ауырыу тураһында мәғлүмәт булмаһа, вакцина һалдырған медицина ойошмаһына мөрәжәғәт итергә йәки "Дәүләт хеҙмәте" сайтында "Сертификаты и QR-коды" бүлегенең "Сообщить об ошибке" өлөшөндә яҙыу ҡалдырырға мөмкин.

Вакцинация сертификаты һәм QR-код бөтә ерҙә лә талап ителә. Рәсәй Хөкүмәте Дәүләт Думаһы йәмәғәт урынында QR-кодтың мотлаҡ кәрәклеге хаҡында закон проекты әҙерләне. Был ҡанун 2022 йылдың 1 июненә тиклем бойомға ашырылыуы күҙаллана.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# "ҠУРАЙ ДАНЫ" КЕМГӘ?




**3 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Ҡурай даны" милли телевизион премияһын тапшырыу тантанаһы үтә.**

"Ҡурай даны" милли телевизион премияһы 2018 йылда "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһының "Ҡурай-ТВ" музыкаль-күңел асыу телеканалы башланғысында ойошторола. Үҙ эшендә уңышҡа өлгәшкән замандаштарыбыҙҙы асыҡлау һәм халыҡҡа танытыу, башҡорт телен, милли мәҙәниәтте һаҡлау, популярлаштырыу һәм пропагандалау, халыҡ йолаларын, кәсептәрен үҫтереү маҡсатын ҡуйған телепремия "Ҡурай-ТВ" каналының иң әһәмиәтле проектына әйләнде һәм киң танылыу алды.

Премия үҙ өлкәһен үҫтереүгә тос өлөш индергән, һөнәри даирәлә абруй ҡаҙанған эшмәкәрҙәргә, ҡул оҫталарына, аграрийҙарға, эшҡыуарҙарға, ижад әһелдәренә, шулай уҡ төрлө яҡлап танылыу алған тотош ғаиләләргә тапшырыла.

2020-2021 йылдарҙа телепремияға "Ҡурай" каналы тамашасылары тәҡдим иткән исемлектән 45 дәғүәсе һайлап алынды. Был юлы "Ҡурай даны" милли телевизион премияһы өсөн көрәш 9 номинацияла үтә: "Ер кешеһе", "Һөнәр оҫтаһы", "Эшлекле ханым", "Ҡул оҫтаһы", "Ижади ғаилә", "Миһырбанлы ғаилә", "Спорт ғаиләһе", "Йыл тренеры", "Йыл режиссеры". Премияның төп принцибы - еңеүселәрҙе ғәҙел юл менән билдәләү. 2020-2021 йылдарҙа БСТ һәм "Ҡурай-ТВ" каналдарында һәр номинант тураһында тапшырыу эфирға сыҡты. "Ҡурай даны" көмөш миҙалына эйә булыусыларҙы тамашасылар интернет-тауыш биреү юлы менән һайлай.

Еңеүселәрҙең исеме 3 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Ҡурай даны" милли телевизион премияһын тапшырыу тантанаһында иғлан ителәсәк. Тантаналы саранан репортаж Башҡортостан юлдаш телеканалында һәм "Ҡурай-ТВ" каналдарында күрһәтеләсәк.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө ҡалаһынан** Зәкиә Ҡунаҡасова, Айгөл Шәрәфетдинова, **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Нәркәс Төхвәтуллина, **Ейәнсура районы** Яңы Павловка ауылынан Айнур һәм Азамат Әлмөхәмәтовтар, **Ҡариҙел районы** Магинск ауылынан Радим Амураков, Ҡариҙел ауылынан Заһит Мөрсәйев, **Ишембай районы** Аҙнай ауылынан Әнисә Хәйбуллина, **Мәләүез ҡалаһынан** Сәйфулла Әмиров, **Мәләүез районы** Эткөсөк ауылынан Миңзәлә Сангишева, **Дүртөйлө районы** Әсән ауылынан Лариса Кәримова, **Өфө районы** Шамонин ауылынан Сания Исламетдинова, Динә Ханова, **Сибай ҡалаһынан** Ринат Арғынбаев, Фәйрүзә Абызгилдина, Рәмилә Бүләкәнова, Азат Бүләкәнов, Эльвира Ғиззәтуллина, Илгиз Заманов, Әлфирә Ҡаҙаҡбаева, Ғайсар Моратов, Йәмил Нурмөхәмәтов, Азат Нәбиуллин, Рәмзиә Сөнәғәтова, Мансур Тайсинов, Зинира Шәһиева һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, оҙон бхетле ғүмер, ғаилә имenлеге, ҡыуаныс-шатлыҡтар теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ӘЙТӘГҮР!

**Был көндәрҙә "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы үҙенең 20 йыллыҡ юбилейын байрам итте. Бөгөн уның составына Башҡортостан юлдаш телевидениеһынан тыш, тағы ла "Тамыр", "Ҡурай-ТВ", "Сәләм" каналдары һәм "Юлдаш", "Спутник ФМ" һәм "Ашҡаҙар" радиолары инә. Тәүлек әйләнәһенә башҡорт һәм урыҫ телдәрендә барған телетапшырыуҙарҙы 40 миллиондан ашыу кеше ҡарай. Радио тыңлаусылар һаны ла байтаҡ. Юбилейын билдәләүсе компания тураһында тамашасыларҙың фекере менән ҡыҙыҡһындыҡ.**

# ТАҒЫ ЛА ЯҠШЫРАҠ БУЛҺЫН!




***Әлиә Әмирова, "Көнгәк" гәзите баш мөхәррире:*** Башҡортостан юлдаш телевидениеһы каналының йылдан-йыл төрлө тапшырыу менән тулылана, яңыра барыуы оҡшай. "Яңылыҡтар", "Автограф", "Сәләм"де, балалар өсөн тапшырыуҙарҙы, ретро йырҙарҙан торған концерттарҙы яратып ҡарайым. Кескәйҙәргә арналған эфирҙарға айырым иғтибар бүләм, сөнки үҙемдең Искәндәр исемле шуҡ ҡына, йор һүҙле улым үҫеп килә. Балаларға тәғәйенләнгән туған телдә сыҡҡан тапшырыуҙар бигерәк һөйөндөрә, улар фәһемле лә, тәрбиәүи әһәмиәткә лә эйә. Заманса йырҙарҙы өнәмәйем. Һүҙҙәре мәғәнәһеҙ, көйө күңелгә ятмағандары "экрандың йәмен" ебәрә. Тәнҡиткә күсеп киткәс, бер ыңғайҙан әйтеп үткем килә: "урыҫ теленән тәржемә ителгән һүҙҙәргә күберәк иғтибар бирһәндәр ине. Ғөмүмән, зәңгәр экрандарҙа үҙ телебеҙҙә кинәнеп, рәхәтләнеп тапшырыуҙар ҡарай алыуыбыҙ үҙе ҙур бәхет.

***Лилиә Хәбибова, БР Транспорт һәм юл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте етәксеһе:*** Мин, башлыса, беҙҙең эшмәкәрлекте яҡтыртҡан тапшырыуҙарҙы ҡарайым. Шулай уҡ "Республика лайф", "Дөрөҫөн әйткәндә" (Честно говоря), "Хәҡиҡәт министрлығы" кеүек мәғлүмәти-аналитик тапшырыуҙарҙың барлыҡҡа килеүе һәм уңышлы эшләүе тамашасыға ошондай форматтағы сығыштарҙың кәрәклеге тураһында асыҡ һөйләй. Ғөмүмән, миңә тура эфирҙар, тегеге йәки был сараны сәғәте-минуты менән сағылдырып барыуҙары оҡшай һәм шуға күрә ошо форматтағы тапшырыуҙарҙың күберәк булыуын теләр инем.

Мин, ҡалала тыуып үҫкән кеше булараҡ, республиканың төрлө төбәгендә урынлашҡан ауылдар тураһындағы "Бер ауыл тарихы" тапшырыуын ҡыҙыҡһынып ҡарайым. Шулай уҡ Өфөнөң иҫтәлекле урындары, һәр районы, халыҡ телендә бүлеп йөрөтөлгән билдәмәләр, баш ҡалала йәшәүселәрҙең яҙмышы тураһында ла ҡыҙыҡлы тапшырыуҙар эшләп булыр ине, тигән уйым бар. Уҡыу йорттары тураһында мәғлүмәти тапшырыуҙар булһа, бөгөнгө мәктәп уҡыусыларына киләсәктә һөнәр һайлау еңелерәк булыр ине. Һәр уҡыу йортоноң тарихы, бөгөнгө йәшәйеше, студенттар тормошо һәм башҡа йүнәлештәре хаҡындағы тапшырыуҙар мотлаҡ үҙ тамашасыһын табасаҡ.

***Сәлих Әминев, хаклы ялда, Бөрйән районы:*** Юбиляр дәүләт каналы тулҡындарында республика тормошон төрлө яҡтан сағылдырған тапшырыуҙар етерлек, шулай ҙа халыҡсанлыҡ күберәк булһа ине, тип теләге килә. Төбәк халҡы бөгөн нисек йәшәгәнен баш ҡала күҙлегенән түгел, ә урындарға сығып та белһен ине телевидение һәм радио хеҙмәткәрҙәре. Бөрйән төпкөл ауылға барып, урындағы халыҡты борсоған мәсьәләләр күрһәтелһә, ауыл аҡһаҡалдары һәм ағинәйҙәренең фекерҙәре ишетелһә, ауыл йәштәренең нимә менән шөғөлләнеүе һөйләнелһә, урындағы халыҡҡа ла файҙа булыр ине, шулай уҡ етәкселәр ҙә хәл ителәһе мәсьәләләр тураһында ишетеп-күрер ине.

Көнелдә өйкәгән күренештәр тураһында ла әйтеп үтһәм, үпкәләмәҫтәр, сөнки мин бары тик каналдың тағы ла яҡшыраҡ булыуын теләйем. Мәҫәлән, алып барыусылар һауа торошон күрһәткән саҡта тик кенә тороп һөйләйҙәр. Башҡа каналдарҙағы алып барыусылар күтәренке рухлылар, хатта үҙеңде улар эргәһендә тораһың тип хис итә башлайһың. Ә беҙҙекеләр тик өҫ кейеме һәм дары рекламалай кеүек.

Быйыл республикала үткән фольклориаданы матур күрһәттеләр, хуплайым. Өфөнән алыҫ булһаҡ та, ҡатнашыусыларҙың һәр сығышын ҡарап ҡыуанып ултырҙыҡ. Олоғайгас, төндәрен йоҡо алмай ятыла ла, тороп телевизор тоҡандырам. Канал көнө-төнө күрһәтә, униһы яҡшы, ләкин ни өсөн башҡортса спектаклдәр төнгө 3 тирәһенә ҡуйыла? Ғәҙәттә спектакль алдынан күрһәтелгән фильм менән урындарын алмаштырып булмаймы икән? Шулай ҙа иң яратып ҡараған тапшырыуым - "Бай" программаһы. Үҙ эшен булдырып, бер ниндәй ауырлыҡҡа ҡарамайынса алға барған кешеләрҙең күп булыуына ҡыуанып бөтә алмайым. Улар араһында ололар ла бар, йәштәр ҙә етерлек. Ниндәй генә эшмәкәрлек алып бармайҙар, әллә күпме кешегә эш урыны бирәләр, тик маҡтауға ғына лайыҡ улар. Алып барыусы Гөлдәр Ишҡыуатованың һәр бер темаға төплө өйрәнеп, бөтә нескәлегенә төшөнөп тапшырыу эшләүе "Бай"ҙы тамашасыға яҡынайта. Шулай уҡ уның камера алдында үҙен тәбиғи тотоуы, тәүге тапҡыр ишеткән мәғлүмәтте балалар һымаҡ ихлас аптырап ҡабул итеүе тапшырыуҙы ябай һәм тере итә.

***Айгөл Хәкимова, Волгоград ҡалаһы:*** Тыуған ерҙән алыҫта булғас, үҙ телебеҙҙе ишетеүгә һыуһап, моңобоҙға сарсап йәшәйбеҙ. Шуға күрә өйҙә тәүлек әйләнәһенә тиерлек Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ҡабыҙылған була. Балалар ҙа ихлас ҡарай, үҙебеҙ иһә, күңелгә оҡшаған тапшырыуҙар башланһа, эштәрҙе ташлап, телевизор алдына килеп ултыра һалабыҙ. Мин "Байыҡ", "Алтын тирмә", "7 егет", "Ҡүстәнәс", "Башҡорт йыры" кеүек тапшырыуҙарға өҫтөнлөк бирәм, ирем "Башҡорттар", "Теге өсәү"ҙе, "Яңылыҡтар"ҙы ҡарай. Иртәнге "Сәләм"де бөтә ғаиләбеҙ менән яратып ҡарайбыҙ. Алдағы көндәрҙә республикалағы экологик хәл тураһында һөйләүсе тапшырыуҙарҙы күберәк күрергә теләр инем. Шулай уҡ башҡорт телендә сәйәхәт темаһын да күтәрһәгеҙ ине, беҙ, алыҫта йәшәүселәр, үҙебеҙҙең телдә тыуған еребеҙҙең матурлығын тағы ла бер күреп ҡыуанып инек.

***Искәндәр Ғәлимов, 7-сы синыф уҡыусыһы, Өфө ҡалаһы:*** "Тамыр" иң яратҡан каналдарымдың береһе. Унда күрһәтелгән яңылыҡтарҙы ла күҙәтеп барам, сөнки минең йәштәштәрем тураһында, мәктәп уҡыусыларына ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән танышырға була унда. Шулай уҡ саҡырылған ҡунаҡтың портретын эшләп, шул уҡ ваҡытта унан төрлө һорауҙарға яуап алған тапшырыу оҡшай. Беҙ, ололар һымаҡ, һорауҙарҙы оҙаҡ итеп уйлап, яйлаштырып тормайбыҙ, нисек уйлайбыҙ, шулай һорайбыҙ һәм килгән ҡунаҡтарҙы асыҡтан-асыҡ яуап бирергә "этәрәбеҙ". Бәләкәйерәк саҡта концерттарҙы яратып ҡарай инем, хәҙер, үҫкәс, күберәк "Бирешмә. Профи", "Әлләсе", "Байтус"ты үҙ итәм. Уларҙың һәр береһе үҫмерҙәргә файҙалы мәғлүмәт бирә, алып барыусылар һәйбәттәр. Яратҡан каналыма тик уңыштар теләйем.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӨРӘК ТАР БУЛҒАНДА...

## ерҙең киңлегенән ни файҙа

Өс нәмә кешене ҡартайтыр: йөрәмһеҙ ат, үтмәҫ бысаҡ, яман ҡатын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр саҡ буйың етмәгән нимәгәләр ғашиҡ булып йәшәргә кәрәк. Юғарыға ынтылыуҙан кешенең буйы ла юғарыраҡ булыусан.

**(М. Горький).**

Ҡайһы саҡта беҙ ҡурҡҡан нәмәләрҙең ҡурҡыныс беҙ теләгән нәмәләрҙән аҙыраҡ була.

**(Д. Коллинз).**

Ел ялҡынды тоҡандыра ла, һүндерә лә ала. Шуның һымаҡ, бер теләк ҡайһы саҡ икенсеһен баҫа ла ҡуя.

**(Овидий).**

Тормоштан көтөлмәгән бүләктәр көтөп йәшәүҙән туҡта ла, тормошоңдо үҙең ҡора башла.

**(Л. Толстой).**

Халыҡ ике төрлө юл менән - закондарҙы күҙәтмәгәндә, йә закон тарафынан боҙола. Икенсеһе - иң ҙур яуызлыҡ, сөнки боҙоҡлоҡ бит дауалау сараһының үҙенә һалынған була.

**(Ш. Монтескье).**

Ваҡыт - яҡшы уҡытыусы ла ул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул үҙенең уҡыусыларын үҙе һәләк итә..

**(Гектор Берлиоз).**

Мәжлескә йыйылған ҡунаҡтар ике төрлө була: береһе иртәрәк ҡайтып китергә теләй, икенсеһе оҙаҡҡараҡ ҡалыуҙы көҫәй. Бөтә ауырлыҡ шунда: улар, ғәҙәттә, ирле-ҡатынлы була...

**(Энн Ландерс)**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ир егерме йыл буйы һәр кис һөйәркәһенә барып, уның менән кәрт уйнап, һөйләшеп ултырыуҙы ғәҙәт итеп алған. Бына бер саҡ уның ҡатыны донъя ҡуя. Шул саҡ туғандары иргә былай ти: "Беҙ һинең егерме йыл буйы һөйәркә тотҡаныңды беләбеҙ, хәҙер инде уға өйләнеп, өйөңә алып ҡайтһаң да була". Әммә ир үҙенең туғандары менән ризалашмай. "Юҡ, юҡ, мин уға өйләнә алмайым. Үҙемдең егерме йыл дауам иткән ғәҙәттәремдән нисек айырылайым? Уны өйгә алып ҡайтһам, кистәрен кемгә барып, кем менән гәп һатырмын, кемгә үҙ проблемаларым хаҡында һөйләрмен?" Ғәҙәт тигәнең шулай бына..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
26 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1435